ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# Киске Өфө
25-1 апрель - май (алағарай - һабанай) 2025
№16 (1160)
kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**"Биҙәк"тең еңеүсе биҙәктәре**



6

**Башҡорт киноһы...**



донъя кимәленә сыға алырмы? 8-9

**Рухы камил, аҡылы тәрән...**



11

**Холоктарын төҙәтеп,**

донъяға икенсе кеше булып баҕалар



12-13

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

*Яҡшы һүҙ әйтте, тип һөйөнмә, ихласлығын белмәйенсә,
Яман һүҙ әйтте, тип көйөнмә, көнсөллөктән икәнен белмәйенсә.
(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАЙРАҠ - ИЛҺӨЙӘРЛЕК БИЛДӘҺЕ

**112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының легендар Ҡыҙыл байрағы, реставрацияһынан һуң, Өфөгә ҡайтты. Башҡортостандың Милли музейында байраҡтың тарихы, уны реставрациялау барышы тураһында һөйләнеләр һәм реставрация эштәренең һөҙөмтәләрен күрһәттеләр.**

- Был байраҡҡа 80 йылдан ашыу ваҡыт үткән, шуға уны реставрациялау талап ителә ине. Был 16-сы гвардия дивизияһының хәрби байрағы түгел, был шеф байрағы, Башҡорт АССР-ы Юғары советы Президиумы тапшырған 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының иң беренсе байрағы. 1942 йылда Миңлеғәле Шайморатов фронтҡа юлланыр алдынан байраҡ төркөмөнә тап ошо Ҡыҙыл байраҡты тапшырған, - тип һөйләне музейҙың төп һаҡлаусыһы Зилә Ниғмәтуллина. - Һуңынан, 1945 йылдан 1963 йылға тиклем, байраҡ Мәскәүҙә, Ҡораллы көстәрҙең Үҙәк музейында һаҡлана. Өфөгә "Бик йәшерен" грифы аҫтында ҡайтҡас, байраҡ музейға ҡуйыла, әммә ваҡыт үтеү менән экспозиция ҡиәфәтен юғалта һәм запаста һаҡлана. Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығы алдынан беҙ етәкселек ярҙамында ошо байраҡты реставрацияларға булдыҡ.

Ике яҡлы байраҡ тәүҙә ебәк репстан эшләнгән, рус һәм башҡорт телдәрендә яҙыуҙар бар. Мәскәүҙә реставрациялау эштәре дүрт айға яҡын дауам иткән.




- Артефакттар донъяһында музей фондтарындағы байраҡтар айырым урынды биләй, сөнки элек-электән байраҡтар яугирҙарҙың берҙәмлеген, фиҙакәрлеген, хатта үҙ ғүмерен ҡорбан итеүен күҙәләндергән. Тап ошо байраҡ Башҡортостан һәм Рәсәй халыҡтары өсөн айырыуса мөһим, сөнки ул Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғаларының тере шаһиты булып тора, - тине Зилә Ниғмәтуллина. - Бөгөн дә ул - илһөйәрлек, берләшеү, көслө рух символы. Шуға күрә был байраҡ халыҡтың һәм яугирҙарҙың Бөйөк Еңеүгә индергән өлөшөн күрһәтер һәм Еңеү өсөн ғүмерен биргәндәр тураһында хәтерҙе һаҡлар тип ышанабыҙ.

9 майҙан легендар хәрби байраҡ Миңлеғәле Шайморатов исемендәге музей залына даими экспозицияға ҡуйыла, уны теләгән һәр кем килеп ҡарарға мөмкин.

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ҺИН БЕҘГӘ КӘРӘКҺЕҢ!



**Республиканың ваҡытлы матбуғат баҫмаларында ағымдағы йылдың икенсе ярты йыллығына ташламалы хаҡ менән гәзит-журналға яҙылыу тураһында иғлан ителгәс тә, бер-нисә данаға подписка эшләнем.**

Үҙебеҙҙә донъя күргән ҡағыҙ гәзит-журналдарға яҙылыуҙы үҙемдән изге бурысым, тип һанайым. Балаларға, ейән-ейәнсәрҙәргә ошо йәһәттән дә үрнәк булыу, милли баҫмаларға ҡарата ихтирам һәм иғтибар тәрбиәләү ҙә мөһим һәр ата-әсәгә, олатай-өләсәйгә. Тәү сиратта, үҙем генә түгел, тотош ғаиләбеҙ менән яратып уҡыған "Киске Өфө"гә яҙылдым. Үҙе бер энциклопедия бит ул был баҫма! Йәнең нимә теләй, күңелең ниндәй теманы әҙләй - барыһы ла бар. Ул тәрбиә, белем, тел һәм милли үҙаң, һаулыҡ, юридик һорауҙарға асыҡлыҡ, шиғриәт һәм башҡа әҙәби әҫәрҙәр - теләгәнеңде һайлап алып уҡырға мөмкин. Ошондай күптөрлөлөгә һәм шул уҡ ваҡытта ыҡсым, йыйнаҡ, тәбиғи булыуы менән әллә ҡасан үҙ уҡыусыларының иғтибарын һәм ихтирамын яулаған баҫма ул "Киске Өфө".

Әллә ниндәй ҡатмарлы әйберҙәрҙе лә барыһына ла аңлайышлы итеп, ябай, әммә шул уҡ ваҡытта тос һәм фекеле итеп еткерә белеүе менән мәртәбәле. Олоһо ла, кесеһе лә, төрлө һөнәр эйәләре - барыһы ла "Киске Өфө" биттәрендә нәҡ үҙен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға, борсоған уйҙарына яуап таба ала.

Гәзит уҡыусыны алдап булмай, ул гәзитте йә уҡый, йә уҡымай. Әгәр ҙә беренсе тапҡыр ҡулына алғанда баҫманың йөкмәткеһе, мәҡәләләр бирелеше, биҙәлеше оҡшамай икән, башҡаса ул уны ҡулына ла алып тормаясаҡ. "Киске Өфө"нө ҡулына алған бер кемдең дә уны, "әһәмиәтһеҙ", тигән мөһөр тағып, ситкә алып ҡуйғанын күргәнем юҡ. Киреһенсә, һәр бер битен оло ҡыҙыҡһыныу менән ҡарайҙар, уҡыйҙар. Кемдер, минең кеүек, ҡат-ҡат алып уҡый әле ул. Был нимә тураһында һөйләй? Әлбиттә, гәзиттең күптән инде уҡыусы күңелендә үҙ урынын табыуы, йылдан-йыл уға ҡарата булған хөрмәттең арта барыуы тураһында бәйән итә. Артабан да ошо юғарылыҡтан төшмәйенсә, оҙон-оҙаҡ йылдар нәшер ителеп килһен "Киске Өфө"бөҙ. Беҙгә, гәзит уҡыусыларға, һин бик кәрәкһең.

**Сәләймән АБДУЛЛИН.
Ҡырмыҫҡалы районы.**

12+

✓ **Алкоголь өлкәһендә битараф һәм наҙаныраҡ булараҡ, бөгөн тәүләп үҙем өсөн бер яңылыҡ ишетеп, күҙем дүрт булды: Өфөлә хәҙер алкоголле туңдырма ла эшләп сығарыла икән дә ул!**



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ УҢАЙҺЫҘ ФЕКЕРҘӘРЕ



**Советтар Союзының Бөйөк Ватан һуғышында фашистик Германияны тар-мар итеүенә 80 йыл тулыуға һанаулы ғына көндәр ҡалып бара. Рәсәйҙең бөтә төбәктәре лә был ҙур тантананы матур итеп үткәрергә әҙерләнә.**

Парадты, йыр-бейеүҙәрҙе һәм башҡа сараларҙы, һис шикһеҙ, һәр кем көтөп ала. Стәрлетамаҡ ҡалаһында 55 йыл ғүмер итеү осоронда күп парадтарҙы (1 һәм 9 майҙа, 7 ноябрҙә ) күрергә тура килде, һайлауҙарҙа даими ҡатнашам. Репродукторҙарҙан, гәҙәттә, гел рус йырҙары, марштары ғына ағыла. Һайлау участкаһындағы яуаплы иптәштәргә: "Нишләп башҡортса йыр яңғыратмайһығыҙ?" - тиһәң, сит планетанан төшкән кешене күргән кеүек ҡабул итәләр.

Илебеҙҙә нисәмә халыҡ бар, һәр ҡайһыһы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә үҙ өлөшөн индерҙе. Күпме геройҙарыбыҙ, Дан орденының тулы кавалерҙары бар. 112-се Башҡорт атлылар дивизияһы үҙен данға күмде, легендаға әүерелде. Шуға күрә Бөйөк Еңеү көнөндә халыҡтар үҙ туған телендә лә йырҙар ишетергә өмөт итә. Мин дә башҡортса телмәрҙе бик рәхәтләнеп тыңлар инем. Ҡала башлыҡтары: "Нишләп иртәрәк әйтмәнегеҙ, хәҙер әҙерлек эштәре башланды бит инде", - тиер. Ошондай "ваҡ" мәсьәләләргә иғтибар итеү хужаларҙың эше түгелме ни?

Һуғыш ваҡытында, тыныс замандарҙа сыҡҡан, халыҡ ятраҡан йырҙарыбыҙ бихисап. "Шайморатов генерал" мәшһүр халыҡ йырҙарыбыҙ менән бер рәттә торорлоҡ. "Почтальон", "Котелек" (Н.Нәжми, З.Исмәғилов), "Ҡайҙа һеҙ, яуҙаштарым?", "Ел Ерәнем" (Н.Иҙелбай, З.Исмәғилов), "Еңеүселәргә дан" (Р.Ниғмәти, З.Исмәғилов), "Батырҙар йыры" (Н.Нәжми, З.Исмәғилов), "Башҡорт гвардеецтары" (Я.Ҡолмой, Т.Кәримов), "Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа" (М.Кәрим, С.Садыҡова) - һуғыш тураһындағы йырҙарҙың бер өлөшө генә былар.

Башҡорт - ғәскәри халыҡ. Рус дәүләтенең барлыҡ яуҙарында ҡатнашып, дан-шөһрәт ҡаҙанған һәм тарихҡа бик күп ғәскәри йырҙарын яҙған. Улар - "Ҡаһым түрә", "Любизар", "Порт-Артур", "Эскадрон", "Әрме", "Перовский", "Циалковский", "Кутузов", "Байыҡ", "Карауан-һарай" һәм башҡалар. Беҙ телһеҙ халыҡ түгел. Руссаға күсеп барған бала-сағаларыбыҙ, ейән-ейәнсәрҙәребеҙ байрамдарҙа үҙ телендә йыр ишетһә, моғайын, уларҙа әсә теленә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тыуыр ине.

Махсус хәрби операцияһы маҡсаттарының береһе булып рус телле халыҡтарҙы яҡлау тора. Был яуҙа башҡорттар ҙа бик ихлас ҡатнаша. Бәлки, беҙҙең дә оло байрамдарҙа үҙ еребеҙҙә, Башҡортостанда, әҙме-күпме булһа ла үҙ йыр-моңобоҙҙо ишетергә хоҡуғыбыҙ барҙыр?

Илле йылдан ашыу заводтар төҙөгән, уларҙы йүнәткән хеҙмәт ветераны мин. Минең һымаҡ уйлаған кешеләр юҡ түгелдер.

**Риза ХӘЛИЛОВ.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

ИШАРА

# ИНТЕРНЕТТАҒЫЛАР...

## параллель донъяла йәшәй һымаҡ



**Гәзитебеҙҙә "Башҡорт Википедия"һы тураһында уҡыным да, ниңәлер, бик күптән ҡараған фильм иҫемә төштө (исемен дә, авторын да оноҡтанмын инде). Бик ҡурҡыныс фильм ине ул. Йәшлектә һирәк-һаяҡлап нервыларҙы "ҡытыҡлап" алғым килеп, ҡурҡыныс фильмдар ҡарай торғайным.**

Ул кинола бер ир кешене, ғәйебе булмаһа ла, ғәйеп тағып, төрмәгә ябалар. Ир үҙен аҡлар шаһиттар, дәлилдәрҙе үҙе генә һәм иректә генә эҙләп була икәнен аңлағанға күрә, төрмәнән ҡаса, әммә тотола. Фильмдың аҙағында был ирҙе иң ҡаты режимлы төрмәгә ябалар. Ул төрмә бейек ҡая башында урынлашҡан, ә тирә-яғы - тәрән упҡын. Һәр тотҡон айырым, ҡалын бүрәнә стеналы ҡумтала ултыра. Унда ризыҡ бирер өсөн кескәй генә тәҙрә уйылған. Мине иң ныҡ тетрәндергәне шул булды: күҙҙәре генә күренеп торған тәҙрәнән тотҡон ир: "Эй, Хоҙайым, мин бында! Мине юғалтма!" - тип ҡысҡыра. Ул фильмдың аҙағы ошолайыраҡ тамамланды: тотҡон ошо ағас ҡумтаһы менән бергә упҡынға атылды һәм селпәрәмә килгән ҡумтаның бүрәнәләренә тотоноп, көслө ағымлы йылға буйлап ағып китте. Йылға уны ирекле йәшәгән бер илгә алып барып еткерҙе һәм ул ир ғүмеренең аҙағынаса ирекле йәшәне...

Бына был Википедияны ла аҙ һанлы милләттәрҙең "Беҙ бында! Беҙ барбыҙ!" тип ҡысҡырыуына оҡшатам мин. Шул уҡ ваҡытта был оло йәштәге инәйегеҙҙең күңелендә шом да бар: википедиясылар юҡҡа яфаланмаймы, интер-

БЫНАҒАЙЫШ!

# АЛКОГОЛЛЕ... ТӘМЛЕКӘС

**Нимә-нимә, ләкин Башҡортостан үҙенең алкоголь индустрияһы менән Рәсәй араҡы баҙарында маҡтана ала: был йәһәттән республика лидерҙар иҫәбендә. Беҙҙең араҡы етештереүселәр Халыҡ-ара конкурстарҙа Гран-при яулай, алтын миҙалдар ала. Алкоголь продукцияһы республиканың 6 меңләп магазинында ваҡлап һатыуҙа.**



Был хаҡта гәзитебеҙҙә күптән түгел мәҡәлә баҫылғайны инде. Их, мин әйтәм, республика үҙендә етештерелгән сифатлы һәм урындағы экологик таҙа , химикат ҡушымталарһыҙ ит-һөт, картуф, һуған, ҡыяр, помидор, йәшел һуған, укроп, петрушка, витаминлы салат ҡыяҡтары кеүек ана шундай алдынғы етештереү миҫалы менән маҡтана алһа икән! Юҡ, был продукция беҙгә Мәскәү өлкәһенән, Төмәндән, Краснодарҙан, Әзербайжан һәм башҡа шуның кеүек көньяҡ һәм Кавказ республикаларын килтерелә, һәм беҙ уны "ат хаҡына" һатып алырға мәжбүрбеҙ. Башҡаһы башҡа, ә бына йәй-көҙ көндәрендә баҙар әбейҙәренән 20 һумға һатып алған бер тотам йәшеллек (һуған, салат ҡыяғы, петрушка һ.б хаҡы) Өфө магазиндарында 100 һумдан артып китте.

Эйе, үҙебеҙҙең араҡы менән маҡтана алабыҙ. Сауҙа нөктәләренең ҡайһыһына барып инһәң дә һәр төрлөһө, матур шешәләрҙә, йылтырашып-шылтырлашып теҙелеп ултыралар - Аллаһ һаҡлаһын, эсмәгән кешенең дә ҡыҙығып китеүе бар. Алкоголь өлкәһендә битараф һәм наҙаныраҡ булараҡ, бөгөн тәүләп үҙем өсөн бер яңылыҡ ишетеп, күҙем дүрт булды: Өфөлә хәҙер алкоголле туңдырма ла эшләп сығарыла икән дә ул! Дөрөҫ, был хаҡта интернетта бер мәғлүмәт тә юҡ: ҡасандан һәм ниндәй предприятиела ул етештерелә, ләкин өлгөр һәм хәбәрҙар ярҙамсыбыҙ Нейро миңә бындай предприятиены табып бирҙе. Дөрөҫ, онлайн-дуҫ та араҡыға битараф булараҡ, яңылышыуы ла бар, шуға мин араҡылы туңдырма эшләүсе "эшлекле зирәктәрҙең" адресын, шулай уҡ уларҙың "ижады" - шараплы туңдырманың атамаһын әйтмәй торам. Тимәк, ошоға тиклем "иҫерек" туңдырма сауҙа нөктәләренә сығарылған, һатылған, йәштәр-үҫмерҙәр уны күптән инде татып та ҡарағандыр, кем белә. Шул ғына етмәгәйне! Йәштәр һәм бала-сағаның иң ятраҡан тәмлекәсенә шарап төрөп һат әле! Гәрсә был продукция улар өсөн тәғәйенләнмәһә лә, улар ҡулына һәм ауыҙына мотлаҡ килеп эләгеүенә шик юҡ. Күрәләтә йәш быуынды эскелеккә этәреү

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Рәсәй Президенты Владимир Путин "Хәрби бурыс һәм хәрби хеҙмәт тураһында"ғы федераль законға үҙгәрештәргә ҡул ҡуйҙы. Хәрби хеҙмәткә саҡырыу комиссияһының ағымдағы саҡырылыш ваҡытында үтәлмәгән ҡарары тағы бер йыл ғәмәлдә була. Призывник киләһе саҡырылыш ваҡытында ҡабаттан комиссия үтмәйенсә армияға оҙатыла.

✓ Башҡортостандың ҡайһы бер муниципалитеттары йылытыу миҙгелен тамамланы. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова ошо турала белдерҙе. "Май байрамдарына көндәрҙең һалҡынайтыуы һәм ямғыр яуыуы көтөлә. Муниципалитеттарға әлегә насостарҙы һүндермәҫкә һәм гидравлик һынауҙарҙы башламаҫҡа кәңәш бирәм", - тине Ирина Голованова. "Һәр муниципалитет йылытыу миҙгелен тамамлау ваҡытын үҙе билдәләй. Ҡарар ҡабул итегеҙ һәм халыҡҡа еткерегеҙ. Көтөлмәгән хәлдәргә әҙер булығыҙ, сөнки һауа торошо үҙгәреп тора", - тине республика Башлығы Радий Хәбиров.

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Салауат районының Малаяҙ ауылында Махсус хәрби операцияла һәләк булған Салауат Ғәзимов, Рөстәм Зарипов, Дамир Мәмбәтов, Замир Мирсаяпов, Әнис Мөхәмәтйәнов, Руслан Насипов, Илдар Ситдиҡов, Вадим Һаҙыев, Айҙар Шәйәхмәтов, Салауат Йәнгировтың ғаиләләре менән осрашты. Республика етәксеһе һәләк булған хәрбиҙәрҙең ата-әсәләре, хәләл ефеттәренең ҡайғыһын уртаҡлашты. Яҡташтарыбыҙ хәрби бурысын үтәгәндә күрһәткән батырлығы һәм ҡаһарманлығы өсөн үлгәндән һуң генерал Шайморатов ордены менән бүләкләнде. Награда уларҙың яҡындарына тапшырылды.

✓ Шәхси хәрби компаниялар составында МХО-ла ҡатнашҡан хәрби хәрәкәттәр ветерандарына аҡса түләнмәүе ғәҙел түгел, тип иҫәпләй Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. "Һәр эш сәфәре барышында мин яугирҙарҙың туғандары менән осрашам. Салауат һәм Ҡырмыҫҡалы райондарында һәләк булған ир-егеттәрҙең ата-әсәләре менән осраштым. Хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусы танытмаһын алған яугирҙарға беҙҙең аҡса түләнмәй, тинеләр миңә. Был ғәҙел түгел тип уйлайым. Миңә тәҡдимдәр индереүегеҙҙе һорайым", - тип мөрәжәғәт итте Радий Хәбиров Башҡортостандың "Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фондына.

✓ Белорет районы Советы депутаттары Азат Хәкимовты хакимиәт башлығы вазифаһына тәғәйенләне. Быға тиклем ул Өфөнөң Октябрь районы етәксеһенең беренсе урынбаҫары булды. Район башлығы вазифаһына конкурста хакимиәт башлығының беренсе урынбаҫары Зөлфиә Ғәлиянова һәм башлыҡтың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, төҙөлөш һәм транспорт буйынса урынбаҫары Юрий Точилкин ҡатнашты.

***✓ Интернетта нимә уҡығанығыҙҙы беләбеҙ бит беҙ: ундағы дөрөҫлөгө өсөн бер кем дә яуап бирмәгән имеш-мимештәрҙән ауырыуға һабышҡандар ҙа бар. Шуға ла күсөгөҙҙө файҙалы башҡа эштәргә йүнәлтһәгеҙ.***



нетҡа күпләп вирустар һөжүм итә башлаһа, бөтә мәғлүмәттәрегеҙ ҙә юйылып бөтмәҫме, хеҙмәтегеҙ бушҡа китмәҫме?

***Шулай ҙа ҡағыҙға яҙылған мәғлүмәт ышаныслыраҡ һымаҡ тойола миңә. Хатта бәләкәй генә бер һөйләм яҙып һалынған ҡағыҙ киҫәге лә күп йылдар үткәс ғүмер китабыңдың бер битен, бер ваҡиғаһын иҫеңә төшөрөүе мөмкин.*** "Культура" каналының "Линия жизни" тапшырыуында бер артист та шул хаҡта иҫкә алып үтте: "Архивымды аҡтарғанда бер ҡағыҙға тап булдым, - тип башлап китте ул. - Ул открыткала, тулҡынланып яҙғанғалыр инде, ауыштыуыш хәрефле яҙма һаҡланған: "Ҡәҙерлем, һине әсәй булыуың, ә үҙемде атай булыуым, ҡыҙыбыҙҙың тыуыуы менән ҡотлайым", - тип яҙылған ул ҡағыҙға. Был үҙем яҙған, һарғайып бөткән хатты уҡып, күҙҙәрем йәшләнде. Мин ул йыраҡ көндөң бөтә шатлығын ҡабат кисерҙем. Ул бәхетле мәлдең йылы ла, айы ла, көнө лә теркәлгәйне унда. Ә биш йылдан һуң, икенсегә улыбыҙ тыуғас, ҡатыныма телефон аша смс-ҡотлау оҙаттым. Ул ҡотлауҙы ҡатыным юйғандыр инде һәм уны ҡабат уҡып та булмаясаҡ..."

Бына шулай. Ҡул менән яҙылғанға барыбер ҙә бер нимә лә етмәй һымаҡ тойола миңә. Мин өлкән быуын булған өсөн, интернет донъяһы ят булған өсөн генә әйтмәйем был һүҙҙәрҙе. Ҡағыҙҙан уҡылған һүҙҙең күҙҙәр өсөн дә, мейе өсөн дә, йөрәк өсөн дә файҙаһы ҙур булыуын ғалимдар ҙа раҫлай һәм был турала "Киске Өфө"лә лә яҙылғайны.

***Интернетҡа төбәлеп ултырыусыларға тағы шундай һорау: "Гәзит, журналдар уҡыйһығыҙмы?" Әлбиттә, "Уҡымайбыҙ!" тип яуап бирәсәкһегеҙ. Етмәһә, яуабығыҙҙа быным менән ғорурланыу, ә компьютер менән эш итә белмәгән ололарҙан мыҫҡыллы көлөү ҙә һиҙемләнәсәк. Юҡҡа ғына улай итәһегеҙ. Интернетта нимә уҡығанығыҙҙы беләбеҙ бит беҙ: ундағы дөрөҫлөгө өсөн бер кем дә яуап бирмәгән имеш-мимештәрҙән ауырыуға һабышҡандар тураһында ла ишетеп-күреп йөрөйбөҙ. Шуға ла күсөгөҙҙө, аҡылығыҙҙы илебеҙ, халҡыбыҙ өсөн файҙалы башҡа эштәргә йүнәлтһәгеҙ, яҡшыраҡ булмаҫ инеме икән? Миңә һеҙ пареллель донъяла йәшәгән кеүек күренәһегеҙ...***

**Фәүзиә ЯХИНА.**

түгелме был? Әйткәндәй, ҡайһы бер сит илдәрҙә, мәҫәлән, айырыуса Польшала, Швецияла, Германияла, Британияла составында ром, ликер һәм башҡа спиртлы ҡушымта булған туңдырмалар бик популяр, ләкин бит беҙ Рәсәйҙә, Башҡортостанда айыҡлыҡ өсөн көрәшәбеҙ, йәнәһе. Юғиһә, беҙҙең етештереүселәр сит ил өлгөләренә эйәрергә генә тора. Ваҡыт үтә килә, Польшалағы кеүек, беҙҙә лә араҡы ҡушылған матур тышлы кәнфиттәр һәм башҡа тәмлекәстәр пәйҙә булмаҫ, тип кем әйтә ала? Унда туңдырма ла шарап менән генә түгел, ә 4 процент араҡы, лайм һуты һәм еләк менән тәмләп, ҡыҙыҡтырырлыҡ итеп сығарыла икән. Табыш өсөн нимә генә уйлап сығарылмай, ә ҡулланыусы мәнфәғәтен алкоголдән яҡлаусы юҡ.

Ә бына Башҡортостан парламенты әлеге алкоголле туңдырма балалар ҡулына килеп эләкмәһен өсөн яңыраҡ Рәсәй закон сығарыусылар советына алкоголь әйләнеше тураһындағы законға өҫтәмә индерергә тәҡдим итте. "Федераль законда алкоголь продукцияларының төрҙәре күрһәтелгән һәм был исемлек ябыҡ, йәғни яңы төр тауар сығарыу ҡаралмаған. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, яңы тауарҙар сығып тора. Мәҫәлән, бөгөн алкоголле туңдырма һатыла, ә был балаларҙың яратҡан тәмлекәсе. Шуға күрә лә составында спирт булған продукция бала ҡулына килеп эләкмәһен өсөн ундай тауарҙарҙы көйләү һәм контролдә тотоу кәрәк", - тип һөйләй БР Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Башҡортостан депутаттары әҙерләгән закон проекты яңы сығарыласаҡ бөтөн төр спиртлы ризыҡ продукттарын да контролгә алырға тейеш. Дөрөҫ ҡарар, һүҙ ҙә юҡ, тик йәштәрҙе йәлеп итерлек бындай "ҡыҙыҡлы" яңы продукция бар икән, уны балаларға һатыуҙы тыйған хәлдә лә йәш ҡулланыусылар бөгөн юлын-сараһын таба белә, был улар өсөн проблема түгел. Бында һүҙ күбеһенсә йәштәр-үҫмерҙәр һәм кескәйҙәр өсөн сығарылыусы тәмлекәстәргә алкоголь ҡушып етештереүҙе, ғөмүмән, тыйыу хаҡында һүҙ алып барылырға тейештер. Бик булмаһа, уларҙы фәҡәт өлкәндәр өсөн кафе, бар һәм рестарандарҙа ғына һатыу мәсьәләһен ҡарарға булыр ине.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ТРАМП СИГЕНӘ ЛӘ БЕЛӘ ИКӘН...

**Православный христиандар донъяһы үткән ялда сиркәү календарындағы иң мөһим ваҡиға - Пасха байрамын билдәләне. Үлгәндән һуң Христостың терелеүе дингә инанған миллиондарса кеше тарафынан тормоштоң үлем фажиғәһенән көслөрәк булыуы, уны еңеүе тип ҡабул ителә, улар өсөн был тарих таяныс та, йәшәү мәғәнәһе лә булып хеҙмәт итә.**

Бындай яҡты, изге көндө, әлбиттә, үлем сәсеүсе пушкалар тынып торорға тейеш. Ошо айҡанлы Рәсәй Президенты Владимир Путиндың ваҡытлыса утты туҡтатып, 30 сәғәткә пасха килешеүе иғлан итеүе донъя йөҙөндә Мәскәүҙең тыныс һөйләшеүҙәргә әҙер булыуын күрһәтте. Путин белдереүенсә, пасха тынлығы Украинаның тыныслыҡҡа әҙерме-юҡмы икәнен күрһәтәсәк ине. Bloomberg агентлығы яҙыуынса, Украина президенты Владимир Зеленский тәүҙә был тәҡдимде кире ҡаға, ләкин бер аҙҙан ҡабул итә һәм үҙенең Telegram-каналында "...Рәсәй тарафында нисек булһа, беҙ ҙә шуны уҡ эшләйәсәкбеҙ: тынлыҡҡа - тынлыҡ, утҡа - ут",- тип яҙып сыға. Бынан алдараҡ Трамп Украина конфликтын көйләү буйынса ике яҡтың береһе тартҡылашҡан хәлдә, АҠШ-тың, яраштырыусы булараҡ, килешеүҙәр алып барыуҙан баш тартасағы хаҡында белдергәйне, ләкин аҙаҡ, Рәсәй Президентының пасха тынлығы тәҡдименән һуң, асыуын ыңғайға бороп: "Мин киләһе аҙналарҙа килешеүгә өлгәшербеҙ, тип ышанам, был ҡан ҡойошто туҡтатырға тейешбеҙ",- тине. Ләкин, РФ Оборона министрлығы белдереүенсә, пасха тынлығын күрәләтә боҙоп, Украина Ҡораллы көстәре Рәсәй позицияларын утҡа тотоуҙы дауам иткән. 20 апрелгә ҡарай төн, мәҫәлән, украин боевиктары Донецк Халыҡ Республикаһы райондарындағы Богатырь һәм Сухая балка тораҡ пункттарына һөжүм итте. Шул уҡ төндө дошман Рәсәй территорияларына, шул иҫәптән, Ҡырымға ла, самолет рәүешендәге 48 пилотһыҙ шартлатҡыс аппарат осорҙо. Нацистар, бынан тыш, беҙҙең ғәскәр позицияларын 444 тапҡыр миномет һәм орудиенан утҡа тотто, Курск, Белгород, Брянск өлкәләрененең сик буйҙары дошман һөжүменә дусар ителде. Дошман атакалары кире ҡағылды. Тыныс халыҡ араһынан һәләк булыусылар, йәрәхәтләнеүселәр бар. Пасха тынлығы тамам, уның ҡарауы, был Киев властарының ике йөҙлөлөгө һәм тыныс һөйләшеүҙәрҙә ҡатнашырға теләге юҡ икәнде күрһәтте. Энергия объекттарына утты туҡтатыу буйынса 30 көнлөк тынлыҡ түгел, пасха айҡанлы 30 сәғәт кенә лә агрессияһын тыйып тора алмай дошман.

Ә был ваҡыт АҠШ президенты Дональд Трамп пасха мөрәжәғәтендә үҙенең сәйәси оппоненттарын аяуһыҙ тәнҡит утына ҡойондорҙо. АҠШ-ҡа хәүефле енәйәтселәрҙе, кеше үлтереүселәрҙе һәм енәйәтсел төркөмдәрҙе кире ҡайтарырға тырышыусы "һул аҡылһыҙҙарҙы" пыр туҙҙырҙы; Ҡушма Штаттарға һөжүм итеүсе көстәргә ҡаршы тора алмаусы хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәрен һәм судьяларҙы ул "көсһөҙ һәм һөҙөмтәһеҙҙәр" тип атаны. Ә туҡмаҡтың тосо, әлбиттә, үҙенән алдағы президент Джо Байденға йүнәлтелде. Илдәге контролһеҙ миграцияның төп ғәйеплеһе , "иң насар һәм белекһеҙ президент булды ул", тип яҙҙы Трамп уның хаҡында. Ошонан һуң федераль властар илдә законһыҙ йәшәүсе мигранттарға ҡаршы киң ҡоласлы рейдтар үткәрә башланы. Трамп хакимиәте уларға көн дә миграция законын боҙоусы 1,8 мең кешене тоторға ҡушты, сөнки ул һайлау алды программаһында миллионлаған иммигранттты илдән һөрөргә вәғәҙә биргәйне.

АҠШ президентының Украина конфликтында ҡыҙыҡһыныуы тыныслыҡ урынлаштырыу түгел, әлбиттә, ә бизнес, өҫтәмә табыш ниәте икәне мәғлүм. Һирәк металдар ҡаҙылмаһы буйынса Украина менән килешеү килеп сыҡмағас, хәҙер Трамптың Запорожье атом электр станцияһына (ЗАЭС) күҙе төштө һәм ул ошо территорияны нейтралләштереп, станцияға контролде үҙ ҡарамағына алырға итә һәм Рәсәй менән Украинаға энергетика өлкәһендә Америка бизнесы менән бергә эшләп, табыш алыуға ҡыҙыҡтырмаҡсы. Ә Запорожье өлкәһе, шул иҫәптән, ЗАЭС, 2022 йылдан Рәсәй ҡарамағында. Украина Ҡораллы көстәре даими рәүештә ЗАЭС-ҡа дрондар осороп, һөжүм итә, ләкин Рәсәй радиоэлектрон көрәш системаһы был йәһәттән станцияны һаҡлап, уяу тора. Әлеге ваҡытта станцияның энергия блоктары "һыуытылған" һәм эштән туҡтатылған. Рәсәй яғы белдереүенсә, ЗАЭС территорияһы Рәсәй составына инделелеп, Конституция менән нығытылған һәм беҙҙең ил уны бер кемгә лә бирергә йыйынмай.

АҠШ президенты Дональд Трамп индергән пошлиналар донъя иҡтисадына насар тәьҫир итте һәм уның үҫеш тиҙлеген әкренәйтте, тип белдерҙе Халыҡ-ара валюта фонды башлығы Кристалина Георгиева ошо көндәрҙә Bloomberg агентлығына. Мәғлүм булыуынса, 10 апрелдә Трамп Ҡытай тауарҙарына пошлины хатта ки 145 процентҡа еткергәйне. Был исемлектә 14 ил булып, Рәсәй һәм Беларустың АҠШ менән сауҙа бәйләнештәре булмау сәбәпле, уларға бер ниндәй ҙә пошлина белдерелмәне. АҠШ-тың финанс министры Скотт Бессент менән сауҙа министры Говард Литник Аҡ йорт хужаһын юғары сауҙа пошлиналар ҡулланыу ниәтенән баш тартырға өгөтләп күндерә алдылар. Һөҙөмтәлә Трамп пошлиналарҙы 90 көнгә туҡтатып торорға риза булды. Бына бит, төрлө тарафтан килтереп ҡыҫһа һәм теләһә, Трамп сигенә лә белә икән!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓16 апрелдә Сергей Озерцов Сибай ҡала советы менән контрактҡа ҡул ҡуйҙы. Ҡала башлығы вазифаһын ул 2024 йылдың көҙөнән башҡара. Социаль селтәрҙәгә сәхифәһендә чиновник былай тип яҙған: "Бөгөн минең өсөн үҙенсәлекле көн. Тормошомда мөһим документтарҙың береһенә ҡул ҡуйҙым. Ышаныс өсөн рәхмәт белдерәм. Ҡалабыҙ халҡы мәнфәғәте өсөн тағы ла тырышып эшләрмен!"

✓Башҡортостандың Әбйәлил районы башлығы Илдар Нафиҡов вазифаһын ҡалдырҙы. Аҫҡарҙа район Советы сессияһының сираттан тыш 5-се ултырышы үтте. Унда хакимиәт башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыу бурысы хакимиәт башлығының беренсе урынбаҫары Руслан Хәлиловҡа йөкмәтелде. Ул конкурс һөҙөмтәләре буйынса муниципаль район советы тәғәйенләгән етәксе килгәнсе ошо вазифала эшләй. Илдар Нафиҡовтың артабанғы пландары хаҡында әлегә хәбәр ителмәй.

✓Башҡортостанда күп балалы 50 ҡатын-ҡыҙ "Әсәлек даны" миҙалына лайыҡ булды. Бүләкләнеүселәр араһында Әбйәлил, Архангел, Баймаҡ, Баҡалы, Белорет, Бөрө, Ғафури, Дәүләкән, Дыуан, Ейәнсура, Иглин, Ҡалтасы, Краснокама, Күгәрсен, Көйөргәҙе, Мәләүез, Мәсетле, Мишкә, Миәкә, Туймазы, Өфө, Хәйбулла райондарынан һәм Октябрьский, Стәрлетамаҡ һәм Өфө ҡалаларынан әсәләр бар. "Әсәлек даны" миҙалы Башҡортостанда 1998 йылда булдырылды. Был наград биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән ҡатын-ҡыҙҙарға тапшырыла.

✓Хәйбулла районының Фёдоровка ауылы энтузиастары легендар ГАЗ-69 совет автомобилен ремонтлай. Муниципалитет хакимиәте хәбәр итеүенсә, "Таяныс" клубы ағзалары раритет техниканы Еңеү парадына әҙерләй. Ауыл халҡы кузовты тутыҡтан таҙарта, слесарҙар двигателде ремонтлай. Был эштә үҫмерҙәр ҙә әүҙем ҡатнаша. "Атайҙар улдарын техника менән эшләргә өйрәтә һәм байрамдың мөһимлеге тураһында һөйләй", - тип хәбәр итә урындағы хакимиәт.

✓ 2026 йылда Бөтә Рәсәй Көслөләр спартакиадаһы Башҡортостанда ойошторола. Был хаҡта Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында уҙған спорт буйынса эксперт советы ултырышында республика Хөкүмәте вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов белдерҙе. Был турала әле генә билдәле булды, тине республиканың Спорт министрлығы етәксеһе. Ҡарар Рәсәйҙең спорт министры Михаил Дегтярёв кимәлендә ҡабул ителде. Бөтә Рәсәй Көслөләр спартакиадаһы Башҡортостанда беренсе тапҡыр үткәрелә, тип өҫтәне ул.

ҠЫҪҠАСА

# ИДАРАСЫ БУЛЫРҒА...

**Башҡортостан МХО-ла ҡатнашыусылар өсөн кадрҙар проекттарына ғаризалар һаны буйынса Рәсәйҙә беренсе урынға сыҡты - "Башҡортостан Геройҙары" проектына 2026 гариза килде.** Өс лидер иҫәбендә Краснодар крайы һәм Нижегород өлкәһе лә бар. Рәсәйҙең күпселек төбәктәрендә "Геройҙар ваҡыты" федераль программаһының төбәк аналогтарында ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул итеү тамамланды. Тотош илдән 46 меңдән ашыу Махсус хәрби операция яугиры ошо проекттарҙа ҡатнашырға теләк белдерҙе. Ҡайһы бер төбәктәрҙә бер урынға конкурс 25 кешенән ашып китә. Былдай ҡыҙыҡһыныу геройҙарыбыҙҙың үҙ иленә, хәҙер инде тыныс тормошта, лидерҙар һәм идарасылар булып хеҙмәт итергә әҙер икәнен күрһәтә. "Башҡортостан геройҙары" - "Геройҙар ваҡыты" программаһының төбәк аналогы, МХО-ла ҡатнашыусылар араһынан яңы быуын етәкселәрен әҙерләүгә йүнәлтелгән. Проект республика Башлығы Радий Хәбиров тәкдиме менән ғәмәлгә ашырыла. "Рәсәй Президенты ҡушыуы буйынса "Геройҙар ваҡыты" федераль проектын киңәйтәбеҙ. МХО-ла ҡатнашыусылар араһынан дәүләт һәм муниципаль власть органдарында, предприятиеларҙа һәм ойошмаларҙа эшләү өсөн квалификациялы идарасылар әҙерләйбеҙ", - тип белдергәйне Радий Хәбиров.

✓ **Башҡортостанда "Рәсәй эше. Мөмкинлектәр ваҡыты" Бөтә Рәсәй платформаһы сиктәрендә 50-нән ашыу майҙансыҡта эшкә урынлашыу йәрминкәләре ойошторола.** Быйыл 18 апрелдә йәрминкә 17 меңдән ашыу эш биреүсене берләштерҙе, улар 370 меңдән ашыу вакансия тәкдим итте. Шулай уҡ Башҡортостан вакансиялар тәкдим иткән предприятиелар һаны буйынса тәүге төбәктәр иҫәбенә инде. Был хаҡта вице-премьер Татьяна Голикова хәбәр итте. Бөтә Рәсәй йәрминкәһе эшкә урынлашҡанда һөҙөмтәле ярҙам ҡоралы булып тора, тип билдәләне ул. Быйыл төбәк этабында 2 меңдән ашыу майҙансыҡ эшләй. Ырымбур өлкәһендә 100 майҙансыҡ булдырыла. Пермь крайында, Марий Эл Республикаһында, Красноярск крайында, Омск һәм Ростов өлкәләрендә, Башҡортостанда һәм Ҡырымда - ошо төбәктәрҙең һәр береһендә 50-нән ашыу майҙансыҡ асыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2023 йылдан Рәсәй Президенты ҡушыуы буйынса "Рәсәй Эше. Мөмкинлектәр ваҡыты" Бөтә Рәсәй йәрминкәһе үткәрелә. 2025 йылдан ул "Кадрҙар" милли проекты сараларының береһе булып тора.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы Енәйәт кодексына кибермутлашыусылар менән көрәште көсәйтеүгә йүнәлтелгән төҙәтмәләр индерергә ниәтләй.** Ҡарарҙы апрелдә Дәүләт Думаһының пленар ултырышында ҡабул итерҙәр тип көтөлә, тип хәбәр итә Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәте. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, былдай тәкдим киберенәйәттәрҙең артыуы менән бәйле. Әлеге Енәйәт кодексындағы тейешле статьялар улар менән көрәш яңы ғына башланған саҡта төҙөлгән. Шуға күрә суд практикаһында бөхәсле хәлдәр килеп тыуа, енәйәтсе еңел яза менән генә ҡотолорға мөмкин. Мәҫәлән, картанан 2500 һумға тиклем аҡса урлау урлашыу һәм мутлашыу тип квалификацияланырға мөмкин (икенсе осраҡта административ яуаплылыҡҡа тарттырыуҙары һәм штраф һалыуҙары ихтимал). Башҡортостан депутаттарының башланғысы ике төрлө аңлатманы бөтөрөүгә йүнәлтелгән.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯНМАЙЫҠ!

**18 апрелдән Башҡортостанда янғынға ҡаршы махсус режим индерелде. Ул махсус бойороҡҡа тиклем ғәмәлдә ҡала.**

Республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған документта билдәләнеүенсә, янғынға ҡаршы режим осоронда ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙә, төбәк әһәмиәтендәге айырым һаҡланған территорияларҙа, запастағы ерҙәрҙә, юл буйҙарында, йылға һәм күл яндарында, ҡала һәм ауыл биләмәләрендә, коммерцияға ҡарамаған баҡса ширҡәттәрендә усаҡ яғыу тыйыла. Ҡарарға ярашлы, граждандарҙың ял итеү урындарында, коммерцияға ҡарамаған баҡса ширҡәттәре биләмәләрендә рейдтар, янғын хәүефһеҙлеге талаптарын үтәү буйынса аңлатыу эштәре ойошторола. Шулай уҡ урман эсендә урынлашҡан һауыҡтырыу объекттарынан халыҡты, балаларҙы тиҙ арала эвакуациялау өсөн эш тәртибе әҙерләнә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, янғынға ҡаршы махсус режим ғәмәлдә булған осорҙа янғын хәүефһеҙлеге талаптарын боҙған өсөн түбәндәге штрафтар ҡаралған: граждандарға - 10-20 мең һум; вазифа биләгән кешеләргә - 30-60 мең һум; шәхси эшҡыуарҙарға - 60- 80 мең һум; ойошмаларға - 400-800 мең һум.

Бынан алда Рәсәйҙең Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығында хәҙер дәүләт янғын күҙәтеүе инспекторҙарының янғын режимын боҙғандарға урында штраф яҙып бирергә хоҡуҡлы булыуын иҫкә төшөрҙөләр. Былдай норма 11 апрелдән ғәмәлгә индерелде. Физик берәмектәр өсөн иң күп штраф - 20 мең һумға тиклем.

# БЕҘҘЕ ХӨРМӘТ ИТҺӘЛӘР...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала йәшәгән милли диаспора вәкилдәре менән осрашты. Улар сит ил граждандарының социаль һәм мәҙәни яраҡлашыу мәсьәләләрен тикшерҙе.**

Рәсәй Президенты Владимир Путин йыл аҙағына тиклем миграция сәйәсәтенең яңы концепцияһын әҙерләргә ҡушты, тип билдәләне республика етәксеһе. Уның төп йүнәлештәре йәмғиәттең һәм халыҡтың именлеге, Рәсәйҙең мәҙәни үҙенсәлеген, милләт-ара һәм дин-ара татыулыҡты һаҡлау булырға тейеш. "Беҙ республикала диаспоралар һәм мигранттар менән ошо өлкә өсөн яуаплы ведомстволар линияһы буйынса системалы эш алып барабыҙ. Ләкин һорауҙар ҡәмемәй. Киреһенсә, улар сит ил граждандары һаны артҡан һайын арта бара. Республика етәксеһе булараҡ, диаспора лидерҙарына һәм вәкилдәренә үҙ позициямды белдереү өсөн бөгөн һеҙҙе осрашыуға саҡырҙым, - тине Радий Хәбиров. - Беренсенән, Башҡортостан - күп милләтле төбәк. Рустар, башҡорттар, татарҙар, сыуаштар, марийҙар, удмурттар, мордвалар һәм башҡалар быуаттар буйына бында татыу ғүмер кисерә. Беҙ был дуҫлыкты, боронғо тарихыбыҙҙы, үҙенсәлекле күп милләтле мәҙәниәтебеҙҙе ҡәҙерләйбеҙ. Икенсенән, беҙ - Рәсәйҙең ҡеүәтле иҡтисады, үсешкән социаль өлкәһе, төҙөк ҡалалары һәм ауылдары булған бай һәм уңышлы төбәге. Күп күрһәткестәр буйынса беҙ - илдә лидерҙар, бының менән хаҡлы рәүештә ғорурланабыҙ. Өсөнсөнән, беҙҙә башҡа халыҡтарҙы, уларҙың мәҙәниәтен һәм традицияларын хөрмәт иткән эшһөйәр һәм ҡунаҡсыл кешеләр йәшәй. Йәнә ҡабатлайым: беҙ үҙебеҙҙең күп милләтле йортобоҙға мәҙәниәтебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы һәм ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе хөрмәт иткән һәр кемдә индерергә әҙер".

Башҡортостан Башлығы билдәләүенсә, 2024 йылда, Эске эштәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, республика биләмәһендә 84 963 сит ил граждан иҫәптә торған, уларҙың күпселеге - Урта Азия илдәренән. Шул уҡ ваҡытта мигранттар яғынан енәйәтселек мәсьәләһе киҫкен булып ҡала. "Мин миграция сәйәсәтенә ҡарашымды бер нисә тапҡыр асыҡтан-асыҡ белдерҙем. Республика иҡтисады әүҙем үҫешә, шуға беҙгә башҡа илдәрҙән хеҙмәт ресурстары кәрәк. Беҙ быны танайбыҙ. Был тәжрибә практика, дөйөм алғанда, яҡшы күрһәткес. Шул уҡ ваҡытта закондарыбыҙҙы үтәргә, йолаларыбыҙҙы хөрмәт итергә тейешле мигранттарҙы мәҙәни йәһәттән яраҡлаштырыу буйынса системалы эш алып барырға йыйынабыҙ, - тине Радий Хәбиров. - Күреүегеҙсә, күп кенә төбәктәр иҡтисадтың төрлө тармаҡтарында сит ил граждандарының хеҙмәтен ҡулланыуҙы сикләне. Әлегә республикала быны өсөн нигеҙ юҡ. Әммә талаптарҙың үтәлмәгәнен аңлаһаҡ, беҙ ошондай сикләүҙәр индерәсәкбеҙ".

# ИҢ ЯҠШЫ ИРЕКМӘН КЕМ?



**Башҡортостан Башлығының "Башҡортостан ирекмәне" почет билдәһе конкурсына ғаризалар ҡабул итеү тамамланды.**

Ирекмәндәр һаны буйынса республикабыҙ Рәсәй төбәктәре араһында бишенсе урынды биләй. Башҡортостанда Добро.рф порталында 158 меңдән ашыу кеше теркәлгән. Улар өсөн яңы программалар булдырыла, форумдар һәм конкурстар үткәрелә. Изгелек һағында тороусылар өсөн иң яҡшы дәртләндереү сараларының береһе - Башҡортостан Башлығының "Башҡортостан ирекмәне" почет билдәһе. "Беҙҙең ирекмәндәр - иң хәстәрлекле кешеләр. Улар булмаһа, беҙ тормош ауырлыҡтарын еңә алмаҫ инек. Беҙ бергәләп ковидҡа ҡаршы көрәштек, сирлеләргә ярҙам иттек. Уларға һыу, дарыуҙар һәм аҙыҡ-түлек ташыныҡ. Бергәләп урман янғындарын һүндерҙек. Ә бөгөн МХО яугирҙарына һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам итәбеҙ. Республикала ирекмәндәр армияһы 132 мең кешенән тора. Улар араһында йәштәр ҙә, өлкәнерәк йәштәгеләр ҙә бар, һуңғыларын беҙ "көмөш" ирекмәндәр тип атайбыҙ. Улар беҙгә ныҡлы терәк булып тора, мохтаждарға ярҙам итә", - тип белдергәйне БР Башлығы Радий Хәбиров ирекмәндәрҙең ҡаҙаныштары хаҡында.

# КҮПМЕ СӘСӘБЕҘ?

**Башҡортостанда быйыл бөртөклөләрҙең дөйөм майҙаны 1,538 миллион гектарҙан ашыуыраҡ була, тип хәбәр итте республика вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.**

"Техник культуралар майҙанын 635 мең гектарға еткерергә уйлайбыҙ. Был уҙған йылдағыға ҡарағанда 80 мең гектарға күберәк", - тине республиканың аграр ведомствоһы етәксеһе. Республикала шәкәр сөгөлдөрөн сәсеү майҙаны 46 мең гектарға тиклем кәмей. Был иһә, 2024 йылғы миҙгелдә эшкәртеү ҡыйынлыҡтарын иҫәпкә алып, уҙған йыл менән сағыштырғанда 12 мең гектарға аҙыраҡ, тиғән һүҙ. Шул уҡ ваҡытта быйыл Башҡортостанда, техник культураларҙан тыш, мал аҙыҡы культураларының майҙанын 28 мең гектарға арттырыу планлаштырыла. Йәмғеһе 599 мең гектарҙа (+5%) ултыртыла. Асыҡ грунтта картуф һәм йәшелсәләр майҙаны былтырғы кимәлдә һаҡлана (яҡынса 50 мең гектар). "Ғөмүмән, яҙғы сәсеү 2,152 миллион гектарға планлаштырыла, был уҙған йылға ҡарағанда 4,4 процентҡа күберәк", - тип билдәләне Илшат Фәзрахманов.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары музыкант, Башҡортостандың халыҡ артисы Ринат Рамаҙанов менән осрашты һәм "Һомай" хиты менән республиканы бар донъяға танытҡан "Ay Yola" төркөмөн "Ал да нур сәс халҡыңа!" миҙалы менән бүләкләне. Әйткәндәй, Ринат Рамаҙанов, "Арғымаҡ" төркөмө солисы булған саҡта, 2019 йылда "Күсмә халыҡтар донъяһы" халыҡ-ара этнофестивалендә еңгәндән һуң ошо миҙал менән бүләкләнгәйне. Башҡортостан Башлығы "Ay Yola" төркөмө музыканттарына маҡтаулы исемдәр биреү тураһында указға ҡул ҡуйҙы.

✓Башҡортостандың 22 районында ауыл хужалығы предприятиелары һәм фермерҙар яҙғы культураларҙы сәсеүгә төштө, тип хәбәр итте республика етәксеһе Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында. Был йыл яҙ иртә килде, әммә "сәсеүҙе ғәҙәттәге ваҡытта тиерлек башлайбыҙ", тип билдәләне ул. Баҫыуҙарҙа тәүге эштәр март аҙағында башланһа ла, һауа торошо үҙ төҙәтмәләрен индерҙе. Бөгөнгө көнгә Башҡортостан аграрийҙары яҡынса 23 мең гектарҙа ауыл хужалығы культураларын сәскән (пландың 1 процент). Башлыса иген һәм ҡуҙаҡлы культуралар. Ҡайһы бер райондарҙа рентабелле майлы культуралар үҫтерелә.

✓Башҡортостандың Транспорт министрлығында М-7 федераль трассаһының яңы участкаһын ябыу тураһында белдерҙеләр. 2025 йылдың 16 апреленән 16 июненә тиклем Дүртөйлө, Илеш һәм Саҡмағош райондарында М-7 трассаһының яңы участкаһында (Исәмәт, Үрге Йәркәй, Ляашты, Ишҡар, Әсән ауылдары аша урау юлда) барлыҡ транспорт өсөн хәрәкәт ябыла. Бында юл хәрәкәте менән автоматлаштырылған идара итеү системаһын ҡороу эштәре башҡарыла. М-7 Волга трассаһының иҫке йүнәлеше буйынса машиналар өсөн урау маршрут ойошторолған.

✓Мәсетле районынан "Атайсал" проектында әүҙем ҡатнашыусы, "Айша" хәйриә йорто етәксеһе Айнур Зәбихуллин Еңеүҙең 80 йыллығы алдынан "Мәңге хәтерҙә" акцияһын башлап ебәрҙе. Уның асылы Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар тәҙғән йәки йәшәгән йорттарҙы мәғлүмәт таҡталары менән биҙәүгә ҡайтып ҡала. Табличка башҡорт флагы төҫтәрендә эшләнгән. Унда, ветеран тураһында мәғлүмәттәрҙән тыш, Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығы һәм "Атайсал" проекты логотиптары төшөрөлгән. Ул яҡташтарын акцияла ҡатнашырға саҡырҙы.

✓ ***Проектлаусылар командаһы бинаның "А" хәрефе рәүешендәге ғәҙәти булмаған проектын башҡарҙы. Улар башланғыс кластар, урта звено һәм аҙыҡ-түлек блоктарын һеҙәмтәле бүлеү идеяһын тормошҡа ашырҙы.***



БАШ ҠАЛАМ

# ИҢ ҢУР МӘКТӘП

**Өфөлә Волга буйы федераль округындағы иң ҙур 2,2 мең урынлыҡ мәктәптең фасадын һәм ҡыйығын ҡороу һәм тышлау, биҙәү эштәре, вентиляция, эске электр менән тәьмин итеү эштәре бара.**



БР Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Артем Ковшов социаль селтәрҙәрҙә уҙған аҙнала Башҡортостанға эш сәфәре менән килгән Территорияларҙы үҫтереү фонды генераль директоры урынбаҫары Владимир Тарасов был проектты уникаль тип атаны, тип яҙҙы. Ысынлап та, объект бик шәп күренә. Өфөнөң "РАИР" компанияһының архитекторҙар һәм проектлаусылар командаһы бинаның "А" хәрефе рәүешендәге ғәҙәти булмаған проектын башҡарҙы. Улар башланғыс кластар, урта звено һәм аҙыҡ-түлек блоктарын һеҙәмтәле бүлеү идеяһын тормошҡа ашырҙы һәм буласаҡ уҡыу кабинеттарын мөмкин тиклем күберәк ҡояш яҡтыртылыуын тәьмин итте", - тип аңлатты Артем Ковшов. Кузнецов затоны биҫтәһендә мәктәп бюджет кредиттары программаһы сиктәрендә төҙөлә, уның операторы - Территорияларҙы үҫтереү фонды.

# БАШҠОРСТА АРАЛАШЫРҒА ЛА ӨЙРӘНӘЛӘР

**Өфөлә "Шаян-лига" отҡорҙар һәм шаяндар уйындарының финалы уҙҙы.**

**Сәхнәгә республиканың зона уйындарында еңеү яулаған иң яҡшы мәктәп командалары сыҡты.**

Быйыл өсөнсө тапҡыр уҙғарылған ярышта чемпион исемен бер юлы ике команда - Сибай ҡалаһынан Р.Өмөтбаев исемендәге Башҡорт лицейының "Башбармаҡ" һәм Ишембай районы Кинйәбулат ауылы мәктәбенең "4К" командалары яуланы. Икенсе урынды Өфөнөң 17-се мәктәбенән "17 йыһан", Тәтешле балалар мәҙәниәте үҙәгенән "Тәтеш" һәм Өфөнөң 102-се гимназияһынан "Етегән+1" командалары яуланы.



Өсөнсө урында - Тәтешле районының Үрге Тәтешле ауылы мәктәбенән "ТТ", Өфөнөң Ф.Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһынан "ХХ централ" һәм Сибай ҡалаһының 10-сы мәктәбенән "Үәт, ҡыҙыҡ" командалары.

"Бөгөн балалар айырыуса КВН менән ҡыҙыҡһына икәне билдәле инде. Ә был үҙ сиратында уларҙа башҡорт теленә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уята, улар туған телдә аралаша башлайҙар. Икенсенән, сәхнәлә үҙҙәрен тоторға өйрәнәләр. Алыҫ райондарҙан һәм ҡалаларҙан килеп, Өфөләге ҙур сәхнәлә уйнауы улар өсөн - оло ваҡиға! Был уйындар Башҡортостан Башлығы гранттары фонды, Йәштәр сәйәсәте министрлығы менән берлектә үткәрелә һәм уларға оло ярҙам өсөн ҙур рәхмәт әйткем килә", - тип белдерҙе Башҡорт асыҡ КВН лигаһы идараһы рәйесе Урал Кәримов.

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.**

ИҒТИБАР!

# АУЫРЫП... КИТМӘГЕҘ

**Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы май байрамдары осоронда медицина учреждениеларының эш графигын баҫтырып сығарҙы.**




Мәҫәлән, **2, 3, 8, 10 майҙа** республика поликлиникалары шәмбе графигы буйынса, йәғни иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 5-кә тиклем эшләй, табип саҡыртыу көндөҙгө сәғәт дүрткә тиклем ҡабул ителә.

**1 һәм 9 майҙа -** байрам көнө графигы буйынса - иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 5-кә ҡәҙәр.

**1, 2, 3, 8, 9, 10 майҙа** диспансеризация һәм профтикшереүҙәр үтергә мөмкин. Ҡатын-ҡыҙҙар консультациялары **1, 2, 3, 8, 9 һәм 10 майҙа** эшләй. Ошо уҡ көндәрҙә ауырлы ҡатындар УЗИ-скрининг үтә ала. Неонаталь һәм киңәйтелгән неонаталь скрининг үткәреү өсөн яңы тыуған сабыйҙарҙың биоматериалдары 2025 йылдың **1-11 майында** Өфөнөң Чернышевский урамындағы 41-се йортта ҡабул ителә.

**1, 2, 3, 4, 8, 9, 10 һәм 11 майҙа** иртәнге сәғәт 8-ҙән 4-кә тиклем ашығыс стоматология ярҙамын алырға мөмкин.

Байрам һәм ял көндәрендә рецептар буйынса дарыу препараттары, махсус дауалау туҡланыуы һәм медицина изделиелары, ауыртыуҙы баҫыу препараттары менән тәьмин итеү "Башфармация" дарыуханаларының эш графигына ярашлы башҡарыла.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## ЛАТИПОВ ҠОТДОС ҠӘНИФ УЛЫ

Ҡ.Ҡ. Латипов - Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан хәрби хеҙмәткәр, осоусы, авиация полковнигы. Советтар Союзы Геройы.

Ҡотдос Ҡәниф улы Латипов 1923 йылдың 14 июлендә Башҡорт АССР-ының Мәсәғүт кантоны Дыуан-Мәсетле олоҫона ҡараған Яңы Мишәр ауылында тыуған (әлеге ваҡытта Башҡортостан Республикаһы Мәсетле районы). Ата-бабалары - Дыуан-Әйле ырыуының аҫаба башҡорттары. 7 йыллыҡ ауыл мәктәбен тамамлағас, Мәсәғүт педагогия училищеһында белем ала. 1939 - 1940 уҡыу йылында Ләмәҙтамаҡ урта мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй. Осоусы булырға бала саҡтан уҡ хыялланған егет 1940 йылда Белорет аэроклубында шөғөлләнә, 1941 йылда Свердловск ҡалаһында осоусыларҙың хәрби авиация мәктәбен тамамлай. 1941 йылдың декабрь айынан Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша, Волхов, Калинин, Көнбайыш һәм Икенсе Украин фронттарында хеҙмәт итә. 1943 йылдан бирле - ИЛ-2 штурмовигы летчигы, командование ҡуйған хәрби бурыстарҙы һәр саҡ теүәл үтәй.

Ҡотдос Латыпов Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында 134 хәрби осош яһай, 22 танкты, аэродромдарҙа биш самолетты, туғыҙ артиллерия батареяһын, 450 һалдат һәм офицерҙы, техника һәм ҡорал менән тулы ике тимер юл эшелонын, 50-ләгән автомашинаны юҡ иткән.

Һуғыштан һуң авиаэскадрилья командиры, полк командиры урынбаҫары, авиация дивизияһында политбүлек етәксеһе, илдең Хәрби Һауа көстәре менән идара итеүсе үҙәктәрҙең береһендә етәксе, Н. Г. Жуковский исемендәге Хәрби Һауа инженер академияһында факультет етәксеһе дәрәжәләрендә хеҙмәт итә. 1952 йылда Мәскәү ҡалаһында В. И. Ленин исемендәге Хәрби-сәйәси академияны тамамлай. 1974 йылда отставкаға сыға.

Ҡотдос Латипов бер нисә китап авторы: "Витязи крылатые". - Уфа, 1995; "Может ли голубь ястребом стать?" - Уфа, 1999; "Голубок" мой легкокрылый". М., 2013; "Будь резвый, беззаветный, сокол ясный!" - Уфа, 2001.

Ҡ.Ҡ. Латипов 2016 йылдың 23 декабрендә Мәскәү ҡалаһында вафат була. Герой илебеҙ баш ҡалаһындағы Троекуров зыяратының Дан Аллеяһында ерләнгән.

Маҡтаулы исемдәре һәм башҡа бүләктәре: Советтар Союзы Геройы (15.05.1946), Ленин ордены (15.05.1946), өс Ҡыҙыл Байраҡ ордены (21.09.1943, 18.01.1945, 20.02.1945), I дәрәжә Ватан һуғышы ордены (06.04.1985), II дәрәжә Ватан һуғышы ордены (22.06.1944), Ҡыҙыл Йондоҙ ордены (1945), 15 миҙал.

Мәсетле районы үҙәге Оло Ыҡтамаҡта Геройға бюст ҡуйылған, Яңы Мишәр ауылы урамына һәм мәктәбенә Ҡотдос Латипов исеме бирелгән. Мәсетле районының Дыуан-Мәсетле ауылындағы Х. Фәткуллин исемендәге урта мәктәп бинаһына таҡтаташ ҡуйылған.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң экс-мэры, Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Павел Качкаевҡа "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған дәүләт һәм муниципаль хеҙмәт хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем тапшырҙы. "Мин 13 йыл икенсе урында эшләһәм дә, Башҡортостанға, баш ҡалабыҙ Өфөгә хеҙмәт итеүемде дауам итәм һәм тотош Башҡортостанға файҙа килтереү өсөн барыһын да эшләрмен", - тип рәхмәт белдерҙе Павел Качкаев.

✓Юл-патруль хеҙмәте инспекторҙары Өфө урамында мопед йөрөткән 10 йәшлек малайҙы туҡтатҡан. Әлбиттә, малайҙың водитель таныҡлығы булмаған. Өфө дәүләт инспекцияһы мәғлүмәттәре буйынса, ваҡиға урынына уның ата-әсәһен саҡыртҡандар, баланы транспорт менән идара итеүҙән ситләткәндәр. Бала тәрбиәләү буйынса бурыстарҙы тейешенсә үтәмәгән өсөн материалдар Рәсәйҙең Административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексының 5.35-се статьяһы буйынса малайҙың ата-әсәһен административ яуаплылыҡҡа тарттырыу өсөн бәлиғ булмағандар эштәре һәм уларҙың хоҡуҡтарын яҡлау комиссияһына тапшырылған.

✓Өфөлә 19 апрелдән навигация миҙгеле башланды. Был турала мэрияла үткән оператив кәңәшмәлә белдерҙеләр. Быйыл, 79-сы навигация миҙгелендә, өс паром кисеүе эшләй: "Трамплин", Сипайлово һәм Дудкин, шулай уҡ Сипайлово - Йәшел морон - Сипайлово ҡала маршруты ойошторола. Козарез кисеүенән баҡсасылар 1 майҙан йөрөргә мөмкин. Май уртаһынан, һыу кимәле түбәнәйгәс кенә, ДОК йөк-пассажир йүнәлеше планлаштырыла. Расписание һәм тарифтарҙы кисеүҙәр хеҙмәтенең рәсми сайтында урынлаштырырға вәғәҙә итәләр. Әлегә унда былтырғы мәғлүмәт кенә бар.

✓Башҡортостан спортсыһы Эльза Янабаева коляскала фехтование буйынса Рәсәй чемпионы исемен яуланы, тип хәбәр иттеләр республиканың Спорт министрлығынан. Коляскала фехтование буйынса Рәсәй чемпионаты Өфөлә бара. Римма Баталова исемендәге Спорт әҙерлеге үҙәгендә 18 төбәктән 98 спортсы ил чемпионы исеме өсөн көрәшә. Ярыштың беренсе көнө Башҡортостан спортсыларына бер нисә миҙал килтерҙе. Рапирала (С категорияһы) Эльза Янабаева еңеүсе булһа, Альбина Дәүләтова бронза миҙал алды (А категорияһы).

✓Башҡортостандың йыйылма командаһы бөтә стилдәге каратэ буйынса ил ярыштарында еңеүсе булды. Республиканың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, ярыштар Ижевск ҡалаһында үтте. Унда 1000-дән ашыу спортсы ҡатнашты. Республика каратистары 32 алтын, 20 көмөш һәм 13 бронза миҙал менән ҡайтты. Дөйөм миҙал зачетында Башҡортостан беренсе урынды алды.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ваҡ ҡарабаш аҡсарлаҡ, йылға аҡсарлағы**
**(Малая крачка)**



Латин теленән "аҡ маңлайлы аҡсарлаҡ" тип тәржемә ителә. Тоҡомдаштары араһында иң вағы, сыйырсыҡ ҙурлығында ғына. Түше, ҡорһағы аҡ төҫтә, өҫкө яғы күгелйем-ҡара, соңҡаһы, йылға аҡсарлағыныҡы кеүек, ҡара, бары тик аҡ маңлайы менән айырылып тора. Йәш ҡоштар ерәнерәк төҫтә була.

Тауышы моңло, "квит" йәки "кивит" тип ишетелә. Шулай уҡ "кит-кит-кит" тип һайрай.

Илдең урта киңлегендә һәм көньяғындағы диңгеҙ, эре йылға һәм күл ярҙарында йәшәй. Башҡортостанда Кама йылғаһы үҙәнендә осрағаны бар, таулы ерҙәрҙә юҡ, шулай ҙа Яйыҡтың үрге яғында һәм Уй йылғаһы үҙәне буйлап күренгән (Ильичев, Фомин, 1988). 1966 йылдың июнендә беҙ Өфө эргәһендә Дим һәм Ағиҙел йылғалары буйында 2-4 ҡоштан торған төркөмгә тап булдыҡ. 2003 йылда ошондай уҡ колония Тиҙ Танып йылғаһының түбәнге яғында, ҡомло утрауҙа осраны. 2006 йылда иһә Ағиҙелдең БДУ-ның Ноғай ҡасабаһы янындағы базаһы эргәһенән аҡҡан урынында күреү бәхетенә өлгәштек. Шулай уҡ Ҡырмыҫҡалы, Ишембай райондарында һирәкләп булһа ла теркәлгән. Ырымбур өлкәһендә оя ҡороп йәшәй.

Ваҡ ҡарабаш аҡсарлаҡ Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китаптарына инderелгән. 18-22 көндән бәпкәләр сыға, 1-1,5 аҙналыҡ булғас, ояны ташлап, үҙ аллы йәшәй башлайҙар.

Ваҡ балыҡ, һыуҙа йәшәүсе умыртҡаһыҙҙар менән туҡлана, уларҙы һыу өҫтөнән осоп йөрөп аулай, бының өсөн уға һыуға сумырға ла тура килә.

Августың тәүге яртыһында 6-12 ҡоштан торған төркөм йылы яҡҡа ҡуҙғала. Беҙҙең ҡарабаш аҡсарлаҡтарҙың ҡышлау урындары тип Көньяҡ-Көнбайыш Азия һәм Африка фаразлана.

Был төркөмгә шулай уҡ чайконосая крачка тигән ҡош та ҡарай. Уның башҡортса атамаһын, бәлки, аныҡ ҡына белеүселәр барҙыр? Күгәрсен ҙурлыҡ ул, суҡышы ҙур, ҡеүәтле, ҡара төҫтә. Тауышы йомшаҡ, "ке-век..ке-век" тип һайрай. Кавказ алдындағы ҙур йылға, күлдәрҙә йәшәй, Яйыҡ йылғаһында осрай. Дала бөжәктәре, һирәгерәк балыҡ, кимереүселәр менән туҡлана.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*АФАРИН!*



**Бер нисә көндән Рәсәй халҡы Бөйөк Ватан һуғышында еңеүҙең 80 йыллығын билдәләй. Тыуған еребеҙҙең үҙаллылығы, именлеге өсөн барған был һуғыш илдәге бөтә ғаиләләргә ҡағылды, фронттарҙан өсмөйөшлө хаттар алмаған, ауыр юғалтыуҙар кисермәгән ғаиләләр ҡалманы тейерлек. Шуның өсөн был көн рәсәйлеләр өсөн - ябай дата түгел. Тиҫтәләрәсә йыл үтеүгә ҡарамаҫтан, хатта һуғышты күрмәй үҫкән быуындар ҙа ул осорҙоң мәхшәре тураһындағы киноларҙы, документаль фильмдарҙы һыҡранмайынса ҡарай алмайҙыр. Шуға күрә лә ошо датаға бәйле үткәрелгән саралар күптәрҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра.**

# "БИҘӘК"ТЕҢ ЕҢЕҮСЕ БИҘӘКТӘРЕ

Ошо көндрҙә В.М.Комаров исемендәге Өфө ҡала Балалар ижады йортонда "Биҙәк" тип исемләнгән Балалар республика фестиваль-конкурсы үтте. Был сара милли мәҙәни традицияларҙы үҫтереү, туған телдәрҙе һаҡлау, Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының милли-мәҙәни бәйләнештәрен нығытыу маҡсатында 4-се йыл рәттән ойоштороla. Конкурстың бик мәғәнәле "Биҙәк" исемен йөрөтөүе лә осраҡлы түгел. Милли мәҙәниәттәр - ысынлап та дөйөм Рәсәй мәҙәниәтенең үҙенсәлекле, уны һәр ваҡыт байытып торорға һәләтле матур биҙәге. Ә инде сараның быйыл 9 майҙа бөтә ил киң билдәләйәсәк датаға бағышланыуы уның әһәмиәтен тағы ла арттырып ебәрҙе.

БР Мәғариф һәм фән министрлығы, Өфө ҡала хакимиәтенең мәғариф идаралығы, Өфө ҡалаһының Ғәли Ибраһимов исемендәге 2-се Башҡорт лицейы ойошторған фестиваль-конкурстың финал этабында республиканың 15 район һәм ҡалаһынан инновацион милли уҡыу йорттарының 200-ҙән артыҡ уҡыусыһы ҡатнашты. Сарала ҡатнашыусылар өс номинацияла көс һынашты. Тәүҙә сәхнәгә шиғыр һөйләүселәр сыҡты. "Тыуған ерем һаҡсыһы, һине данлайбыҙ!" тип исемләнгән конкурсты 1-4 класс уҡыусылары асып ебәрҙе. Улар башҡорт һәм рус телдәрендә Бөйөк Ватан һуғышы темаһына арналған шиғырҙар уҡыны. Шиғырҙың йөкмәткеһен тәрән төшөнөп, ихлас күңелдән тасуири уҡыған балаларҙы тыныс ҡына тыңлау мөмкин түгел ине. Күптәренең сығышын тамаҡҡа төйөр тығылып, күҙ йәше аша тыңланыҡ. Был балаларҙы әҙерләүсе уҡытыусыларға ҙур рәхмәт һүҙҙәрен еткерге килә. Тик конкурста ҡатнашыусы бөтә балаларҙың да дикцияһы бик насар булыуы ғына күңелде ҡырҙы. Был хәлде балаларҙың күп ваҡытын гаджеттарға бүлеүе, йәнле аралашыуҙың ныҡ самалы булыуы менән аңлатырға булалыр. Мускулдарға хәрәкәт кәрәккән кеүек, телгә лә хәрәкәт, йәки йәнле аралашыу бик кәрәк шул.

"Автор хореграфияһы" тип исемләнгән икенсе турҙа Ғафури районы Красноусол ҡасабаһының Нияз Мәжитов исемендәге Башҡорт гимназияһы коллективына етеүселәр булманы. Бейеү һалыусы хореографтарҙың хеҙмәте ысынлап та маҡтауға лайыҡ: бейеүҙәр бер-береһен ҡабатламай, һәр береһе үҙенсәлекле, башҡорт бейеүе хәрәкәттәренә тоғролоҡ та бар. Юҡһа, һуңғы ваҡытта башҡорт милли кейеме кейеп, сәхнәлә һикерәңләп йөрөгән балаларҙы күреп, эс боша ине. Был юлы костюмдар буйынса әллә ни дәғүәләр булмаһа ла, башҡорт милли кейеменә татар, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ кейемдәре элементтары килеп инеү осраҡтары ла күҙгә ташланды.

Өсөнсө "Тыуған ер һаҡсылары" тип исемләнгән номинацияла конкурста ҡатнашыусылар яңғыҙ йыр һәм дуэт менән сығыш яһаны. Сығыш яһаусы балалар үҙҙәренең ихласлығы, һуғыштың кеше яҙмышы өсөн шул тиклем аянысlы булыуын тәрән аңлауы һәм шуны үҙ сығыштарында күрһәтә алыуы менән һоҡландырҙы.

Фестиваль-конкурс Ғафури районы Красноусол ҡасабаһының Нияз Мәжитов исемендәге Башҡорт гимназияһы бейеү коллективының (етәксеһе - Буранова Айгөл Фәрит ҡыҙы) ҙур еңеүе менән тамамланды, улар Фестиваль-конкурстың иң юғары наградаһын - Гран-при яуланы. "Бейеү" номинацияһында шулай уҡ Өфө ҡалаһының Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының "Дуҫлыҡ" бейеү ансамбленең сығышы һоҡландырҙы.

"Шиғыр" номинацияһында 1-4 кластар араһында иң яҡшылары тип Набиуллина Юлиана (Учалы ҡалаһы), Хисаметдинов Динислам (Ейәнсура районы), Әғзәмов Сабит (Белорет ҡалаһы), 5-8 кластар араһында - Рәхмәсова Риналия (Ейәнсура районы), Бикмеева Софья, Тагирова Рузилә (Өфө ҡалаһы), 9-11 кластар араһында - Ғүмәрова Ынйы (Сибай ҡалаһы), Төхбәтова Алина, Ғәлиуллина Рәлиә (Белорет ҡалаһы) табылды.

"Йыр" номинацияһы еңеүселәре: 1-4 класс уҡыусылары - Йомағолов Азамат (Өфө ҡалаһы), Сәғәҙиева Самира (Стәрлетамаҡ ҡалаһы), Ғаззалов Ильяс (Белорет ҡалаһы); 5-8 класс уҡыусылары - Вәлиев Ролан (Стәрлетамаҡ ҡалаһы), Сабанбаева Залина, Ишйәрова Сәлимә (Сибай ҡалаһы), Ишбаев Линар (Стәрлетамаҡ ҡалаһы), 9-11 кластар араһында - Новикова Владислава (Стәрлетамаҡ ҡалаһы), Абзаҡов Фаил (Өфө ҡалаһы), Абдрахманова Владлена, Сәлимгәрәева Камилла (Өфө ҡалаһы).

**Рәйсә КҮЗБӘКОВА.**



*Красноусолдағы Башҡорт гимназияһы уҡыусылары.*

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1851 - 1857 йылдарҙа икенсе тапҡыр губернатор булған)**

Перовский үҙенең беренсе идаралығы ваҡытында ла башҡорттарҙы игенселеккә йәлеп итеү маҡсатында ашлыҡ магазиндары астыра; йән башына икешәр бот алынған ашлыҡ башҡорт аҙыҡ-түлек капиталы иҫәбенә алына һәм һәр йылһайын сәсеү алдынан таратыла, көҙ еткәс ошо уҡ тиклем ашлыҡ кире ҡайтарылырға тейеш булһа ла, был сара ла һөҙөмтәһеҙ ҡала.

Коканд походынан һуң Перовский батша ғали йәнәптәренән хәрби хеҙмәттә булған башҡорттарҙан талап ителгәндәрҙе еңеләйтеү өсөн түбәндәге льготалар индереүҙе һорай: 1) Ырымбур линияһынан Һырдаръяға тиклем ауыр йөк ташыусы башҡорт нарядын бөтөрөргә, бының өсөн килешеү хаҡына ирекле йөк ташыусыларҙы ялларға; 2) башҡорттар хәрби хеҙмәттә булған саҡта уларҙы туҡландырыу һәм кәрәк-яраҡ өсөн 70 мең һумға тиклем аҡса бүлергә; 3) башҡорттарға бүтәндәр менән бер тигеҙ һалынған земство сборын йән башына 20 тин көмөшкә кәметергә, ә уның айырмаһын берләштерелгән сбор иҫәбенә ҡапларға; 4) аҡрынлап булһа ла башҡорттар өсөн рус мәктәптәре, даими эшләүсе дауаханалар асырға һәм барса башҡорт ғәскәрендә кантон идаралыҡтары өсөн таш биналар һалдырырға. Был сығымдар өсөн 105 мең һум күләмендәге сумманы берләштерелгән сборҙан түләргә.

Был сараларҙың береһе генә файҙалы булып сыға: далаға транспорт йөрөтөүҙән азат ителгән башҡорттарҙың хәрби хеҙмәте ҡыҫҡара бирә. Иҫәнғол ауылында дауахана төҙөлгән; ул ауылда ат заводы эшләгәнгә генә әһәмиәтле булып ҡала, бында эшләгән башҡорттар һәм ат ҡараусылар, йәй көндәрен 150 кешегә тиклем, ошонда дауалана; айырым башҡорт идаралығы булған саҡта ауылдарҙан да хроник сирлеләр шул дауаханаға ебәрелә; идаралыҡ бөтөрөлгәс, дауахана ташландыҡ хәлгә килә һәм 1890 йылда янып юҡҡа сыға.

Кантон идаралығы өсөн таш бина 2-се кантонда, Сәйетҡол ауылында төҙөлә, әммә унда бер ҡасан да бер нәмә лә булмай һәм, моғайын, шулай уҡ юҡҡа сыҡҡандыр.

Мәктәптәрҙең хатта ки проекттары ла эшләнмәй.

Башҡорттарға ҡарата бер мәлдә барлыҡҡа килгән ҡарашынан сыҡмайынса, граф Перовский һәр бер осраҡта ла уларҙың айырым һәләттәре һәм боевой сифаттары хаҡындағы фекеренең ғәҙел булыуын раҫларға тырыша. 1853 йылда рус-төрөк һуғышы башланғас, хәрби хәрәкәттәр театрына Ырымбур һәм Урал ғәскәрҙәренән икешәр казак полкын ебәреү хаҡында Петербургтан бойороҡ килә. Перовский башҡорттарҙан торған полктарҙы һуғышҡа йәлеп итеү хаҡында тәҡдим индерә, уларҙың Ырымбур казактарынан бер нисек тә ҡайтыш булмауын белдерә. Шунан һуң батша ғали йәнәптәренән дүрт башҡорт полкын ойоштороу, уларға етәкселек итеү өсөн штаб офицерҙарынан полк командирҙарын, йөҙ баштарын регуляр кавалерияның обер-офицерҙарынан тәғәйенләү хаҡында бойороҡ килә; унан тыш, һуңғыларынан бер нисәшәр кеше полктарға субалтерн-офицерҙар урынына ҡуйыла. Ырымбур һәм Орск өйәҙҙәре башҡорттарынан ике полк - 1-се һәм 3-сө - һуғыш барған ваҡытта Ырымбурҙан сығып, Балтика корпусы составына индерелә, һәм бер сотня кавалерист Ревель янында инглиз десантын кире ҡағыуҙа ҡатнаша, ҡалған сотнялар һәм барса 3-сө полк бер урында ҡала, сөнки дошман бер ҡайҙа ла күренмәй. 1854 йылдың декабрендә йә иһә 1855 йыл башында тағы ла ике полк ебәрелә, әммә улар Воронежға һәм Һарытауға етеүгә солох иғлан ителә.

Ошо полктарҙы ойошторғанда яңы формалағы мундирҙарҙы тегеү өсөн пособие ҡарала, аҡ черкескалар алына, был башҡорттарҙың үҙҙәренә бик ҡиммәткә төшә. Бер рядовойҙы әҙерләр өсөн ун кеше аҡса йыя; улар кавалеристы сбруйлы яҡшы ат, амуниция, эске кейем, итектәр һәм башҡа ваҡ кәрәк-яраҡ менән тәьмин итергә тейеш була. Күптәр уларға күп түләүҙәр һалыныуы тураһында әсенеп һөйләй ине, ә башҡорттарҙан булған урындағы начальниктарҙың үҙҙәренең вазифаларын уҫал ниәттә файҙаланыуы хаҡында әйтеп тораһы ла юҡ: уларға кешеләрҙе теге йәки был эшкә сиратһыҙ тәғәйенләү хоҡуғы бирелгән, сөнки бындай сиратлап хеҙмәткә барыу башҡорттарҙа булмай, улар эшсе командалар составында хеҙмәткә ҡыҫҡа ваҡытҡа саҡырыл. Был осраҡта кемде тәғәйенләү мәсьәләһен кантон начальнигы үҙе хәл итә, был да кешеләрҙең мөлкәти хәленә ҡарап башҡарыла. Берәүҙәр хеҙмәттән азат ителә, бының өсөн начальникҡа түләнә, ә башҡалар хәрби хеҙмәт ауырлығын татый.

Был ваҡытта башҡорт полктары хәрби яҡтан әллә ниндәй файҙа килтермәй, ә халыҡ өсөн хәрби хеҙмәт һиҙелерлек ауырлыҡтар тыуҙыра. Уларҙы нарядҡа йөрөтөү башҡорттарҙың, казактар кеүек үк, хеҙмәткә һәр саҡта ла тейешле рәүештә сыға алыуы, йәғни үҙ ҡоралдары һәм аттары булыуы хаҡындағы фекергә нигеҙләнә.

Әгәр ҙә ул саҡта башҡорт полктарының нисек ойошторолоуы хаҡында белгән булһалар, һәр бер хеҙмәткә барыусы башҡорттоң йәмғиәттең оло ярҙамына мохтаж булыуы күренер ине. Тимәк, башҡорттарҙы казактар менән тиңләп булмай, сөнки һуңғылары һәр саҡта ла талап ителгән хеҙмәткә үҙ иҫәбенә, башҡаларҙың ярҙамынан башҡа бара.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!

# БАШҠОРТ ТАРХАНДАРЫ ҺӘМ ДВОРЯНДАРЫ



Этнограф Рим Янғужин Башҡортостанға тарханлыҡ институты татар-монголдар тарафынан индерелгән тип ҡарай. Унынса, ысынлап та, Сыңғыҙ хан, Батый хан яуҙарынан һуң айырыуса Алтын Урҙа ханлығы дәүерҙәрендә Башҡортостанда ла тарханлыҡ ныҡлы тамыр ебәргән булырға тейеш. Легендалар, шәжәрәләр һөйләүенсә, башҡорт ырыу башлыҡтарының, атаҡлы аҡһаҡалдарының байтағы бейлек, тарханлыҡ дәрәжәләре алған, уларға өҫтәмә льготалар бирелгән. Яһаҡ-һалымдарҙан ҡотҡарылғандар.

Рәсәй дәүләтенә ҡушылғас та башҡорттарҙың юғары ҡатламы тарханлыҡ дәрәжәләрен һаҡлаған. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, башҡорт ырыу башлыҡтары урыҫ аҡ батшаһына үҙ ихтыярҙары менән баш һалырға барғанда тәхет эйәһе исеменән үҙ ерҙәрен үҙҙәре биләмәгә ярлыҡтар яҙҙырып алғандар, тарханлыҡ, бейлек дәрәжәләрен яңырттырғандар. Мәҫәлән, бөрйән, ҡыпсаҡ, үҫәргән һәм тамъян ырыуҙары шәжәрәһендә яҙылыуынса, "үҫәргән ырыуынан Бикбау кенәз, бөрйән ырыуынан Иҫке бей кенәз, ҡыпсаҡ ырыуынан мишәүле Ҡарағужаҡ кенәз, тамъяндан Шәғәли кенәз - мәҙкүр дүрт бейҙәр Ҡаҙан шәһәренә барып, Иван Грозныйға мәғлүм булдылар. Ҡайдыр башҡорт йәмәғәттәренә ихлас хеҙмәт итеүҙәре менән ҡабул итеп, рәғиәтлеккә (дәүләт халҡы итеп) алғандан һуң тарханлыҡ дәрәжәләрен ҡәрәм (хөрмәт) итеп, үҙҙәренә наград итеп грамота илә ерҙәрен вә һыуҙарын үлсәтеп бирмәклеккә илтимас илә ғариза ҡылдылар" ("Башкирские шежере". Уфа, І960, 71-се бит).

Тарханлыҡ дәрәжәһе ырыу башлыҡтарына түрәлек хоҡуғын да биргән. Уларҙың күбеһе ырыуҙарының башлығы булып хеҙмәт иткән, күп кенә льготаларҙан файҙаланған. Тарханлыҡ дәрәжәһе нәҫелдән нәҫелгә күскән. Тархандар аҡ батшаның урындағы таяныстары булып, уға тоғролоҡ һаҡлаған. Һуғыш-фәлән сығып китһә, Рәсәйҙе яҡлап яуға күтәрелгән, ырыуҙаштарынан атлылар отрядтарын туплаған, сик буйы һаҡтары хеҙмәтен үтәшкән.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**

**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

### Ижтимағи мөнәсәбәттәр, ҡәбилә һәм ырыу бүлексәләре

**Себер даруғаһы олоҫтары**

1. Көҙәй - Ҡариҙел, Эҫем, Йөрүҙән (Юреинь), Ҡатау йылғалары буйында; тауҙар, урмандар һәм ҙур булмаған баҫыуҙар бар; тауҙарҙа, урмандарҙа, һаҙлыҡтарҙа арба юлы юҡ.
2. Танып - Танып түбәләренән алып Ҡариҙел йылғаһы эргәһендә; урман-ҡырҙар; Өфөнән арба юлы юҡ.
3. Кущинск - Әй йылғаһы буйында; тауҙар, урмандар, ҙур булмаған ҡырҙар; кәрәкле булған арба юлы бар.
4. Балыҡсы - Ҡариҙел һәм Төй йылғалары буйында; тауҙар, урмандар, ҙур булмаған баҫыуҙар; арба юлы бар.
5. Йәлдәк - Ҡариҙел йылғаһы буйында; тауҙар, урмандар, яландар; кәрәкле булған арба юлы бар.
6. Әй - Әй буйында һәм Урал аръяғында төрлө урындарҙа күлдәр буйында; Айыу тауы буйлап, тауҙар һәм ҡырҙар; Урал аръяғында - киң далалар; Өфө яғынан Уралға тиклем кәрәкле булған арба юлы бар, ә Себер яғынан Урал аръяғы буйлап юл асыҡ.
7. Мәкәтин - Урал аръяғы күлдәре буйында; ҙур ҡырҙар, урмандар.
8. Бала-Ҡатай - Уралдың ике яғы буйлап, йылғалар һәм күлдәр буйында; Уралдан Өфө яғына тауҙар, урмандар, яландар, ә Урал аръяғында ҙур дала, урман; Өфө яғынан Уралға тиклем юл бар.
9. Салйоғот (Челжетуцкая) - Урал аръяғында йылғалар һәм күлдәр буйында Ухтузск заводтарына яҡын, баҡыр заводы тирәһендә; ҡырҙар һәм урмандар; Өфө яғынан кәрәкле юл бар.
10. Бәкәтин - Урал аръяғында, күлдәр буйында.
11. Һеңрән - Урал аръяғында күлдәр буйлап; ҙур яландар.
12. Ҡыуаҡан - Әй һәм Йөрүҙән (Ерезинские) түбәләҫтәрендә һәм Һатҡы йылғаһы буйлап, Урал аръяғында күлдәр буйында; тауҙар, урмандар, ҡырҙар һәм ҙур тауҙар; Өфөнән тауҙар, урмандар, һаҙлыҡтар аша арба юлы юҡ.
13. Ҡара-Табын - Ағиҙел һәм Яйыҡ түбәләрендә, ә тап ҡайһы тирәлә икәнлеге Нуғай даруғаһының Ҡара-Табын олоҫон һүрәтләгәндә яҙылған, йорттар бер тирәлә урынлашҡан; Ағиҙел буйлап юл бар, Өфөнән был олоҫҡа тиклем арба менән барып булмай.
14. Боҫҡор (Бучкур)- Урал аръяғында, күлдәр буйында; ҙур дала, урман.
15. Табын - Ҡара-Табын олоҫо урынлашҡан ерҙәрҙә.
16. Унлар - Ҡариҙел һәм Байҡы йылғалары буйында; урман-ҡырҙар бар.
17. Һыҙғы - Урал аръяғында, Мейәс йылғаһы һәм күлдәр буйында; ҙур яландар, Ҡариҙел йылғаһы буйлап тауҙар һәм урмандар араһында пристань бар, Өфө өйәҙенең башҡа дин кешеләре һәм Көнгөр өйәҙенең обывателдәре, ишкәкле һәм елкәнле ағас карап-тарға иген тейәп, Өфө ҡалаһына алып килгән; ҡышҡыһын Өфөгә был араны егеүле аттарҙа 5 көндә үтһәләр, йәйгеһен арба юлынан үткәндәр.

**(Дауамы бар).**

✓ *Беҙҙең халыҡ аҡсаһын сығарып түләргә лә ашҡынып бармай әле, ҡасан ғына бушлай ҡарарбыҙ инде, саҡырыу ҡағыҙҙары бирерҙәрме икән, тип көтөп йөрөй.*



**"Башҡорт киноһы" тигән төшөнсә бармы ул? Билдәле кино режиссеры, продюсер Айнур АСҠАРОВ һәм шулай уҡ киң танылыу алған режиссер-документалист, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, "Башҡортостан" киностудияһының баш режиссеры Вилүрә ИҪӘНДӘҮЛӘТОВА менән әңгәмә ҡороп, беҙ ошо һорауға яуап эҙләнек. Һөйләшеү республика кинематографияһына ҡағылышлы киҫкен мәсьәләләрҙе лә урап үтмәне.**

# БАШҠОРТ
## донъя кимәленә

▸ **Башҡорт киноһына нигеҙ һалыусылар тураһында бер нисә һүҙ әйтеп китһәгеҙ ине...**

**Вилүрә Әҙеһәм ҡыҙы:** 25 майҙа Башҡортостан киностудияһы үҙенең 35 йыллығын билдәләй. Уны ойоштороусыларҙың береһе - Әмир Абдразаҡов. Үҙе әйтеүенсә, ул ғүмере буйы кино төшөрөүсе булырға хыяллана. Ырымбур өлкәһенән Өфөгә килгән егет, осраҡлы, тип әйтергә лә мөмкин, Гөлли Мөбәрәкова, Илшат Йомағоловтар менән бер төркөмдә Мәскәүҙең Театр сәнғәте институтына (ГИТИС) эләгә. Уны тамамлап ҡайтҡас, ике генә йыл академтеатрҙа эшләй. Уйнаған ролдәре бәҫле булһа ла, сәхнәнән китеп, республика телевидениеһына эшкә урынлаша. Ул ваҡытта телевидениела кино редакцияһы була. Әмир ағайҙың иң тәүге, иң матур эштәренең береһе - "Өмөт" фильмы. Унан күреүебеҙсә, ағай, ысынлап та, киностудия тураһында хыялланып, ҡасандыр ул килеп сығыр, тигән өмөт менән йәшәй. Мөмкинлектәр сикле булһа ла, сериалдарға тотона. "Бөртөкләп йыйыла алтын", "Киниә" фильмдары шулай тыуа. "Улар өҫтөндә эшләгәндә, телевидение сиктәренә һыймай башланым", - ти ул хәтирәләрендә. Ысынлап та, көндәлек яңылыҡтар, төрлө тапшырыуҙар сығарырға кәрәк, кино, тип ҡолас йәйеп тормайҙар унда. Әмир ағай инженер Әхнәф Тимербулатов менән туғыҙ ай буйы мәҙәниәт министрлығының ишеге төбөнән китмәйҙәр. Ҡыуып сығарһалар, икенсе көнөнә тағы баралар. Шулай Әмир ағайҙың ныҡышлығы, тырышлығы менән 1990 йылда киностудия асыла.

Башҡорт киноһына Малик Яҡшымбәтов индергән өлөш шулай уҡ ҙур ғына. Ул Ҡаҙағстанда йәшәгән еренән, ҙур фильмдар төшөрәм, тигән хыял менән ҡайта ата-бабалары төйәгенә. Ашхабадта "Көмөш ярым ай" Халыҡ-ара кинофестивалендә беренсе премия алған "Азатлыҡ ҡапҡаһы" 90-сы йылдарҙа халҡыбыҙҙың йөрәген ҡупарҙы. Әмир ағай башҡорт киноһының башланғысында торһа, уны үҫтереүҙә Малик Яҡшымбәтовтың хеҙмәте шаҡтай ҙур.

**Айнур Юлай улы:** Вилүрә Иҫәндәүләтова, Булат Йосопов, Айсыуаҡ Йомағоловтар - башҡорт кинематографтарының тәүге плеядаһынан һуң килгән икенсе быуын вәкилдәре, тип әйтер инем. Беҙ - өсөнсөләр. Башҡортостан кинематографы тип аталған йорттоң нигеҙе ҡорола һаман. Ул ҙурая, нығына. Уны беҙ ҙә ҡорабыҙ, әйтәйек, коммерция киноһына нигеҙ һалабыҙ. Башҡорт кинематографияһын Рәсәй, бөтә донъя кимәленә сығарыу - беҙҙең төп миссия. Ни өсөн, нигеҙ, тием, сөнки ул өйгә әйләнмәгән әле.

▸ **Һеҙҙең кинорежиссура өлкәһенә ылығып китеүегеҙ ниҙән башланды? Һеҙҙе таныулы иткән ижад емештәрегеҙгә ентекләберәк туҡталып үтәйек...**

**Айнур Юлай улы:** Мин кинематографҡа актер һөнәре аша килдем. Кем ул актер? Ул - театрға, режиссерға бойондороҡло кеше. Уның профессиональ үҫеше, танылыу яулауы сәхнә тирәһендәге тағы бик күп башҡа сәбәптәргә бәйле. Ә мин иректе яратам, кемгәлер, нимәгәлер бәйле булғым килмәй. Бәлки, ошо характерым кино өлкәһенә ылыҡтырғандыр ҙа. Санкт-Петербург дәүләт кино һәм телевидение университетына уҡырға индем. Уҡып йөрөгән саҡта, 2010 йылда, "Башҡортостан" студияһында "Енмеш" фильмын төшөрҙөк. Киң танылыу яулаған, төрлө фестивалдәрҙә призларға иң күп лайыҡ булған эшем ул. Сценарийын бала саҡ хәтирәләре буйынса үҙем яҙҙым. Әле лә ҡарайҙар, рәхмәт әйтәләр. Сөнки унда һәр кем үҙен күрә. Башҡорт киноһына һәйкәл уҡ булмаһа ла, уның иҫтәлекле бер таҡташы, тип әйтергә була "Енмеш"те.



2017 йылда төшөрөлгән тәүге тулы метражлы "Өфөнән һөйөү менән" фильмын да халыҡ яратып ҡаршы алды. Ул касса йыйымы буйынса милли кинолеталар араһында иң уңышлыһы һанала. Комедия жанрында ҡоролған, киң тамашасы өсөн тәғәйенләнгән фильмда йәшлек романтикаһы ла, милли колорит та бар. Иң мөһиме - күптәр баш ҡалабыҙ Өфөнө ҙур экранда яңынан асты.

**Вилүрә Әҙеһәм ҡыҙы:** Мин - документалист. Сергей Герасимов исемендәге Бөтә Рәсәй кинематография институтын тамамлап ҡайтҡас, оҙаҡ йылдар Башҡортостан телевидениеһында кинорежиссер булып эшләнем. Халыҡ ижадына арналған тапшырыуҙар әҙерләү, телевизион фильмдар төшөрөү тәжрибә туплау йәһәтенән ҙур ижади багаж бирҙе. Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыуына 450 йыл тулыу уңайынан эшләнгән социаль клиптарым 2008 йылда ТЭФИ - төбәк Бөтә Рәсәй милли телевизион бәйгеһенең премияһына лайыҡ булды.

Кинодокументалист булараҡ төшөрөлгән тәүге фильмым - "Төпһөҙ хазина" ("Золотое дно"). Баймаҡ районындағы Түбә алтын приискаһының һуңғы алтын ҡаҙыусылары - ундағы төп геройҙар. Кемеһенең аяғы юҡ, кемеһенең тештәре ҡойолоп бөткән, кемеһе хроник сирле. Хәҙер, шахта ҡаҙып, ғүмеребеҙ бәхетһеҙлектә үтте, тип илашырҙар инде, тигән уйым яңылышҡа сыҡты. Беҙ рәхәт йәшәнек, эш хаҡыбыҙ юғары булды, шифаханаларға йөрөнөк, миҙалдар бирҙеләр, һабантуйҙар үтеп торҙо, тип шаҡ ҡатырҙылар. Хатта Сталинға рәхмәт әйттеләр. Бөтәһе лә кешенең эске торошонан шул. 90-сы йылдар ине, фильм кинотаҫмаға яҙылды. Уйын жанрында тәүге эшем - балалар өсөн "Ап-аҡ ҡарҙар" ҡыҫҡа метражлы фильмы.

▸ **Ә хәҙер проблемалар тураһында фекер алышайыҡ. Сәнғәтебеҙҙең ошо өлгөһөн - башҡорт киноһын донъя аренаһына түгел, исмаһам, ил кимәленә сығарыу өсөн беҙгә нимә етмәй? Сценаристармы, оператор-монтажсылармы, әллә актерҙармы? Әллә башҡа сәбәптәрме?**

**Айнур Юлай улы:** Киностудиябыҙ бар ҙа ул, ләкин нәфис фильмдар аҙыраҡ. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, эш ниндәйҙер аныҡ системаға һалынмаған. Бер проект өҫтөндә эшләйһең, икенсе йыл, артабан ни буласағын белмәйһең. Режиссерҙарҙың береһе лә алға ҡарап, ике, өс, биш йылға план ҡора алмай. Мәҫәлән, грант алаһың да, йыл буйы эшләйһең, 30 декабргә фильмды төшөрөп бөтөрөргә кәрәк. Ә 1 ғинуарҙан нимә көтә һине - уныһы билдәһеҙ. Юлға һалынған ысын киностудия эше былай булырға тейеш түгел. Ҡайҙа атлайбыҙ, ҡайҙа барабыҙ, ниндәйерәк фильмдар төшөрәбеҙ, хөкүмәт беҙгә ниндәй план ҡуйған - быларҙың барыһын да алдан белеп торорға кәрәк. Шунһыҙ үҫеш юҡ. Папкамда ун уҡ булмаһа ла, алты-ете проект ята. Тик Башҡортостан ундай ҙур кино төшөрөргә әҙер түгел әле.

Бәләкәс кенә фильмда ла, титрҙарын ҡараһаң, йөҙҙән ашыу кеше ҡатнаша. Уларҙың һәр кеме, бәләкәсме-ҙурмы, үҙ өлөшөн индерә. Эш иң кәмендә бер йыл тирәһе бара, унан инде ижад емеше халыҡ ҡарамағына сыға. Әгәр ул башҡортса икән, аудитория сикләнәк. Беҙҙең халыҡ аҡсаһын сығарып түләргә лә ашҡынып бармай әле, ҡасан ғына бушлай ҡарарбыҙ инде, саҡырыу ҡағыҙҙары бирерҙәрме икән, тип көтөп йөрөй. Барып ҡарағас та әле: "Ух, шәп! Башҡорттарым, ғорурланам! Яҡшы төшөрөлгән!" - тип әйтеү урынына, иң тәүҙә, әлбиттә, тәнҡитләргә керешә. Бер-беребеҙҙе ошолай төпәләп торһаҡ, бер ваҡытта ла алға бармаясаҡбыҙ.

Шул уҡ ваҡытта, ыңғай миҫал булараҡ, Рәсәйҙә яҡут киноһы феноменын әйтеп үтергә мөмкин. Яҡуттар киноны күп төшөрә, тиҙәр. Күп төшөрөүҙән дә бигерәк, улар үҙҙәренең фильмдарын күп ҡарайҙар. Һорау тигән нәмә бар икән, тимәк, тәҡдим дә эргәлә генә йөрөй. Әгәр һәр башҡорт, 200 һум түләп, беҙҙең картиналарҙы ҡараһа, йүгереп йөрөп эшләйәсәкмен. Онлайн кинотеатр асып, унда үҙем төшөргән фильмдарҙы һалдым. Ҡыҫҡа метражлыһына - 50, тулыһына 100 һум хаҡ ҡуйҙыҡ. Башҡортса "Өс таған" да бар. Бер ай эсендә уны ике кеше ҡараған - 200 һум аҡса эшләнем килеп сыға. Башҡорт фильмы беҙгә кәрәкме-юҡмы, тигән һорауға яуап бына ошонда ята ла инде. Бындай мөнәсәбәт ҡанаттарҙы ҡайыра ҡайһы саҡ. Бәлки, халҡыбыҙ совет заманынан бушҡа өйрәнгәндер һәм һаман шунан арына алмайҙыр. Мәҫәлән, мине йыш ҡына театрҙарға премьераға саҡыралар. Ләкин билетте мотлаҡ һатып алам. Төрлө сараларҙа, ҡул эштәре бүләк итәбеҙ, тиһәләр ҙә, аҡсаһын түләйем. Был бит һеҙҙең хеҙмәтегеҙ, уның хаҡы бар, тим. Шулай баһалау кешене ҡанатландыра, үҫтерә хатта.

Был әйткәндәр башҡорт киноһына һорау тыуҙырыуға ҡағылды. Һис шикһеҙ, башҡорт киноһының үҙ баҙары булырға тейеш. Һорауға ҡыҫҡа ғына итеп яуап биргәндә, беҙгә иң элек аҡса етмәй, тип әйтер инем.

Икенсе проблема - ул фильмды прокатка сығарыу. Әйтәйек, "Өфөнән һөйөү менән" картинаһын Учалыла, Белоретта, Салауатта һәм башҡа ҡайһы бер урындарҙа халыҡҡа күрһәтә алманыҡ. Сөнки кинозалдар яҡшы аҡса килтергән Голливуд һәм Мәскәү фильмдарына өҫтөнлөк бирә. Бәләкәй ҡалаларҙы кинофикациялау дәүләт программаһы сиктәрендә Кино фонды аҡсаһына республикала биш тиҫтәгә яҡын кинотеатр асылды. Ошо мәсьәлә буйынса беҙ "Башҡортостан" киностудияһы директоры Юнир Әминев менән республика Башлығы Радий Хәбировта ла булдыҡ. Был эштә ҡатнашлығым да бар, тик, ғәжәп, прокатка эләгеү ауыр. "Пятерочка", "Магнит", "Ашан" кеүек супермаркеттар селтәрендә урындағы тауар бик сикле булған кеүек, беҙгә лә Рәсәй кинопрокатына инеп китеү - үтә лә сетерекле мәсьәлә. Барһаң, ҡарарбыҙ, Мәскәү ни тиер, тиҙәр. Көлкө! Туҡтағыҙ, ниндәй Мәскәү? Кинотеатрҙар селтәрен булдырып беҙ йөрөнөк, ә хәҙер беҙгә шулай тип өндәшәһегеҙ. Тағы яҡут кәрҙәштәр тәжрибәһенә килһәк, унда хәл бөтөнләй башҡа. Уларҙың кинотеатрҙары үҙҙәренең режиссерҙары, шул уҡ Степан Бурнашев фильмдарын хатта Голливуд блокбастерҙарынан өҫтөнөрәк ҡуя. Талаш-тартыш аша улар эште шулай ҡорҙо һәм бөгөн Яҡутстанда прокатта төп урынды яҡут киноһы алып тора.

Беҙҙә кинола төшөрөрлөк башҡорт актерҙары юҡ тип уйлай инем, ә "Өфөнән һөйөү менән" өҫтөндә эшләгәндә был фекеремдең яңылыш икәнен аңланым. "Медиастарт" креатив индустрия үҙәге менән берлектә "Киностарт. Актерская база Республики Башкортостан" тип аталған актерҙар базаһы булдырҙыҡ. Уға дүрт йыл самаһы инде. Республиканың барлыҡ профессиональ театрҙарын ҡарап сыҡтыҡ һәм актерҙарҙың видеовизиткаларын төшөрҙөк. Базаға 740 актер, мендән ашыу видео һәм 3 мендән ашыу фото индерелде. Хәҙер республикала кинопроекттар өсөн актерҙар һайлау күпкә еңеләрәк. Күҙгә-күҙ ҡарашып кастинг ойоштороп, театр сайттарын ҡарап, ваҡыт сарыф итәһе түгел. Интернетҡа инәһең дә, кәрәкле типажды һайлап алаһың. Актерҙар үҙҙәре рәхмәт әйтә беҙгә, сөнки уларҙы үҙәк киностудиялар үҙ фильмдарына йәлеп итә башланы.

**Вилүрә Әҙеһәм ҡыҙы:** Эйе, кинематографта бөтәһе лә сығымдарға бәйле. "Башҡортостан" киностудияһы - ул дәүләт учреждениеһы һәм беҙ хөкүмәт заданиеһы буйынса эшләйбеҙ. Билдәле кешеләр, мөһим ваҡиғалар төп тематиканы тәшкил итә. Әлбиттә, финанс та бүленә. Үкенескә, уның иң күп өлөшө коммуналь түләүҙәргә китә. Тулы ме-

***✓ "Әй Йола" төркөмөнөң "Һомай" композицияһын тәүҙә нисек ҡабул иттеләр? Һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтмәй, "һарай"мы, "һорай"мы, улай йыр булмай, башҡорттар улай һөйләшмәй, беҙҙеңсә түгел, һәм башҡалар, һәм башҡалар.***

# КИНОҺЫ...

## сыға алырмы?



тражлы картинаға ла йылда аҡса бирелмәй. Өмөт гранттарға ҡала, тик ул да бит - лотерея. Әллә отаһың, әллә юҡ.

Айнурҙың әйткәндәренә ҡушылам: кинопрокат бәкәлгә һуға. Райондарҙа, бәләкәй ҡалаларҙа 500 урынлы һәйбәт креслолар ҡуйылған йылы, матур кинозалдарыбыҙ бар. Тик уларҙа беҙҙең фильмдар күрһәтелмәй. Башҡорт киноһына нишләп урын булмаҫҡа тейеш? Уйлап ҡараһаң, беҙ теләнселәп йөрөргә тейеш түгелбеҙ ҙә баһа. Үрҙә әйтеп киткән минең "Ап-аҡ ҡарҙар" әллә ҡасан онотолдо, кеше уның бар икәнен дә белмәй хәҙер. Ауылдарға йөрөгәндә йыш ҡына, һеҙҙең фильмдарҙы ҡайҙа ҡарарға була ул, тип һорайҙар. Элекке һымаҡ, уларҙы клубтарҙа күрһәтергә кәрәк. Хаҡы ла түбәнерәк булһын. Презентациянан һуң документаль таҫмаларҙың архивта һаҡланып ятыуы йәнде әсетә. Яҙыусылар китапты уҡыусыға барып етһен тип яҙа. Йырсы ни өсөн сәхнәгә сыға - үҙенең моңон башҡаларға биреү ниәте менән. Беҙ, документалистар, ниндәйҙер проблема күтәрәбеҙ, тарихты күрһәтеп, пропаганда алып барабыҙ, быларҙы күберәк кеше күрһен тип тырышабыҙ.

Кадрҙарға килгәндә, уларҙы, әлбиттә, ситтән саҡырып та алырға мөмкин. Мәсьәлә, әлеге лә баяғы, аҡсаға барып төртөлә. Был осраҡта ҙур сығымдар хаҡында һүҙ бара. Шуға белгестәрҙең үҙебеҙҙеке булыуы яҡшыраҡ. Икенсенән, режиссерҙар, продюсерҙар, яҡтыртыусылар, ҡораусылар кәрәк. Киноны тауышһыҙ йә тейешенсә яҡтыртмайынса ла төшөрөп булмай. Бер кеше быларҙың барыһын да үҙ өҫтөнә ала алмай. Үҙем сценарий яҙам, үҙем төшөрәм, көйөн һалам, актер урынына ролдәрҙе уйнайым, минән дә бөйөгөрәк бер кем юҡ, тип хыялланып йөрөгән вундеркиндтар осрай ул ҡайһы саҡ. Тик улар бәләнән башҡа бер ни ҙә килтермәй. Һәр кем үҙ урынында булырға тейеш. Заманында Малик Яҡшымбәтов ярҙамы менән кадрҙарҙы Алма-Атаға ебәреп уҡытып алғандар. Беҙҙе лә, Башҡортостандан бер төркөм йәштәрҙе (11 кешене), 1993 йылда Мәскәүгә ебәрҙеләр. Улар араһынан бөгөн Рияз Исхаҡов менән икебеҙ генә режиссер һөнәре буйынса эшләп йөрөйбөҙ.

**Халыҡ, ҡасан Салауат Юлаев, Алдар батыр кеүек геройҙарыбыҙ тураһында кино төшөрөләр, ҡасан "Урал батыр"ҙы экранлаштыралар инде, тип көтә...**

**Айнур Юлай улы:** Күптәр, ҡасан Урал батырыбыҙ тураһында кино була, ҡасан Салауатты, Алдар батырҙы экранда күрәбеҙ, тип һорай, әлбиттә. Диванда ултырып, хәбәр һөйләү еңел ул, үҙебеҙҙең фильмдарҙы күргегеҙ килһә, әүҙемерәк булырға кәрәк, тип әйткем килә халҡыбыҙға. Проект өсөн эш хаҡынан аҡса бирер инегеҙме, тип тә һорау урынлы булыр. Продюсер күҙлегенән сығып фекер йөрөткәндә, милли кино бөгөн һорау менән файҙаланмай беҙҙә. Икенсенән, башҡорттар - бик консерватив халыҡ. Ошо көндәрҙә донъя кимәлендәге тректар араһында иң юғары урындарға сыҡҡан "Әй Йола" төркөмөнөң "Һомай" композицияһын тәүҙә нисек ҡабул иттеләр? Һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтмәй, "һарай"мы, "һорай"мы, улай йыр булмай, башҡорттар улай һөйләшмәй, беҙҙеңсә түгел, һәм башҡалар, һәм башҡалар. Аҙна-ун көндән йыр, дан ҡаҙанып, билдәлелек яулап кире әйләнеп ҡайтҡас ҡына, эйе, үҙебеҙҙеке, тип ризалаштылар. Миҙалдың ике яғы булғандай, тәнҡит тә кәрәк ул. Тик яңылыҡты бик ауыр ҡабул итеүебеҙ барыбер ҙә насар. Әйтеп үткәйнем инде, халыҡ үҙ аҡсаһы менән проектта ҡатнашырға ла әҙер түгел. Әйҙә, ошо арала краудфандинг *(үҙ аҡсаларын йәки башҡа ресурстарын бергә берләштергән кешеләрҙең, донорҙарҙы, коллектив хеҙмәттәшлеге. **Ред.)*** асайыҡ та, ҡарайыҡ: халыҡ, әйтәйек, Алдар батыр тураһында фильм төшөрөүҙә үҙ аҡсаһы менән ҡатнашырға әҙерме икән? Үҙ теләген, хыялын тормошҡа ашырыуҙы кем күпмегә баһалай икән, 100 һумғамы, 500-гәме? Әллә бер айлыҡ эш хаҡын, пенсияһын бирергә әҙерме? Һәр кем шәхсән күпме иғәнә индерә ала, ошо турала яҙһағыҙ ине редакцияға, хөрмәтле гәзит уҡыусылар. Бәлки, ошо рәүешле дөйөм фекер формалашыр һәм халҡыбыҙ араһында киң таралып, матур һөҙөмтәгә килтерер. Мин, мәҫәлән, кофе эскем килһә, барам да, күпмелер түләп, уны һатып алам. Башҡорт киноһын да ҡоро һүҙ менән генә төшөрөп булмай. Ғөмүмән алғанда, аҡса бары ысын һорауҙы, ихтыяжды күрһәткән бер билдә бит ул.

Һүҙ ҙә юҡ, батырҙарыбыҙ Салауат, Алдар, генерал Шайморатов тураһында фильмдар сығырға тейеш. Бәлки, Мортаза Рәхимов хаҡында ла. Әйткәндәй, әҙер "Ил ағаһы Мортаза" проектыбыҙ ята ул. Беренсе Президентыбыҙҙы тулы һәм объектив күрһәтәбеҙ тиһәк, уның халыҡ аҡсаһына төшөрөлөүе шарт. Һис шикһеҙ, "Урал батыр"ҙы ла экранға сығарыу зарур.

**Вилүрә Әҙеһәм ҡыҙы:** "Урал батыр" фильмы булырға һәм ул донъя кимәленә сығырға тейеш, тибеҙ. Ә уның өсөн бит күпме хеҙмәт һалырға кәрәк! Ярай, бәләкәй генә бюджетҡа төшөрҙөк тә икән, ти. Башҡорт киноһы ҡайҙа, тип һөрәнләгән кешеләр миңә сат йәбешәсәк: нишләп һин "Урал батыр"ҙы улай төшөрҙөң, башҡортҡа оҡшамаған ул, нишләп Кафтау артына бармай, Ирәндек буйында ғына йөрөттөң, нишләп Айға менеп төшмәнегеҙ, тип. Мелл Гибсон "Храброе сердце"һын ҡалайтып эшләп ҡуйҙы, Салауат тураһында ла фильм шулай булырға тейеш, тиҙәр. Бындай ҙур темаларҙы бөгөн уйланың да, иртәгә төшөрҙөң түгел шул. Режиссер уны күңелендә биш, хатта ун йыл йөрөтөүе ихтимал. Ижад емеше ҡапыл ғына шытмай бит ул, һыҙландырып, төн йоҡоларыңды алып, ғазаптарҙа тыуа. Мәңгелек ҡиммәттәр һалынған ул фильмды, ниндәй телдә эшләнеүенә ҡарамай, бөтәһе лә аңларға тейеш - кино экрандың мөғжизәһе шунда ла инде. Эйе, үҙ халҡыңды донъяға танытыуҙың иң көслө ысулы ул кино.

Килешәм, бушҡа өйрәткән совет заманы әллә ҡасан үткән. Яңыға күнергә, бөгөнгө ысынбарлыҡты ҡабул итергә ваҡыт инде. Ысынлап та, айлыҡ пенсиямды һалам, сыҡһа, киноға әбейемде, бала-сағаларымды, ейән-ейәнсәрҙәремде алып барам, тиеүселәр булырмы икән? Башҡа берәү, аҡсамды ла бирмәйем, ҡарамайым да, тип әйтһә лә, аптырайһы түгел. Халыҡ талап ҡуйһа, юғарылағы ағайҙар ҙа уйланыр: был киноны шул тиклем һорайҙар, халыҡтың күңеле шул тиклем тулышҡан, әйҙә, ярҙам итәйек, тиерҙәр, бәлки, һәм боҙ ҡуҙғалыр.

Башҡорт киноһы булһын, телебеҙҙе һаҡлайыҡ, телебеҙҙе яҡлайыҡ, тип хәбәр һатабыҙ. Ә ауылға ҡайтһаң, балаларҙың бөтәһе лә русса һөйләшеп йөрөй. Шунан нисек тел һаҡланһын! Беҙҙең теләктәр һәм ысынбарлыҡ аймылышып киткән түгелме? Кино сәнғәте - тел һаҡлау ҡоралдарының береһе булһын да икән, ти. Ә мәктәп? Иң башта мәктәп тора бит, телде унда өйрәнәләр. Аудитория булмаһа, кино ла булмаясаҡ. Тәрәндән уйлаһаң, мәсьәлә бына ҡайҙа барып төртөлә. Башҡортса һөйләшкән, исмаһам, тағы бер-ике быуын тәрбиәләй алырбыҙмы икән? Бөгөнгө ысынбарлыҡтан сығып фекер йөрөтһәң, был да бик икеле.

**Башҡортостан Башлығы Керчь аты тураһында кино төшөрөргә кәрәк, тигән фекер әйтте. Ул кино, моғайын, беҙҙең данлыҡлы Башҡорт кавалерия дивизияһы ҡаһарманлығы тураһында булырға тейештер бит инде? Ғөмүмән, башҡорт халҡының яугирлыҡ тарихы, мәҫәлән, 1812 йылғы француз һуғышы тураһында ла кино кәрәк. Һеҙгә, башҡа кинорежиссерҙарға эш күп...**

**Вилүрә Әҙеһәм ҡыҙы:** Әлегә Мәҙәниәт министрлығы тарафынан киностудияға документаль фильм төшөрөү буйынса йөкмәтелде. Уның концепцияһы өҫтөндә эш, эҙләнеүҙәр бара. Үкенескә, ветерандар, тере хәтер йөрөтөүселәр китеп бөттө, ваҡиғалар ҙа алыҫлашҡандан алыҫлаша бара. Фильмды нисек килтереп сығарырбыҙ - был ҙур һорау булып ҡала. 2000 йылда Керчь аты тураһында Сәрүәр Сурина менән телеочерк эшләгәйнек. "Толпар атым - уң ҡанатым" тип аталды ул. Ат исеменән, уның теле менән күңел кисерештәрен асырға тырыштыҡ. Яугир ат тарихы, ысынлап та, тетрәндергес. Миәкә районының Илсеғол ауылындағы "Большевик" колхозы Орлов тоҡомло был атты Өфөнән һатып ала. Дөйөм хужалыҡта бер йыл тирәһе генә эшләп ҡала ул, һуғыш башлана. Керчь яу ҡырында башынан аҙағына тиклем була. Ике тапҡыр яралана. Тыуған яғына әйләнеп ҡайтҡанда һуңғыһы уңалып та бөтмәгән ине, тинеләр ул саҡта иҫән ветерандар. Һуғыш еңеү менән тамамланғас, Башҡорт кавалерия дивизияһының аттарын Кавказға оҙаталар. Фәттәхов фамилиялы майор, "Керчь, башҡорттоң яу аты тарихы булып, Башҡортостанға ҡайтһын ине", тигән үтенес менән Буденныйға хат яҙа. Рөхсәт итәләр. Тауар составында Дим тимер юл станцияһына оҙатылған атты Илсеғолдан килеп ҡаршы алалар. Дәүләкәнгә тиклем алып ҡайтып, артабан "полуторка" машинаһына тейәйҙәр. Ләкин Керчь, кәртәләрҙе емереп, ергә һикерә һәм, кешнәп, баҫыуҙар аша тыуған ауылы яғына ҡарап саба. Илсеғолға таңда барып инә. Урамдар буйлап йөрөп сыға һәм һуғышҡа ҡайҙан киткән, шул ҡапҡаға барып төртөлә.

Әлбиттә, фильм ат тураһында ғына булмаясаҡ, Керчь - образ ғына. Уның аша Башҡорт кавалерия дивизияһы ҡаһарманлығын, кеше менән ат - ир-ат мөнәсәбәттәрен, уларҙың яугирлығын сағылдырған психологик һәм фәлсәфәүи картина тыуыр, тип ышанам. Ни өсөн башҡорт тәбиғәте менән атҡа шул тиклем яҡын, ни өсөн һәр икенсе халыҡ йыры ир-атҡа бағышланған? Ошо һорауҙар ҙа яуап көтә. Башҡорттар Рәсәй алып барған барлыҡ һуғыштарҙа ла иң алғы һыҙыҡта булған, иң ауыр саҡтарҙа аттары уларға тоғро ҡалған, ташлап китмәгәндәр. Атҡа дан йырлау бөгөнгө көндә бик дөрөҫ ул.

**Айнур Юлай улы:** Әгәр Керчь тураһында нәфис фильм төшөрөлһә, ул Стивен Спилбергтың "Боевой конь" киноһынан ҡайтыш булмаҫҡа тейеш. Минең уйымса, иң мөһиме, нимә тураһында буласаҡ ул? Керчь - ул өҫтө, формаһы ғына, ә эстәлеге һуң? Дуҫлыҡ тураһындамы, әллә экрандан батырлыҡ данланамы? Ошо юҫыҡта бер фекергә килгәс кенә фильмға тотонорға мөмкин.

**Һөйләшеүҙе йомғаҡлап әйтер һүҙегеҙ...**

**Айнур Юлай улы:** 24 апрелдә кинопрокатҡа "Йәй. Ҡала. Мөхәббәт" ("Лето. Город. Любовь") фильмы сыҡты. Ул - ете Өфө режиссерының дөйөм эше. Картина 17-24 апрелдә Мәскәүҙә үткән халыҡ-ара кинофестивалдең "Прожектор" программаһында күрһәтелде. Фестивалдарҙа ҡатнашыу - милли кино үҫеше өсөн бик мөһим. Шуны ла әйткем килә: фильмдар бик оҙаҡ йәшәй. Эйе, ҡыйбатҡа төшәләр, ләкин йылдар үтә килә, улар үҙҙәрен тулыһынса аҡлай.

**Вилүрә Әҙеһәм ҡыҙы:** Тарковскийҙың әйтеүе буйынса, һәр бер кино ижадсыһының папкаһында бөгөндән төшөрә башларҙай сценарийҙар ятырға тейеш. Улар беҙҙә бар, тик мөмкинлектәребеҙ сикле.

Фильмға һалған уй-фекерҙәренде халыҡҡа еткерә алһаң, ул уны эләктереп алып, балаларына күндерә икән - шул була беҙҙең хеҙмәт емеше. Кино сәнғәтендә эшләү профессия ғына түгел, ә миссия ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт киноһы бар һәм беҙҙең алдыбыҙҙа уны бөтә Рәсәйгә һәм донъяға танытыу маҡсаты тора. Бының өсөн нимә етмәй? Билдәле режиссерҙарыбыҙ, республикала кино сәнғәте үҫеш юлында һәм бөгөн уның башында торған мэтрҙарға алмашҡа өсөнсө быуын килде, ти. Кадрҙар мәсьәләһе киҫкен торһа ла, уны хәл итеп була һәм бының юлдары билдәле. Һорауға яуап һәм әңгәмә барышында әйтелгән төп фекер - заман һулышына ярашлы, милли кино ла, башҡа өлкәләр кеүек үк, тик коммерциялашыу юҫығында ғына үҫешә ала.**

**Һеҙ, гәзитебеҙҙе яратып уҡыусылар, бының менән килешәһегеҙме? Әйҙәгеҙ, баҫмабыҙ битендә ошо турала бәхәс ҡорайыҡ һәм хәҡиҡәтте бергәләп асайыҡ.**

**Рәсүл БАЙГИЛДИН әңгәмәләште.**

✓ *Шул хәбәрҙән һуң ун-ун биш көн үткәс, ағайымдан, Өфөлә госпиталдә ятам, тип яҙған хаты килгән. Ялан госпиталендә, үлгән, тип, үлектәр араһына һалҡынға сығарып һалғандар. Бер санитар әллә нисек абайлап ҡалған.*



* * *

"Тарпан" позывнойы алған Байсарҙың - үҙенең әсенеше, үҙ ғәме. Үткәндәрен ҡабат-ҡабат барлай, барыһын да үҙе хәл иткән, уйлап эшләгән, тик күңел барыбер ҙә һыҙлана икән.

Мобилизация иғлан ителгән көҙ. Ишек ҡыңғырауын ишетмәгән, төн уртаһында кемдәрҙер ҡыҙып-ҡыҙып бышылдашҡанға уянды. Ҡолаҡ һалды. Ҡатыны менән ике туған ҡустыһын таныны. Аптырап китте, нимә булған икән? Тора һалып сыҡты. Туған ғына түгел, дуҫ та инеләр. Ҡосаҡлашып күрештеләр.

- Йәһәт кенә йыйын, - тине туғаны. Ауыҙ асырға ла ирек бирмәй, ашығып һөйләп китте. - Аҫта атай машинала көтөп ултыра. Тиҙерәк Ҡаҙағстан сигенә етергә кәрәк. Унда беҙҙе көтөп торасаҡтар. Иҫләйһеңме, бер олатай ике улы менән ҡунаҡҡа килгәйне. Атайым шулар менән һөйләшеп килеште. Эш табышалар, тәүге осорҙа уларҙа йәшәп торорбоҙ. Артыҡ нәмә кәрәкмәй, булған аҡсанды йә картанды, документтарынды ғына ал. Оҙаҡҡа түгел бит, бола баҫылыу менән ҡайтырбыҙ.

- Мин кисә эштән һуң инеп, повестка алып сыҡтым.

- Нишләп улайттың инде? - тип көйөп китте туғаны. - Иң мөһиме, тере ҡалыу бит!

- Әллә, ҡасыу тураһында башҡа ла килмәне. Ҡартатайҙар ошолай ҡасып китһә, беҙ тыумаған да булыр инек. - Шунан тегенеһенең ҡапыл икеләнеп ҡалғанын күреп, өҫтәне: - Бындай ваҡытта һәр кем үҙе хәл итә. Алтын ваҡытынды әрәм итмә, бар.

Ул арала ярһып, атай кеше үҙе килеп инде.

- Нимә һаман һуҙылаһығыҙ ул? - тип екерҙе. - Таң ата бит инде.

- Мин повестка алдым инде, ағай, - тине Байсар.

Тегеһе телефонынан Байсарҙың атаһына шылтырата һалды:

- Баланды һуғышҡа ҡыуып алып китеп барғанда ни йәнең менән йоҡлап ятаһың?

Йоҡламай ине, ахыры, атаһы:

- Ҡыуып йөрөтөргә ул мал түгел, - тип ҡырыҫ ҡына яуап ҡайтарҙы. - Ир ҡорона ингән, быуыны ныҒынған - үҙе хәл итер. Һаулығым булһа, башҡаларға ыҙа булырмын, тип ҡурҡмаһам, үҙем дә барыр инем.

- Шулай уҡмы ни? Патриотһыңмы әллә? - тине ҡустыһы "патриот" һүҙенә мыҫҡыллы баҫым яһап.

- Патриот - илһөйәр тигән һүҙ түгелме һуң ул? Ҡасандан бирле иленде яратыу оят бер нәмәгә әйләнде? - тине Байсарҙың атаһы. Мосафирҙар ҡул һелтәп сығып киткәс, ҡатыны һынаулы ҡарап:

- Бармай ҡалып булмай инеме? - тип һораны. Үҙенде яратҡан, аҡыллы, сабыр, тоғро тормош юлдашының булыуы үҙе бер ҙур бәхет икәнен тағы ла бер тапҡыр тойҙо Байсар.

- Булмай, Сәкинә.

Бындай ваҡытта артығын өндәшмәй ҡатыны. Иренең холҡон күптән өйрәнеп бөткән. Әйттең ни, әйтмәнең ни, үҙе ниәтләгәндә эшләйәсәк. Хәләленең күҙ алдында яурындары төшөп, бәләкәсәйеп киткәнен абайлап, Байсарҙың эсе янып китте.

- Беләһең бит, Сәкинә. Кеше ҡайҙа ла үлә. Тыуғанһың икән, әжәлдән боҫоп ҡалып булмай. Беҙ Чечнянан нисә кеше иҫән-аман ҡайттыҡ? Эй ҡыуаныштыҡ - тере ҡалдыҡ бит. Әле нисәүебеҙ иҫән? Икәүҙе авария алып китте, өсәү эскелеккә бирелеп, үҙҙәрен харап итте, берәү үҙенә үҙе ҡул һалды... Дауам итәйемме?

Ҡатыны, кәрәкмәй, тигәнде белдереп, ҡул һелтәне лә, аш бүлмәһенә йүнәлде.

- Нимәләр әҙерләргә кәрәк? Ҡасан магазиндарға йөрөйбөҙ?

Хатта, ҡасан юлға, тип тә һорамайы. Ул, ОМОН-да булған замандарҙан алып, һәр ваҡыт әҙер хәленә күнеккәйне.




* * *

Байсарҙарҙың нәҫеле ҡалын. Аталарының ғаиләһендә генә лә ун бер бала. Ун бере лә иҫән. Һәр береһенең йәнә бишәр-алтышар бала. Әсәй урынында ҡалған, барыһын да һаман уҡмаштырып тота килгән иң өлкәндәре Нурия инәй Байсарға инселәп, аҡ ҡорбан салдырҙы ла бөтөн нәҫел-нәсәпте йыйып алды.

- Беҙҙең әсәйҙең бер туған ағаһы Мәмбәт Бәҙретдиновҡа һуғыш ваҡытында ике тапҡыр похоронка килгән, - тип башланы ул мулла Ҡөрьән уҡып, хәйерҙәр таратылып, килендәр өҫтәлгә аш ташыған арала. -Һуңғы тапҡырында мәктәптә уҡытҡан уҡыусыһы "Ағайҙы үҙ ҡулдарым менән ер ҡуйынына тапшырҙым", тип килеп һөйләгән. Шул хәбәрҙән һуң ун-ун биш көн үткәс, ағайымдан, Өфөлә госпиталдә ятам, тип яҙған хаты килгән. Ялан госпиталендә, үлгән, тип, үлектәр араһына һалҡынға сығарып һалғандар. Бер санитар әллә нисек абайлап ҡалған.

"Үлгәндән һуң", тип бирелгән Ҡыҙыл Байраҡ ордены, һуғыш бөтөп, егерме йыл үткәс килеп тапты. Тормошта мөғжизә күп. Чечня һуғышынан иҫән-аман урап ҡайттың, улым. Бынында ла ата-баба рухы һаҡлаһын. Һаҡлар. Һин батырҙар нәҫеленән, - тип фатиха бирҙе. Ҡасҡалаҡтың исемен әйтмәй генә:

- Бөтә кеше лә ҡасып китә алмай. Ошонсама бала менән беҙ ҡайҙа китә алабыҙ үҙ илебеҙҙән? - тип күрше бүлмәлә сыр-сыу килгән ваҡ балалар яғына ымланы. - Һинең кеүек тоғролар ҙа күптер, улым. Иңгә-иң терәр ирҙәр табылыр, - тип үҙенең мөнәсәбәтен белдерҙе.

Күҙ ҡабағы аҫтынан һөҙә биреп, өнәмәй ҡарап ултырған ҡустыһының, ҡасҡындың атаһының, йөҙөн дә йыртманы. - Һәр кем ауыртмаған яғына ята. Бер кем бер кемгә кәңәшсе була алмай бындай мәлдә.

Ҡорбан ашында ҡара көйөп ултырған ағаһы, сығып барғанында яңғыҙын ғына тап итеп, тишә ҡарап, "Дүррәк икәнһең!" тип әйтеүҙән тыйыла алманы барыбер. "Әйттем бит, әйттем!" тип хаҡҡа сыҡҡанына эстән генә һөйөнөр хәҙер. Атайыма төбәп әйтеүҙән тыйылыр былай эске тантанаһын, нисек кенә булмаһын, ҡусты кеше бит".

Ошоларҙы күҙ алдына килтереп, Байсар ирекһеҙҙән көлөмһөрәп ҡуйҙы: "Ярай, исмаһам, бер кеше ҡәнәғәтлек алыр". Уйланы ла болоҡһоно: "Туған туғанына ҡаршы барыр заман",- тигәндәре ошо булалыр.

Зарланырлыҡ түгел инде, Байсарҙы яҙмыш аяны быға тиклем. Ике тапҡыр госпиталдә ятып сыҡты, бөтә ағзалары ла теүәл. Өс тапҡыр ҡайтып ураны. Ҡайтҡан һайын байраҡтар тотоп, гармун уйнап ҡаршы алдылар. Аяттан аятҡа йөрөттөләр. Ҡорбандар арнап оҙаталар. Нәҫелендең таянысын күреү рәхәт. Ә атаһын инде әйтәһе лә түгел. Ирекмән булып китте, һәр ике ай һайын килеп урай. Бар кәрәк-яраҡты табалар, ташыйҙар. Блиндаж эшләр өсөн бүрәнәһенә тиклем тейәп килгәндәре бар. Тик нишләптер һуңғы ҡайтҡанында ҡатыны менән шул тиклем яратып, тырышып көткән донъяларын ташлап китеүе уғата ауыр булды. Аптырарлыҡ та түгел инде. "Уҙа барһа, ярты йыл йөрөләр", - тигән уй менән киткәйнеләр. Бигерәк оҙаҡҡа һуҙылды. Башҡа төрлө уйҙар керә. Гел миңә лә ыңғай килеп тормаҫ...

Әле иң әсендергәне: оҙатҡанда улы айырыла алмай йонсоно, түгелеп илап ҡалды. Яралары ныҡлап төҙәлгәнсе ике айҙан ашып киткәйне шул. Ныҡ әҫенгән. Тәү киткәндә бәләкәйерәк булып ҡалған, әле инде беренсе класта уҡып йөрөгән бала күпте белә, күпте аңлай. Илла-алла менән өгөтләп алып ҡалғайнылар, олатаһының ҡулынан ысҡынды ла машина артынан йүгерә. Эй йүгерә, эй йүгерә! Барыр-барыр ҙа, арыһа, тороп ҡалыр, кире бороларға ярамай, тиһәләр ҙә, түҙмәне. Туҡтап, ҡосағына алып, йыуатып, үҙе лә эстән генә һыҡранып, саҡ ҡуҙғалдылар. Гонаһ шомлоғо, тигәндәй, ҡарап торған ҡатындарҙың: "Бала күңеле әллә бер-бер нәмә һиҙәме икән?" тип һөйләнеүе ҡолаҡҡа салынды ла эстә бер шырау һымаҡ ҡаҙалып ҡалды. Бала күңеле әллә ысынлап та һиҙенде микән? Сараһыҙлыҡтан да ҡыйыны юҡ. Ауыр итеп көрһөнөүенә эргәһендәге "Мамай": "Аңлайым, дуҫ", - тигәнде белдереп, өндәшмәй генә беләген ҡыҫты. "Улым илар инде", - тип бышылданы Байсар.

* * *

"Әминең улым белмәҫ тә инде... Ул тип йән атҡан атаһының булғанын хатта белмәҫ тә, тип үкенәм". Бала, бала... "Бала бауыр ите", тигән булыр ине әсәһе. "Мамай" түш кеҫәһенә ҡәҙерләп һалып ҡуйған хатты сығарҙы. Тубығына һалып, һыйпап яҙҙы. Бында ҡараңғы, бер нәмә лә күренмәй ҙә, ул яттан белә. Бер уҡыусы бала яҙған: "Һаумы, ҡәҙерле һалдат! Исемеңде белмәһәм лә, гел һинең турала уйлайым. Өләсәйем һалдаттарға йөн ойоҡбаштар, бирсәткәләр бәйләй. Әсәйем окопта яндырыр өсөн майшәмдәр ҡоя. Беҙ, класс менән маскировка селтәрҙәре үрешергә барабыҙ. Бөтәбеҙ ҙә һиңә һаулыҡ, ҡыйыулыҡ теләйбеҙ. Тиҙерәк еңеп ҡайт! Көтәбеҙ", - тигән. Үҙ малайы яҙған һымаҡ... Танк төшөргән, ҡыҙыл йондоҙсоҡ.

Кеҫәһенә ҡабаттан һалыр алдынан баланың исем-фамилияһын йыртып, ауыҙына ҡапты: был интернет заманында белеп булмай. Дошман ҡулына эләгеп, балаға зыян итеүе бар.

* * *

Башындағы уйын уйлап бөтөр-бөтмәҫтән эшкә тотонорға күнеккән "Шырмый" позывнойлы Сабирға буш ултырыу ҡыйын. Уй тигәне лә уның башҡаларҙыҡы һымаҡ талғын ғына аҡмай, сиңерткә һымаҡ әле бында, әле тегендә һикергеләй.

Башта әсәһенең күптән ҡарау теймәгән өйөн күҙ алдына килтереп самаланы: стеналарын профнастил менән көпләргә кәрәк. Йылдың-йылы һылап йонсоу етер! Башын да ҡабаттан яптырғанда һәйбәт булыр. Рәшәткәләрҙе яңыртып баҡса ла эшләһәләр. Тик аҡсаны юллап ала алырҙармы? Яраланған өсөн түләнергә тейешле аҡсаһын саҡ юллап алған бер абзый үҙенә ярҙам иткән юристың телефонын әйткәйне бит. Шуны ағаһына нишләп ошоғаса бирмәне икән? "Юрый аяҡ салып, түбәнһетеп, бөтәһе лә элеккесә булырын шым ғына көтөп ултырыусылар күп тиҙәр бит урында. Ҡан түгеп алған тейеште ҡыйыу талап итеп, йолҡоп булһа ла алырға тура килә, тигәйне бит". Шунан уйы кәүҙәһе менән уны ҡаплаған "Торба" позывнойлы Хөрмәткә күсте. "Тышта эҫелә ята, берәй нисек хәстәрләргә ине. Ә нисек хәстәрләйһең? Бында ятып ҡалһа, уны ла тапмаҫтар микән? Ҡатыны аҡсаһын ҡалай юллап алыр?"

Ошондай мәлдә аҡса һанап ултырғаны йәнә оят кеүек тә. Тегендә тормош шул аҡсаға ғына терәлеп ҡалғас, ҡалайта алаһың? Нимә тиҙәр - "миллионерҙар" тиҙәр бит беҙҙе. Үәт бит! Ул миллиондар беҙ үлгәс кенә тәтерен уйламайҙар! Ялға ҡайтҡанында ауылға алып барып ҡуйған таксист иҫенә төштө.

- Идейныйҙар үлеп бөткәндер инде, - тине ул һөҙөп ҡарап.

- Нишләп улай тиһең, абзый?

-Һеҙҙекеләрҙе күп йөрөтәм. Мужиктар барыһы ла шул сараһыҙлыҡтан, аҡса өсөн йөрөлә инде, тиҙәр бит.

- Аҡсанан башҡаны белмәгәндәргә бүтәнсә аңлатып булмағас, шулай тиҙәр инде.

- Ваҡ ҡына булһаң да, әсе тешләй беләһең икән. - Таксист ҡыҙыҡһынып ҡарап ҡуйҙы.

- Позывнойым "Ҡырмыҫҡа" бит.

- Үҙеңә бик тура килә! Йә һуң, аҡсанан башҡа нимә йөрөтә кешене?

- Беренсенән, аҡсаның кәрәклеген инҡар итеп булмай, шулай бит. Ашарға, эсергә, кейенергә кәрәк. Бына һин дә, диванда пульт ҡына тотоп ятмай, төнгә ҡаршы сығып киткәнһең. Тик һуғыштағы аҡса... Өҫтөңдә дрон жыуылдай, артиллерия дөмбәҫләй, авиация бомба ташлай. Американың спутниктары космостан һине ҡарап, ҡайҙа йәшенгәнеңә тиклем секунд һайын әйтеп тора. Һәр тарафтан, өҫтән дә, аҫтан да үлем һағалай - ә һин ҡурҡыуынды еңеп, пулялар һыҙғырыуы аҫтында штурмға бараһың. Бының өсөн күпме аҡса кәрәк? Берәй ағзамды өҙөп алып зәғиф итһә, нисә һум мине ҡәнәғәтләндерер? Миллионды бит миңә үлгәс кенә бирәләр. Ә ожмахҡа мин бушлай ҙа инеп китермен тип өмөтләнәм.

**(Дауамы. Башы 14-15-се һандарҙа).**

✓ *"Исмаһам, был эпос, ундағы хәҡиҡәти һүҙ тураһында ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә аңлатып һөйләй алабыҙ, һәр өләсәй-олатай ошо бурысты үтәргә тотонорға тейеш хәҙер", - тине ағинәйҙәр.*



*АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ*

**Башҡорттоң милли булмышын, донъяға ҡарашын, рухи асылын сағылдырған "Урал батыр" эпосы - йәш быуынды тәрбиәләүҙә иң ҡеүәтле, үҙенсәлекле халыҡ педагогикаһы ул. Уны күңеле аша үткәргән кешенең рух камиллығына, аҡыл ҡеүәһенә шикләнеү мөмкин түгел. Мәңгелек ҡиммәттәрҙең асылына төшөндөргән, донъяны бары тик изгелек, рухи берҙәмлек ҡотҡарыуына инандырған тәрән мәғәнәле эposты белеү - һәммәбеҙҙең мөҡәddәс бурысы.**

# РУХЫ КАМИЛ, АҠЫЛЫ ТӘРӘН...

## "Урал батыр" эпосын күңеле аша үткәргәндең

Ошо бурысты тормошҡа ашырыуҙы күҙҙә тотоп, Учалы районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Мәрзиә Солтанбаева ағинәйҙәрен "Урал батыр" эпосын яңынан уҡып, ундағы хәҡиҡәти һүҙҙе ныҡлап аңға һеңдереп, яттан да һөйләп бәйге тоторға саҡыра ла инде. Әле өлкән йәштәгеләрҙе бындай ярышҡа йәлеп итергә бер кем батырсылыҡ итмәгән ошо ниәте тураһында башта Мәрзиә Сәғит ҡыҙының үҙенән һөйләтәйек әле. "Һеҙ башҡорт теле уҡытыусыһы булараҡ, "Урал батыр" эпосы менән яҡындан танышһығыҙ һәм уны ысынлап та халҡыбыҙҙың иң аҫыл ҡомартҡыһы тип иҫәпләйһегеҙме?"- тигән һорауҙы төбәнек бәйгене ойоштороусыға.

*- Әлбиттә! "Урал батыр" беҙҙең боронғо халыҡ булыуыбыҙҙың бер күрһәткесе, башҡорт халҡының борондан ошо ерҙә йәшәүен раҫлаусы документ, - тип һөйләп китте Мәрзиә Сәғит ҡыҙы. - Аҫыл ҡомартҡыбыҙ манаслы, олонхолы халыҡтар араһында тиңлек ғорурлығыбыҙ. Ә Учалы - Урал батырҙың бишеге ул. Бала саҡтан ололарҙың "Уралға бесәнгә барам. Уралда утын әҙерләйем. Малдарыбыҙ Уралда ята", тиеберәк һөйләшкәнен ишетеп үҫтем. Йәнбикә йылғаһы бар беҙҙә. Урал йылғаһы ла таш ярып беҙҙән баш ала. Уралдың гүре балҡып торған, тора-бара алтынға әйләнгән, ти. Беҙҙән район алтын һәм йәшмә билбауы бит. Урал батыр, әлбиттә, бер урында ғына тормай, ил-донъя гиҙә. Донъяла биш ил барлығын белеүе тураһында ла әйтелә эпоста.*

*Ғөмүмән, мин халҡыбыҙҙың ҡомартҡыларына, тарихына битараф түгелмен. Уҡытыусылыҡ бурысы ла иҫнемә яуаплылыҡ һалғандыр. Хәтеремдә, бер заман уҡыусылар араһында үткәрелгән "Урал батыр" эпосын ятҡа һөйләтеү буйынса республика конкурсы тураһында май аҙағындараҡ Өфөгә барғанда ишетеп ҡайттым. Үҙебеҙҙең мәғариф бүлегенә барып, ошо хаҡтағы хатты таптырып, алтынсы класты тамамлаған уҡыусым Алина Бакирова менән эпостың 1000 юлын ятлап, июнь айында конкурсҡа барҙыҡ. Республика кимәлендә инде тапҡыр үткәрелгән конкурста ҡатнашыусыға ана шул 1000 юлды ятлау шарты ҡуйылғайны. Ҡоролтайҙың Рәхмәт хаты, ҡурай менән бүләкләнде уҡыусым.*

*Беҙ бына нисәмә йылдар инде "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары менән башҡорт халҡының хәтергә генә күсә яҙған күпме ҡомартҡыһын тергеҙҙек, хатта беҙҙең ағинәйҙәр киләсәк быуынға ер-һыу атамаларын өйрәтеп ҡалдырыу эшенә лә беренселәрҙән булып тотондо. Әле килеп шулай уҡ өлкәндәр араһында беренселәрҙән булып "Урал батыр" эпосы буйынса уникаль проектты тормошҡа ашырырға батырсылыҡ иттек. Ағинәйҙәр менән эпосҡа арналған сара үткәреү күңел төбөндә күптән яралғайны. Һәр ағинәй, һәр башҡорт эпостың йөкмәткеһе менән таныш булырға, ундағы аҡылды йөрәгендә йөрөтөргә тейеш, тигән уйҙамын. Шуға ла Учалы ағинәйҙәре араһында "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр мәктәбен тергеҙеү һәм үҫтереү, эпосты өйрәнеү һәм популярлаштырыу, башҡорт халҡының тарихи һәм мәҙәни мираҫына һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләү, башҡорт халыҡ ижадының иң яҡшы өлгөләрен һаҡлау һәм таратыу буйынса фәнни-ғәмәли конференция үткәреү тураһында күптән хыялланa инем. Конкурс программаһын фәнни-ғәмәли конференция рәүешендә төҙөүгә күп көс һалдым. Сараны февраль аҙағында уҡ планға индереп, үткәреү урынын, ваҡытын 11 апрелгә билдәләп ҡуйғайныҡ. Әле беҙҙең ошо ниәтте ҡеүәтләгәндәй, интернет селтәрендә Ринат Рамаҙановтың "Һомай" йыры килеп сыҡты. Бер ваҡытҡа тура килеүе - үҙе мөғжизә! Изге уйҙар, изге теләктәр йыһанда шулай берләшәләр ул...*

...Шулай итеп, билдәләнгән көндә Учалы районы ағинәйҙәре Ҡобағош ауылына "Урал батыр" эпосы - боронғоларҙың аманаты, әйтер һүҙе" тип аталған сараға йыйылды. Ҡобағош ауылы мәҙәниәт йорто хеҙмәткәрҙәре, мәктәп уҡыусыларының Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡ, уларҙың улдары Урал һәм Шүлгәндең һунарҙан ҡайтыу күренеше бик матур итеп сәхнәләштереүен ҡарағандан һуң, ижади бәйге башланып китте. Тәүҙә эпосты кем кемдән яҙып алғанлығы, нисегерәк яҙылыуы тураһында белешмә бирелде. Артабан эпостың мәңге актуаллеген юғалтмаҫ шиғри юлдарын девиз итеп алған Балбыҡ, Әүешкүл, Килмәк, Миндәк, Уральск, Көсөк-Маяҡ, Мәскәү, Бәләкәй Ҡаҙаҡкүл (Зәйнәкәй), Ҡобағош ауылдары ағинәйҙәре командалары үҙҙәре менән ихлас таныштырҙы. Шунан иһә эпостың үҙҙәренә тәғәйен бүлеген үҙ һүҙҙәре менән бәйән итте. Икенсе өлөш үҙенә күрә бер ғилми-ғәмәли коференция төҫөн алды. Бирелгән һорауҙарға яуап бирә бара, эпоста сағылдырылған төп һүҙ, Уралдың төп маҡсаты, үткән юлында нимәгә төшөнгәне, Шүлгәндең яуызлыҡ юлын һайлауының сәбәбе, кешелек эволюцияһының үҫеше, Уралдың кешелеккә ҡалдырған васыяттары тураһындағы хәҡиҡәт асылды. Һәр ауыл ағинәйенең шул тиклем тырышлыҡ һалып, эпосты еренә еткереп өйрәнгәненә шаһит булындьı. Тимәк, ошо сарала ғына бишәр кешелек туғыҙ командаһан 50 кеше эпосты бик яҡшы белә, тигән һығымта яһалды.

Конкурс дүрт турҙа үтһә лә, ағинәйҙәр һынатманы, үҙҙәренең матур, рухлы сығыштары менән ҡыуандырҙы. Өс өлөштән, туғыҙ бүлектән торған эпостың йөкмәткеһен матур итеп асып һала алды. Эпос йөкмәткеһен яҡшы итеп телдән дә, яттан да һөйләү, ижади ҡараш, актерлыҡ оҫталығы, сәхнә телмәре, музыкаль биҙәлеш - коллективтар тап ошо критерийҙар буйынса баһаланды ла инде.

Бүләкләү тантанаһында сәләмләү һүҙе менән Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Белорет районының "Урал" гәзите баш мөхәррире Сатура Минһажитдинова сығыш яһаны һәм "Урал батыр" эпосын пропагандалауға баһалап бөткөһеҙ өлөш индергән, ошо сараны үткәреүгә күп көс һалған Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Мәрзиә Сәғит ҡыҙы Солтанбаеваға ҙур рәхмәттәр белдереп, Диплом тапшырҙы. "Халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадын һаҡлау" номинацияһында Уральск ҡасабаһынан Динә Кәримова бүләкләнде. "Халҡым мираҫы - ҡобайыр" номинацияһында Әүешкүл ауылы ағинәйҙәре менән бер команда булып килгән Комсомольск ҡасабаһы мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре Айгөл Сәғитова менән Гөлшат Шәһиева ла Дипломға лайыҡ булды. Килмәк ауылы ағинәйҙәре - III урынға, Мәскәү ауылы ағинәйҙәре - II урынға, Ҡобағоштар I урынға лайыҡ булды.

Ололар хәтере шиғыр ятларға эшкинмәй, тигән фекер бар. Ошоно инҡар итеп, сараның бер өлөшө эпостан өҙөк ятлауға ла бағышланды. Һәр командананан берәүме, бер нисәүме үҙенә бирелгән бүлектән өҙөк ятлап һөйләне. Был өлөш ифрат матур килеп сыҡты. Эпосты яттан һөйләүселәр айырым баһаланды. III урын Балбыҡ ауылынан Рәсилә Мусинаға, Көсөк-Маяҡ ауылынан Гөлсирә Ғариповаға, II урын Миндәктән Миңзифа Сәхәүетдиноваға, Әүешкүлдән Әлфинә Иҫәкәноваға бирелде. I урынға Бәләкәй Ҡаҙаҡколдан Гөлнара Исламова лайыҡ булды. Шулай уҡ Ураҙ мәктәбе уҡыусыһы - Ҡобағош ауылы ҡыҙы Гөлиә Ғатауллинаға ла I урын бирелде. Әлбиттә, 4500 самаһы шиғри һәм 20-ләп сәсмә юлдан торған фәлсәфәүи, ҡатмарлы әҫәрҙе ятларға йөрьәт иткән һәр бала маҡтауға лайыҡ. Гөлиә 600 юлды бер тынала, һис бер яңылышмай һөйләне лә бирҙе.

Урал батыр үткән юлды барлап, илебеҙҙә барған Махсус хәрби операция, изге бурыстарын үтәүсе ирегеттәребеҙ, сарала ҡатнашыусы ике ағинәйҙең һәләк булған уландары Әмир Ғамир улы һәм Тимур Абрар улының батырлыҡтары иҫкә алынды. Әсәйҙәргә район башҡорттары Ҡоролтайы исеменән бүләк- күстәнәстәр тапшырып, батыр уландар тәрбиәләгәндәре өсөн оло рәхмәт еткерелде.

Шулай итеп, ниндәйерәк һығымталар эшләнде? "Һәр халыҡ үҙенең ҡомартҡыларын һаҡлау, таратыу өҫтөндә эшләй, беҙ нимә эшләй алабыҙ?" тигән һорау ҙа ҡуйылғайны. "Исмаһам, был эпос, ундағы хәҡиҡәти һүҙ тураһында ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә аңлатып һөйләй алабыҙ, һәр өләсәй-олатай ошо бурысты үтәргә тотонорға тейеш хәҙер", - тине ағинәйҙәр. Ҡоролтай рәйесе Мозафар Харис улы Әүеш тауы итәгенә "Урал батыр" эпосынан алынған һүҙҙәр яҙылған баннерҙар ҡуйырға вәғәҙәләне. Шулай уҡ был сараны киңерәк масштабта ҡабатлап, бар республиканың оло быуыны өсөн өлгө итеүгә әлгәшергә кәрәк, тип тә әйтте ағинәйҙәр. Юҡһа, йәш быуын беҙҙең һымаҡ түгел хәҙер, тип зарланабыҙ, ләкин йәш быуын беҙҙең ата- бабалар һымаҡ булһын өсөн улар аҡылын тапшырырға ла кәрәк бит әле. Бының иң яҡшы алымы, әлбиттә, эпостағы аҡылды йәш быуын күңеленә ныҡлап һеңдереү. Учалы ағинәйҙәре бына шул бурысты атҡарыу юлында.

**С. МИНҺАЖЕТДИНОВА.**



✓ *Реабилитация үткән ҡыҙҙар суд ҡарары буйынса үҙҙәренә тәғәйен ваҡытты тултырып сығыуға (законға ярашлы, улар был учреждениела өс йыл ғына була ала) холоҡтарын төҙәтергә, донъяға икенсе кеше булып бағырға тейеш.*



ИНТЕРНЕТТАН



# АҘ ХӘРӘКӘТ...
## яҡшыға түгел

■ Белгестәр әйтеүенсә, тап цивилизация ҡаҙаныштары кешегә ҙур зыян килтерә. Бөгөнгө кешенең тормошонда гигиена ла, комфорт та бар, әммә сәләмәт булыу өсөн иң кәрәклеһе булған хәрәкәт юҡ. Хатта балалар ҙа хәрәкәтле уйындарға ҡарағанда, компьютер уйындарын хуп күрә. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы (ВОЗ) үткәргән тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, Евросоюз илдәрендәге бөтә үлемдәрҙең 10 проценты - аҙ хәрәкәтләнеүҙән. Бындай хәл бөгөн күп илдәрҙә күҙәтелә. Кеше көндәлек тормошонда ни тиклем заманса ҡоролмаларҙы күберәк һәм йышыраҡ ҡуллана, шул тиклем аҙыраҡ хәрәкәт итә. Бындай шарттарҙа әгәр ҙә кеше үҙенә-үҙе ярҙам итмәһә, фән дә, медицина ла ярҙам итмәйәсәк, ти белгестәр.

■ Диетологтар лимонды организмды таҙартыусы иң яҡшы сара тип һанай. Ул организмдан шлактарҙы ҡыуа, махсус диета тотҡанда һәм физик күнекмәләр яһағанда был цитруслы үсемлек артыҡ ауырлыҡтан ҡотолорға ярҙам итә. Бынан тыш, лимонда иммун системаһын нығытыусы, аллергия, туберкулез, ревматизм мәлендә хәлде яҡшыртыусы С витамины күп. Диетологтар лимондың ҡабығын да ашарға тәҡдим итә, сөнки уның составындағы пектин асығыу тойғоһон бер нисә сәғәткә баҫа.

■ Баҫҡыс бер ҡаттан икенсеһенә әләгеү мөмкинлеге биреүсе сара ғына түгел, ә тренажер ҙа икәнлеге күптән билдәле. Әммә уның файҙаһы булһын өсөн баҫҡыстан дөрөҫ күтәрелергә кәрәк, ти Роухемптон университеты ғалимдары. Белгестәр әйтеүенсә, бер юлы бер нисә баҫҡысты аша атларға ярамай, был саҡта калориялар әүҙемерәк янһа ла, ваҡ аҙымдар менән атлау улар менән яҡшыраҡ көрәшә. Ғалимдар иҫәпләүенсә, аҙнаһына биш тапҡыр 5 баҫҡыс аралығы үтеп, кеше 302 калориянан ҡотола ала.

■ Калифорния һәм Мадрид университеттары нейробиологтары ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең баш мейеһен, аныҡлап әйткәндә, хис-тойғолар һәм хәтер өсөн яуап биргән гиппокамп өлөшөн тикшергән. Һөҙөмтәлә ҡатын-ҡыҙ баш мейеһе формаһы буйынса ирҙәрҙекенә ҡарағанда бәләкәйерәк булһа ла, ҡатын-ҡыҙҙар уны әүҙемерәк ҡуллана. "ИноСМИ" баҫмаһы яҙыуынса, гиппокамп ҙурыраҡ булғанға күрә, ирҙәрҙең баш мейеһендә нейрондар күберәк була, был үҙ сиратында юғары аҡыл ҡеүәһенә килтерә. Әммә гүзәл заттарҙың мейеһе әүҙемерәк эшләй, шуға ла улар аҡыл йәһәтенән көслө заттан бер ҙә артта ҡалмай, ти ғалимдар.

■ Ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда күпкә хислерәк, тип белдерә Вашингтон университеты менән Джорж Мейсон университеты белгестәре. Һәр хәлдә, улар йышыраҡ беренсе ҡараштан ғашиҡ була, тип раҫлай улар. Төрлө илдәрҙә йәшәгән 70 мең кешенән һорау алғандан һуң, тап ир-егеттәрҙең көтөлмәгән ярһыулыҡҡа һәләтле икәне асыҡланған. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы ир-аттарҙың 48 проценты тәү ҡараштан ғашиҡ булған, ҡатын-ҡыҙҙар араһында бындайҙар иҫәбе 28 процент ҡына. Дөрөҫ, ир-егеттәр ятраҡ кешеһенә йышыраҡ хыянат итә, ситкә йөрөүселәр һаны улар араһында 33 процент, ҡатын-ҡыҙҙарҙа - 19.

БЕҘ БЕЛМӘГӘН ДОНЪЯ

# ХОЛОҠТАРЫН ТӨҘӘТЕП,
## донъяға икенсе кеше булып бағалар

**Ишембай ҡалаһының бер яҡ ситендә бейек ҡойма менән уратып алынған ярайһы уҡ ҙур биләмә бар. Элегерәк уны халыҡ "ҡыҙҙар төрмәһе", "ҡыҙҙар колонияһы" тип йөрөтә ине. Һирәк-һаяҡ "колониянан ҡыҙҙар ҡасҡан, һаҡ булығыҙ", тигәнерәк иҫкәртеүҙәр ишетелеп ҡалмаһа, бейек ҡойма артында йәшәүселәрҙең нимә менән шөғөлләнеүе, нисек көн күреүе менән ҡыҙыҡһыныусы ла булманы...**

### Бөгөнгө көн мәғлүмәттәре

Бөгөн ҡойма артында йәшәгән ҡыҙҙарҙың тормошо һәр беребеҙҙең күҙ алдында тиерлек, интернет селтәрендә улар эшмәкәрлеген яҡтыртҡан мәғлүмәтте уҡып ҡына өлгөр. Ҡайҙа барып, ҡайҙа йөрөһәләр ҙә, фото һәм видеотчет учреждениеның сайтына урынлаштырыла, сөнки атай-әсәйҙәр ҡыҙҙарының ҡойма артындағы тормошон, башлыса, ошо сайт аша күҙәтеп бара. Бына улар территорияларында "Енеү сирендәре" ултырта йә сәскә түтәлдәре эшләй, Махсус хәрби операция зонаһында йөрөгән һалдаттар өсөн маскировка селтәре үрә, кейем-һалым тегә йә окоп шәмдәре эшләй, теге бейек ҡойманы сюжетлы һүрәттәр менән биҙәй; бына уларҙың "Илһам" бейеү ансамбле йә вокалистары Бөтә Рәсәй, Халыҡ-ара конкурстарҙан еңеү яулап ҡайтып килә; шул уҡ ҡыҙҙар Мәскәү йә Санкт-Петербург, Орлов йә Майкоп, Татарстанда йә Белоруссияның Могилев ҡалаларында үткән төрлө конкурстар, фестивалдәр, олимпиадалар призерҙары йә еңеүселәре. Сығарылыш уҡыусылары, Берҙәм дәүләт имтихандарын уңышлы тапшырып, Мәскәү гуманитар университетының Халыҡ-ара журналистикаһы факультетына уҡырға ингән, Санкт-Петербург ҡалаһында колледждар тамамлап, һайлаған һөнәрҙәре буйынса үҙ эштәрен башлаусылар ҙа бар икән араларында. Педагогтар командаһы менән тәрбиәләнеүселәр командаһының футбол йә волейбол ярыштарын ҡарағыҙ әле! Уларҙың спорт буйынса ла Рәсәй кимәлендәге уңыштары байтаҡ. Ә ҡайһы мәктәпкә бер көндә Рәсәй Геройы Степан Белов менән Рәсәйҙең атҡаҙанған спорт мастеры, дүрт тапҡыр ҡышҡы Паралимпия уйындары чемпионы Ирек Зариповтың ҡунаҡҡа килгәне бар! Бер аҙнала уларҙа ошо типтағы учреждение етәкселәренең Бөтә Рәсәй семинар-кәңәшмәһе эшләһә, тағы бер нисә көндән коллектив Рәсәй Федерация Советының Мәғариф, фән һәм мәҙәниәт комитеты рәйесе Лилиә Салауат ҡыҙы Ғүмәрова менән Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы вәкилдәрен ҡаршы ала.

### Тәүлек әйләнәһенә күҙәтеү аҫтындалар

Ишембай ҡалаһында ҡыҙҙар өсөн ябыҡ типтағы махсус уҡытыу-тәрбиә биреү учреждениеһы тап ошо режимда йәшәй бөгөн. Учредителе - Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығы. Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән хоҡуҡ боҙған өсөн суд ҡарары менән килгән 11-18 йәшлек ҡыҙҙар реабилитация үтә унда. 50 йылдан ашыу эшмәкәрлек осоронда дүрт меңдән артыҡ уҡыусы реабилитация үткән, һуңғы йылдарҙа тәрбиәләнеүселәр араһында ҡабаттан хөкөм ителеүселәр юҡ. Ошо типтағы учреждениелар Рәсәйҙә барлығы ун биш, ҡыҙҙар өсөн тәғәйенләнгәне - икәү генә. Уларҙың маҡсаты - ауыр хәлгә тарыған уҡыусыларға психологик, медицина һәм социаль ярҙам күрһәтеү, уңышлы реабилитация шарттары булдырыу, социаль мөхиткә яраҡлашыу өсөн тейешле күнекмәләргә һәм оҫталыҡҡа өйрәтеү. Тәрбиәләнеүселәр төп дөйөм һәм урта белем ала. Уҡыу программалары ғәҙәти мәктәптәрҙең белем стандарттарынан айырылмай, тәрбиәүи эш пландары һәм уҡыусыларҙың дәрестән тыш көндәлек расписаниелары ҡыҙҙарҙың йәшәү режимын иҫәпкә алып төҙөлгән.

Ҡыҙҙарҙың тәртибе - тәүлек әйләнәһенә күҙәтеү аҫтында. Контингенттың туктауһыҙ алмашынып тороуы уҡытыу-тәрбиә эшенә үҙ төҙәтмәләрен индерә. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында уларҙың һәр береһенең холоҡтарын, мөмкинлектәрен өйрәнеп, учреждениеның уҡыу һәм тәрбиә системаһы маҡсаттарына һәм талаптарына ярашлы йәшәргә өйрәтергә кәрәк. Реабилитация үткән ҡыҙҙар суд ҡарары буйынса үҙҙәренә тәғәйен ваҡытты тултырып сығыуға (законға ярашлы, улар был учреждениела өс йыл ғына була ала) холоҡтарын төҙәтергә, донъяға икенсе кеше булып бағырға тейеш. Ә тормошто күп ваҡыт ҡара буяуҙар аша танып белергә өйрәнгәндәрҙе үҙгәртеүе, айһай, еңел түгел. Суд ҡарары юҡҡа ғына сығарылмаған бит уларға. Законға ярашлы, эш судҡа барып еткәнгә тиклем тәртиптәре йәшәгән ерҙәрендә төрлө кимәлдәге комиссияларҙа әллә нисә тапҡыр тикшерелгәндәр, атай-әсәйҙәренә штрафтар ҙа һалынғандыр. Ундай балалар үҙгәрһен, хатта "яңынан тыуһын" өсөн нимә эшләргә һәм нисек эшләргә? Макаренконың "хеҙмәт терапия"һы үҙен аҡлаймы? Ниндәйерәк эш алымдары маҡсатҡа ярашлы? Был тәңгәлдә ниндәй тәжрибәләр бар? Рәсәй кимәлендә танылыу тапҡан махсус уҡытыу-тәрбиә биреү учреждениеһының асылыу тарихын, тәүге тәжрибәләрен барлайыҡ әле.



## Тәүге аҙымдар һәм тәжрибәләр

РСФСР Һөнәрселек-техник белем биреү министрлыҡтары Дәүләт Комитеты бойороғо буйынса, 1973 йылда Ишембай ҡалаһы 64-се һөнәрселек училищеһы булараҡ асыла ул. Тәүге директоры Мөхәтдинов Рәшит Ғирфан улы етәкселегендә 300 балаға иҫәпләнгән уҡыу һәм производство корпустары төҙөлә. 1975 йылда училищеға директор итеп Хәбиров Фәрит Барый улы тәғәйенләнә. Ул етәкселек иткән дәүерҙә, тәрбиәләнеүселәргә дөйөм белем биреүҙән тыш, математика, физика, химия, биология фәндәренән, сит телдәр буйынса факультативтар, төрлө йүнәлештәге түңәрәктәр ойошторола. Фәрит Барый улы ауыр холоҡло балаларҙы тәрбиәләү мәсьәләһен Макаренкоса хәл итә: ҡыҙҙар тегенсе-мотористка һөнәрен үҙләштерә башлай, мастерскойҙарҙа 140 эш урынына иҫәпләнгән ете конвейер сафка индерелә. Былярҙан тыш, ҡыҙҙар етмеш гектар ерҙә шәкәр сөгөлдөрө үҫтерә, колхоз-совхоздарға йәшелсә үҫтереү, картуф ҡаҙыу кеүек миҙгелле эштәргә, ҡала эсендәге төҙөлөш эштәренә йәлеп ителә. Тәрбиәләнеүселәрҙең географияһы ла тап шул йылдарҙа киңәйә, училищеға Химки, Балашиха, Истра ҡалаларынан ауыр холоҡло ҡыҙҙар ҡабул ителә башлай. 1985 йылда был учреждение ҡала ҡарамағындағы 1-се һанлы профтехучилище итеп үҙгәртелә һәм, күп тә үтмәй, өлгөлө тәрбиә усағына әйләнә - республика кимәлендә "Юғары мәҙәниәтле училище" исемен яулай.

Фәрит Барый улы Хәбиров, алдынғы эш тәжрибәһе менән уртаҡлашыу ниәтенән, 1991 йылда егерме йылға яҡын алып барған педагогик күҙәтеүҙәрен, үҙенең һәм тәрбиәләнеүселәренең иҫтәлектәрен, хаттарын бергә туплап, "Минең бәхетле йылдарым" тип аталған китап сығара. Өс мең данада баҫылған йыйынтыҡ сыҡҡан йылында уҡ таралып бөтә. Тупланған тәжрибәһен китап итеп йомғаҡлап ҡуйыуға өлгөшкән Фәрит Барый улының эшен 1995 йылдан алып Нафиҡов Ғаяз Садыҡ улы дауам итә. Был йылдарҙа ҡыҙҙар өҫтәмә рәүештә штукатур, маляр һөнәрен үҙләштерә, Фәрит Барый улы башлаған сәскә үҫтереү, училище биләмәһен йәшелләндереү дауам итә. 2008 йылдан башлап училищеның тәрбиәләнеүселәре махсус уҡытыу-тәрбиә биреү учреждениелары араһында федераль кимәлдәге конкурстарҙа әүҙем ҡатнаша башлай, Бөтә Рәсәй предмет олимпиадаларында призлы урындар яулай. 2001, 2007, 2011 йылдарҙа, атамаһы бер-нисә тапҡыр үҙгәртелеп, һуңғыһында федераль кимәлдәге дәүләт бюджет учреждениеһы статусын ала. Әммә ул йылдарҙа, нисек кенә булмаһын, ҡала ситендә урынлашҡан "ябыҡ типтағы" был учреждениеның тормошо ҡала халҡы өсөн, ысынлап та, ябыҡ булды.

## Үҙгәрештәр тарихы

2018 йылда учреждениеның директоры итеп Шаһиева Гүзәл Ғайса ҡыҙы тәғәйенләнде. Ул етәкселек итә башлағандан алып алты йыл эсендә булған үҙгәрештәрҙе һанап бөтөрлөк түгел. Ҡала халҡы менән учреждение биләмәһен айырып торған теге ҡоймаһын бейеклеге генә шул килеш, ҡалған бөтә нәмәгә зауыҡлы, хәстәрлекле хужабикәнең ҡулы ҡағылған. Һәр ерҙә нур уйнай, ҡунаҡ көткәндәге һымаҡ тәртип, таҙалыҡ, бөхтәлек. Бөтә нәмә ялтырап, көлөп, йылмайып тора. Һәр стенд, һәр биҙәлеш, һәр декор еренә еткереп уйланылған. Хәйер, әйҙәгеҙ, Гүзәл Ғайса ҡыҙының учреждениеның ишеген асып ингән йылдан... юҡ, көндән башлайыҡ.

Эшен күптән тутығып бөткән, шығырлап торған тимер карауаттарҙы алмаштырыуҙан башлай ул. Карауаттар менән бергә ҡара-һоро түшәк кәрәк-ярақтары, карауат япмалары ла яңыртыла. Сағыу төҫтәрҙән ҡыҙҙар йәшәгән бүлмәләргә йән кереп ҡала. Уҡыу, спорт, мастерскойҙар өсөн тәғәйенләнгән махсус костюмдар, аltyҡыс-ыулыҡтар, хатта ҡыҙҙарҙың эске кейемдәренә тиклем үҙгәртелә. Улар кейемдәренә генә түгел, үҙҙәренә ҡарап һоҡланып туя алмайҙар. Матур кейемле ҡыҙҙарҙың прическалары ла матур булырға тейеш! Дәрестән тыш эшмәкәрлектәрен ойоштороу иҫәбенә ҡыҙҙарға парикмахер һөнәрен үҙләштереүҙе лә ойоштороға кәрәк, тигән идея шулай тыуа. Ғәмәли дәрестәрҙә ҡыҙҙар прическаларҙы тәүҙә бер-береһенә яһайҙар, һуңынан балалар приютына, ҡарттар йортона йөрөп, оҫталыҡтарын камиллаштыралар. Был тәжрибә һуңынан училищела киң йәйелдерелгән "Изге йөрәктәр" волонтерҙар хәрәкәтенең бер йүнәлеше итеп үҫтерелә. Һаулыҡтары сикләнгән балалар өсөн байрам саралары ойоштороу ҙа - волонтерҙар ҡарамағында. Ярҙамға мохтаждарға ҡулындан килгән тиклем ярҙам итеү, шул эшендән ләҙҙәт алыу ҡыҙҙарҙың күңелен бөтәйтә. Училищеға килеп эләккәнгә тиклем тормоштоң әсеһен байтаҡ татып өлгөргән һөмһөҙ генә ҡыҙҙар, үҙҙәренә ҡарата ошондай хәстәрлекле мөнәсәбәттән, ышаныстан, үҙҙәренең кемгәләр кәрәклеген тойоуҙан, матурлыҡты күрә, баһалай һәм, иң мөһиме, уны үҙ ҡулдары менән тыуҙырырға өйрәнеүҙән бер-ике йыл эсендә үҙгәреп, балҡып китәләр!

Был үҙгәреш артабан төрлө кимәлдә нығытыла. Хәҙер инде ҡыҙҙарға ете һөнәр буйынса белем бирелә: тегенсе, штукатур, маляр, парикмахер, официант, горничная, ландшафт дизайнеры. 6 йүнәлеш буйынса ойошторолған 12 түңәрәк эше киң йәйелдерелгән. "Мөғжизәле мастерок", "Маникюр әлифбаһы", "Мин - видеомонтажер", "Йәш фотограф", "Этностиль" ("Милли буяуҙар" проекты), хореография, вокал, театр түңәрәктәрендә шөғөлләнеүселәрҙең ябай ҡыҙыҡһыныуҙары Рәсәй кимәлендәге төрлө конкурстарҙа танылыу алған. Телестудия эше ойошторолған. "SUVU-life" майҙансығы булдырылған, уның базаһында журналистика менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн тотош мәктәп ("Медиа-старт" проекты) эшләй. Былярҙың барыһы ла үҙ эштәренең оҫтаһы булған педагогтар, тәрбиәселәр етәкселегендә ҡыҙҙар ҡулы менән башҡарыла.

## Һөҙөмтәлә...

Социаль партнерҙар менән һөҙөмтәле эш - Гүзәл Ғайса ҡыҙының иң эшлекле алымдарының береһе. Был эште йәйгә һалыуҙың ыңғай яҡтары бик күп. Ике яҡлы Килешеү сиктәрендә ниндәй генә эштәр эшләнмәй! Береһенән береһе ҡыйыуыраҡ идеяларҙың һәм проекттарҙың тыуып тороуы һәм тормошҡа ашырылыуы - тап ведомство-ара эшмәкәрлектең киңәйеүе һөҙөмтәһе ул. Мәҫәлән, Башҡорт дәүләт медицина университеты менән оҙайлы эш тә үҙ һөҙөмтәләрен бирә. Ҡыҙҙар араһында, үҙ ҡалаларына ҡайтып, медколледждарҙа уҡып йөрөүселәр байтаҡ. Ҡыҙҙар-ҙың артабанғы яҙмыштарын күҙ уңынан ысҡындырмау ҙа килешеүҙәр ярҙамында йәйгә һалынған: Волга буйы федераль округындағы 11 төбәктең бала хоҡуҡтары буйынса вәкилдәре реабилитация үтеп, тыуған ҡалаларына, үҙ ғаиләләренә ҡайтарылғандарҙы мәктәпкә урынлаштырыу, йәмәғәт эштәренә йәлеп итеү мәсьәләләрен контролдә тотасаҡ.

Ҡыҙҙарҙың һәм педагогтарҙың учреждение атҡарған проекттары сиктәрендә алған тәжрибәләре - мәңгелек. Тәжрибә, үҫтерелеп, киңәйтелеп, камиллашып, яңы офоҡтар яулай. Мәҫәлән, өс йыл элек асылған оҫтаханалар һәм оранжерея ысын мәғәнәһендә ақиәт донъяһына әйләнгән хәҙер. Оранжереяла ҡыҙҙар иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем биләмәләрен йәмләп ултырыусы аллы-гөллө сәскә түтәлдәре өсөн үҫентеләр тәрбиәләй. Оранжереяның үҙе ожмахтың бәләкәй генә бер өлөшөләр, моғайын: унда ҡыш көнө лә әллә ниндәй экзотик сәскәләр үҫә, ҡоштар һайрай, ҡыҙҙар ҡулы менән эшләнгән шарлауыҡ-шишмә сылтырап аға... Оранжерея түгел был - һарай, әкиәт һарайы! Ҡыҙҙарҙың күңелдәрендә ҡояш балҡый! Ҡояш нуры уларҙың йөҙҙәрендә лә сағыла. Ғаиләләрендәме, урамдамы, ҡағылып-һуғылып, төрлө бәләләргә тарыуҙары арҡаһында ҡанаттары ҡайырылған ҡошсоҡтарҙы хәтерләткән ҡыҙҙарҙың йөрәк яралары төҙәлгән, күңелдәре бөтәйгән.

Өс йыл эсендә "Беҙ бергә!" девизы аҫтында әллә күпме изге эштәр башҡарып, бер ғаилә ағзаларына әйләнеп бөткән ҡыҙҙарҙың үҙҙәрен бәхетле итеп тойған ерҙә ташлап киткеләре килмәй, илай-илай хушлашалар улар. Уларҙың хушлашыу хаттары буйынса "Үҙебеҙҙең ҡулдар менән төҙөгән бәхет" тип аталған яңы педагогик поэма яҙырға мөмкин. Бынан һуң ҡыҙҙар үҙ ҡулдары менән төҙөгән бәхеттәрен емерергә берәүгә лә юҡ ҡуймаҫ. Әйткәндәй, учреждениеның стенаһында: "Ояларынан осоп төшөп имгәнгән ҡошсоҡтар беҙҙең ҡулдарҙа осорға өйрәнәләр" тигән яҙыу тора. Ҡанаттары ҡайырылып, имгәнгән ерҙәренән ҡабат нығынып, осорға өйрәнеп сыға бит улар. Уларҙың был биләмәлә өлгәшкән уңыштарына, эшләгән һығымталарына, тормош ҡаршылыҡтарын һәм үҙ-үҙҙәрен еңергә өйрәнеүҙәренә ҡарап, бер генә уй килә: осоу түмән - ирек түмән, ирек тәҙерен бер татыған ҡыҙҙар юғарыраҡ үрҙәргә, иркенерәк киңлектәргә ҡарап осор, тормош дауылдарына бирешмәҫ.

**Гәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**

### УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Утыҙ бишенсе хат: "Урыҫ пейзаж сәнғәте хаҡында"

Урыҫ рәсем сәнғәтенең пейзаж жанрында тәшерөлгән әҫәрҙәрендә миҙгелдәргә бағышланған эштәр бик күп: көҙ, яҙ, ҡыш - XIX быуат һәм унан һуңғы осорға ҡараған урыҫ пейзаж сәнғәтенең яратҡан темалары. Һәм иң мөһиме, унда тәбиғәт элементтары үҙгәрешһеҙ бирелә, йыш ҡына ваҡытҡа бәйләләр: башланып ҡына торған йәки ҡара көҙ, яҙғы һыуҙар, ҡар иреүе, ямғыр, йәшен, ҡышҡы ауыр болоттар араһынан саҡ ҡына күренеп торған ҡояш һ.б. Урыҫ тәбиғәтендә миҙгелдән миҙгелгә үҙгәрешһеҙ ҡалған тауҙар, мәңгелек йәшел ағастар кеүек ҙур объекттар юҡ. Урыҫ тәбиғәтендә буялышы һәм тороšо йәһәтенән барыһы ла үҙгәреүсән. Ағастар, бер ҡараһаң, яланғас һәм үҙенсәлекле ҡыш графикаһын тыуҙыра, икенсе ҡараһаң, сағыу йәшел, яҙғы япраҡлы. Көҙгө урман төҫтәре һәм уларҙың ҡуйылығы буйынса иҫ киткес төрлө. Һыуҙың тороштары төрлө, ул көслө йәки талғын елдә үҙгәреп торған һауаның һәм ярҙарҙың төҫөн дә үҙенә ала (Остроуховтың "Сиверко" картинаһы), юлдағы күләүектәр, һауының үҙенең төрлөгә үҙгәреүе, томан, ысыҡ, бәҫ, ҡар. Мәңгелек маскарад, буяуҙарҙың һәм һыҙыҡтарҙың мәңгелек байрамы, мәңгелек хәрәкәт - йыл йәки тәүлек әйләнәһенә.

Барлыҡ был үҙгәрештәр башҡа илдәрҙә лә бар, әлбиттә, әммә Рәсәйҙә Венецианов һәм Мартыновтан алып, улар урыҫ рәсем сәнғәте арҡаһында нығыраҡ күренә һымаҡ. Рәсәйҙә континенталь климат, тап шуға ла ҡыш бигерәк ҡаты һәм йәй ныҡ эҫе килә, һәр аҙнаһы ниндәйҙер яңылыҡ бүләк иткән оҙайлы яҙ, Тютчев данлаған үтә күренмәле һауа, августа ғына хас айырым бер тыныслыҡ һәм Пушкин яратҡан ҡара көҙҙәр була беҙҙә.

Ләкин Рсәйҙә, көньяҡтан айырмашы рәүештә, бигерәк тә Аҡ диңгеҙ йәки Аҡ күл буйҙарында, биш минут һайын тиерлек үҙгәреп торған ғәжәйеп төҫтәр балҡышы тыуҙырып батҡан ҡояшлы кистәр ҙә оҙайлы, һәм шулай уҡ һыҙылып таңдар ата. Ҡайсаҡ шундай ваҡыттар була (бигерәк тә яҙғыһын), ҡояш "уйнай", гүйә, уны берәй оҫта ҡырлағанмы ни. Аҡ төндәр һәм "каралары" ла, декабрҙәге ҡараңғы көндәр төрлө буяуҙар гаммаһын барлыҡҡа килтерел кенә ҡалмай, улар хистәргә лә бай. Һәр урыҫ шиғриәте барлыҡ ошо күп төрлөлөккә яуап ҡайтара.

Шуныһы ҡыҙыҡ, урыҫ рәссамдары сит илдәрҙә йөрөгәндә лә үҙ пейзаждарында ошондай миҙгелдәр, көн алмашыныуын, һауа торошон эҙләгән. Мәҫәлән, ғәжәйеп пейзажсы, үҙенең барлыҡ Италия пейзаждарында рус кешеһе булып ҡалған шундай рәссам - Сильвестр Щедрин.

Урыҫ пейзажына хас үҙенсәлек Венециановта бар. Ул Васильевтың иртә яҙында ла бар. Ул Левитандың ижадында ла эре генә сағыла. Ваҡыттың ошо үҙгәреүсәнлеге һәм тороҡһоҙлоғо - Рәсәй халҡын уның пейзаждары менән берләштергән һыҙат кеүек.

Әммә мауыҡмаҫҡа кәрәк. Милли һыҙаттарҙы арттырып ебәреп, уларҙы айырымлыҡ итергә ярамай. Милли үҙенсәлектәр - улар ни бары ҡайһы бер акценттар ғына, ә башҡаларға булмаған сифаттар түгел. Милли үҙенсәлектәр кешеләрҙе яҡынайта, башҡа милләт кешеләрендә ҡыҙыҡһыну тыуҙыра, ә кешеләрҙе башҡа милләт мөхитенән айырып алмай, халыҡтарҙы үҙ-үҙенә йомолдормай. Халыҡтар - диуарҙар менән уратып алынған төркөмдәр түгел, ә үҙ-ара гармонияла йәшәгән ассоциациялар.

Шундай таң, әгәр мин нимәләр урыҫ пейзажына, йәки урыҫ шиғриәтенә хас тип әйтәм икән, ошо уҡ сифаттар башҡа илдәрҙә һәм халыҡтарға ла ниндәйҙер кимәлдә хас. Халыҡтың милли сифаттары уның эсендә һәм үҙе өсөн генә йәшәмәй, башҡаларға ла кәрәк. Улар ситтән күҙәткәндә һәм сағыштырып ҡарағанда ғына асыҡлана, шуға башҡа халыҡтарға ла аңлашылырға тейеш, улар ниндәйҙер икенсе төрлө халәттә башҡаларҙа ла булырға тейеш.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



### 28 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 0.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.25 Премьера. "Время героев". [16+]
13.25, 14.15, 19.00, 22.40 Информационный канал. [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Сталинград". Новые серии". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Х/ф "УгРозы". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Александр I". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Великая неизвестная война". [12+]
3.20 Х/ф "Кандагар". [16+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00 Т/с "Бирешмә!" [12+]
11.00 Новости недели (на русс. яз.). [12+]
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]
12.15 Квадратные метры. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 0.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Башкорттар. [12+]
16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45, 20.15 Профессионалы. [12+]
18.00 Из жизни доктора. [12+]
19.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
20.30 Специальный репортаж. [16+]
21.00 Специальный репортаж. [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Ҡустәнәс. [12+]
23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
1.30 Спектакль "Красный Паша". [12+]
4.15 Башкирские каникулы. [12+]
5.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]

### 29 АПРЕЛЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 12.25, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Сталинград". Новые серии". [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Х/ф "УгРозы". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Александр I". [16+]
23.30 Х/ф "Тарас Бульба". [16+]
1.45 Д/ф "Война империй". [12+]
3.20 Х/ф "Первый после Бога". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00 Т/с "Не игрушка". [12+]
11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Тайм-аут. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 0.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Городок АЮЯ. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00, 3.30 Автограф. [12+]
17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
19.00, 4.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
20.15 Профессионалы. [12+]
20.30 Д/ф "Олотау йыйыны - Башкирский вайб". [12+]
23.00 Бишбармаҡ. [12+]
1.30 Спектакль "Хаджи эфэнди женится". [12+]

### 30 АПРЕЛЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 12.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
12.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Сталинград". Новые серии". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Х/ф "УгРозы". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! Хором! [12+]
0.50 Х/ф "Народный артист". [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00 Т/с "Не игрушка". [12+]
10.45 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]
11.00 Дорога к храму. [6+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15 Криминальный спектр. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 0.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Физ-ра. [6+]
15.30 Зерно. [6+]
16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 Профессионалы. [12+]
18.00 Тормош. [12+]
19.00, 4.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Защитники Отечества. [12+]
21.00 Спроси у Дубовского.
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Байыҡ. [12+]
1.30 Спектакль "Мелодии весны". [12+]
3.15 Әлләсе... [12+]
5.00 Тайм-аут. [12+]

### 1 МАЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Белые росы". [12+]
8.25 "Играй, гармонь, в Кремле! За Победу!" [12+]
10.15 Д/с Премьера. "Победа". [16+]
11.05 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "Я не могу без тебя". [16+]
16.15 Х/ф "Освобождение". [12+]
18.00 Вечерние новости.
18.20 Премьера. Ежегодная церемония вручения премии "Шансон года". [12+]
21.00 "Время".
21.35 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Сталинград". Новые серии". [16+]
22.35 Премьера. Концерт Олега Газманова "Русский мир". [12+]
0.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Х/ф "Идеальная пара". [12+]
6.40 Х/ф "Управдомша". [12+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Большой праздничный концерт "Песни русского мира".
14.55 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.30 Х/ф "Счастья хватит всем". [16+]
0.55 Х/ф "Дурочка Надя". [12+]
4.18 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45, 15.00, 16.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
8.15, 17.30 Легенды Урала. [12+]
8.30 Ҡустәнәс. [12+]
9.00 Весело живём. [12+]
9.15, 19.00 Ҡурай даны. [12+]
9.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]
10.00, 15.15, 17.45 Профессионалы. [12+]
10.15 Т/с "Не игрушка". [12+]
11.00 Зерно. [6+]
11.30 Гора новостей. [0+]
11.45 Концерт "Моя семья. Тамыр". [6+]
13.30 Атайсал. [6+]
14.00 Все песни о прекрасном… [12+]
15.30 Д/ф "Города - Герои. Москва". [16+]
16.00 Патриот РФ. [12+]
16.15 Дознание. [16+]
17.00 За себя и за того парня. [12+]
18.00 Йома. [6+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00, 2.15 Колесо времени. [12+]
0.00 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!" [12+]
3.15 Башкирские каникулы. [12+]
4.00 Бәхет иле. [12+]
5.30 Территория счастья. [12+]

### 2 МАЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Белая ночь, нежная ночь..." [16+]
8.10 Х/ф "Высота". [0+]
10.15 Д/с Премьера. "Победа". [16+]
11.05 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "Я не могу без тебя". [16+]
16.20 Х/ф "Освобождение". [12+]
18.00 Вечерние новости.
18.20 Премьера. Юбилейное шоу Татьяны Навки. [0+]
21.00 "Время".
21.35 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Сталинград". Новые серии". [16+]
22.35 Премьера. Концерт Димы Билана. [12+]
0.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

4.40 Х/ф "К тёще на блины". [12+]
6.25 Х/ф "Купидоны". [16+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Большой юбилейный концерт Александра Буйнова.
14.35, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
21.30 Х/ф "В ожидании чуда". [16+]
1.00 Х/ф "Новая жизнь Маши Солёновой". [12+]
4.30 Х/ф "Майский дождь". [12+]

### БСТ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45, 16.30 Автограф. [12+]
8.15, 17.30 Легенды Урала. [12+]
8.30 Ҡустәнәс. [12+]
9.00 Весело живём. [12+]
9.15 Мама. [12+]
9.30 Йома. [6+]
10.00, 17.45 Профессионалы. [12+]
10.15 Т/с "Не игрушка". [12+]
11.00 Зерно. [6+]
11.30 Гора новостей. [6+]
11.45 Концерт "Весна". [6+]
12.15 Спектакль "Сумерки". [12+]
14.00 Все песни о прекрасном… [12+]
16.00 Д/ф "Города - Герои. Ленинград". [16+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Башкортостан #вместе. [12+]
19.00 Концерт Айгуль Сагинбаевой. [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
22.00 СВОих не бросаем. [12+]
22.15 Письма солдатам. [12+]
23.00 Байыҡ. [12+]
0.00 Караоке по-башкирски. [12+]
1.00 Спектакль "Любовница". [12+]
3.15 Әлләсе... [12+]
4.00 Бәхет иле. [12+]
5.00 Хазина. [12+]
5.30 Территория счастья. [12+]

### 3 МАЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Летучая мышь". [0+]
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.10 Д/с Премьера. "Победа". [16+]
11.05 Д/с Премьера. "MONEYпуляторы. "От звонка до звонка". [16+]
11.50, 12.25 Т/с "Я не могу без тебя". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
15.35 Д/ф "Обыкновенный фашизм". Фильм Михаила Ромма. [16+]
16.50 Х/ф "Освобождение". [12+]
18.00 Вечерние новости.
18.25 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.50 Х/ф "Кентавр". [18+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

6.00 Х/ф "В тесноте, да не в обиде". [12+]
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.35, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Петросян-шоу. [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Рецепт на любовь". [16+]
0.25 Х/ф "Прекрасные создания". [12+]
3.45 Х/ф "Васильки для Василисы". [0+]
5.24 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Хазина. [6+]
8.15, 21.00 Легенды Урала. [12+]
8.30 Ҡустәнәс. [12+]
9.00 Весело живём. [12+]
9.15 Ҡурай даны. [12+]
9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
9.45 СВОих не бросаем. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Книга сказок. [6+]
10.45 Әкиәтсе. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 Асыш. [6+]
11.30 Лит-ра. [6+]
12.00 Елкән. [6+]
12.30 Ете егет. [12+]
13.30 Башкорттар. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Д/ф "Города - Герои. Мурманск". [12+]
16.30, 2.30 Колесо времени. [12+]
17.30 Все песни о прекрасном… [12+]
17.45 Квадратные метры. [12+]
18.00 Специальный репортаж. [12+]
19.00 Уфимский ансамбль песни и танца "Мирас" представляет: "Трилогия искусства". [12+]
20.45 Сәнгелдәк. [6+]
22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30, 1.45 Новости недели (баш. яз.). [12+]
23.15 Башҡорт йыры. [12+]
0.00 Спектакль-балет "Журавлиная песнь". [12+]
3.30 Д/ф "Олотау йыйыны - Башкирский вайб". [12+]
4.00 Бишбармаҡ. [12+]
4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
5.30 Автограф. [12+]

### 4 МАЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 Д/с Премьера. "Победа". [16+]
11.10 "Жизнь своих". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Они выбрали - Родину". [16+]
12.50 Д/ф "Белое солнце пустыни". От заката до восхода". [12+]
13.45 Х/ф "Белое солнце пустыни". К 55-летию фильма. [12+]
15.20 Д/ф "Обыкновенный фашизм". Фильм Михаила Ромма. [16+]
16.40 Х/ф "Освобождение". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 Три аккорда. [16+]
21.00 "Время".
23.00 Д/с "Победа". [16+]
23.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.30, 2.25 Х/ф "Однажды и навсегда". [16+]
7.10, 1.35 Д/ф "Знамя Победы". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 16.00 Вести.
12.00 "Наши. Военкоры". [12+]
12.30 Х/ф "Джентльмены удачи". [6+]
14.05 Х/ф "Бриллиантовая рука". [0+]
16.50 "Песни от всей души". [12+]
19.00 Вести недели.
20.00 "Россия. Кремль. Путин. 25 лет".
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Тормош. [12+]
8.15, 18.45 Легенды Урала. [12+]
8.30 Ҡустәнәс. [12+]
9.00 Весело живём. [12+]
9.15 Мама. [12+]
9.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Тирмәкәй. [6+]
10.45 Городок АЮЯ. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 Асыш. [6+]
11.30 Сулпылар. [6+]
12.00 Атайсал. Знай наших! [6+]
12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]
13.15 Башкирские каникулы. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
15.00 Дорога к храму. [6+]
15.30 Честно говоря. [12+]
16.15 Д/ф "Города - Герои. Тула". [12+]
16.45 Все песни о прекрасном… [12+]
17.00 Спектакль "Между небом и землей". [12+]
18.30 Профессионалы. [12+]
19.15 Әлләсе... [12+]
20.00 Патриот РФ. [12+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Автограф. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30, 6.00 Новости недели (на русс. яз.). [12+]
22.15, 5.30 Республика LIVE #дома.
22.45 Гала-концерт "Башкорт йыры-2024". [12+]
1.30 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]
3.45 Письма солдатам. [12+]
4.00 Бишбармаҡ. [12+]
5.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Апрель - Май (Шәүүәл - Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 28 (30) дүшәмбе | 3:15 | 5:43 | 13:30 | 18:20 | 20:45 | 23:13 |
| 29 (1) шишәмбе | 3:14 | 5:41 | 13:30 | 18:21 | 20:47 | 23:14 |
| 30 (2) шаршамбы | 3:13 | 5:39 | 13:30 | 18:22 | 20:49 | 23:15 |
| 1 (3) кесе йома | 3:11 | 5:37 | 13:30 | 18:23 | 20:51 | 23:16 |
| 2 (4) йома | 3:10 | 5:35 | 13:30 | 18:25 | 20:52 | 23:17 |
| 3 (5) шәмбе | 3:09 | 5:33 | 13:30 | 18:26 | 20:54 | 23:18 |
| 4 (6) йәкшәмбе | 3:08 | 5:31 | 13:30 | 18:27 | 20:56 | 23:19 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ӨФӨМ - БАШ ҠАЛАМ!




**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**14-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡолға. Стрелка. Лысма. Тараҡ. Белка. Айвенго. Барабан. Төлкө. Аврора. Кокос. Мәк. Ишара. Амур. Ҡуян. Илһам. Урам. Иван. Поехали. Асҡыс. Аполлон. Алты. Ул.

**Вертикаль буйынса:** Байконур. Терешкова. Балсыҡ. Сана. Октава. Ҡанат. Ҡорал. Монах. Аҡыллы. Смеловка. Ил. Видео. Алаша. Нил. Бот. Ирина. Өлөш. Кедр. Алмас.

*Ah-Ah!*

# КЕМ ҺАМАН ЭСӘ?

**Башҡортостанда 2025 йылдың ғинуар-февралендә спиртлы эсемлек менән ағыуланыу осрағы кәмегән. Күрһәткес 100 мең кешегә 4,3 тәшкил итә. Сағыштырыу өсөн: 2024 йылдың ошо уҡ осоронда күрһәткес 4,5-тән бер аҙ юғарыраҡ булған.**

Өфөлә (69 осраҡ), Стәрлетамаҡта (17), Белоретта (16), Октябрьскийҙа (11), Бәләбәйҙә, Ишембайҙа (4-әр), Дүртөйлөлә (3), Нефтекамала (2), Салауатта, Учалыла (1-әр), Белоретта (9), Өфөлә (6), Иглиндә, Тәтешлелә (4-шәр), Бүздәк, Дүртөйлә (3-шәр), Мәсетле, Мишкә, Туймазы (2-шәр), Бишбүләк, Борай, Бөрйән, Ғафури, Илеш, Көйөргәҙе, Мәләүез, Стәрлебаш, Учалы районларында (1-әр) ағыуланыу осрағы теркәлгән. Роспотребнадзор мәғлүмәттәре буйынса, йыш ҡына аныҡланмаған спирт (48,8%) һәм этанол (45,4%) менән ағыуланалар. Ике ай эсендә 19 кеше сифатһыҙ алкоголдән вафат булған. 2024 йылдың ғинуар-февралендә 25 ине. Шулай итеп, үлем күрһәткесе 100 мең кешегә 0,5 тәшкил итә (2024 йылда 0,6). Үлем осраҡтары Өфөлә (3), Стәрлетамаҡта, Учалыла (1-әр), Бүздәк (3), Иглин, Өфө (2-шәр), Бөрйән, Ғафури, Мәләүез, Стәрлебаш, Тәтешле, Туймазы, Учалы районларында (1-әр) теркәлгән. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда йыл һайын "Айыҡ ауыл"конкурсы үткәрелә. Ауылдарҙа йәшәүселәрҙең күбеһе аңлы рәүештә үҙ тораҡ пункттарын алкоголдән азат территорияларға әйләндерергә ҡарар итә. Конкурсты уҙғарыуҙың биш йылында республика этабында - 51 ауыл, муниципаль этапта 260-тан ашыу ауыл еңеү яуланы.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25 апрель "Ҡыҙ урлау"** (М.Кәрим, И.Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**25, 26 һәм 29 апрель "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Күлбаев), драма. 12+

**27 апрель "Дейеүкәй"** (С. Лебо, А. Абушахманов). 12+

**29 апрель "Звезда Героя"** (Ф.Әхмәҙиев, О. Мусина), һуғыш осоро хроникаһы. 12+

**30 апрель "Ханума"** (А. Цагарели, Р. Хәкимов), музыкаль комедия. 12+

**1 май "Седина в бороду или невеста из Имеретии..."** (Б. Рацер, В. Константинов, М. Күлбаев), музыкаль комедия. 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**25 һәм 26 апрель "О героях былых времен"** (М.Батурин). 12+

**26 апрель "Три поросенка"** (Д.Гараева). 12:00 һәм 15:00. 0+

**27 апрель "Красная шапочка"** (Д. Гараева).12:00 һәм 15:00. 0+

**29 һәм 30 апрель "Урал Батыр эҙҙәре буйлап"**, интерактив квест. 14:00. 6+

**1 май "Шесть чувств"** (Н. Беззубова, А.Верхоземский). 18:00. 6+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**25 апрель "Эй яҙмыш, яҙмыш..."** Әлфиә Юлсуринаның шәхсән концерты. 12+

**26 апрель "Джаз: вчера, сегодня, завтра"** Олег Касимов етәкселегендә БДФ-ның Биг-бэнды концерты. 16+

**29 апрель "Zа тебя, Родина-мать!"**, "Тауыш" вокаль проекты сиктәрендә концерт. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**26 апрель "Кошкин дом"** (С. Маршак). 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**25 апрель "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр"** (В.Гуркин, М. Күлбаев), комедия. 12+

**26 апрель "Дала буйлап икәү бара"** (Э. Йәһүҙин), музыкаль комедия. 12+

**27 апрель "Нисек кейәүгә сығырға?!."** (Н.Ғәйетбаев). 12+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**27 һәм 28 апрель "Йырланмаған йырым һин...",** (В.Исхаҡов, А. Абушахманов), музыкаль милодрама. 16+

**29 апрель "Сибай"** бейеү ансамбле концерты. 16+

**30 апрель "Эйфория"** заманса бейеүҙәр академияһының отчет концерты. 6+

## БР Милли музейы

**25 апрель "Ҡарға туйы"** сараһы. 12:00. 6+

**26 апрель "Чернобыль беҙҙең йөрәктәрҙә"** сараһы. 14:00. 12+

**30 апрель "Музей шаршамбыһы"** акцияһы сиктәрендә "Малахит ҡумта" сараһы. 19:00. 6+

✓ *Етмәһә, ошо тәржемә йырҙарын башҡарыусылар күп осраҡта тәржемәсене иғлан итергә "онота". "Рәхмәтһеҙ" хеҙмәт тигәне ошо инде. Ниңә был һүҙ былай, тегенеһе тегеләй тиеүселәр ҙә табыла.*



ӘЙҘӘГЕҘ...

# БӨЙӨК ЕҢЕҮ ЙЫРҘАРЫН...

## башҡортса йырлайыҡ!




**Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында еңеүгә өмөт, дошмандарҙы ҡырыуға дәрт өҫтәүсе йырҙар бөгөнгө көндә лә халыҡ күңелендә йәшәй. Әлбиттә, улар Бөйөк Еңеү көндәрендә йышыраҡ яңғырай. Беҙ йәшәгән Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт теле булған рус телен башҡорттар ҙа ярата. Әммә Башҡортостаныбыҙҙың икенсе дәүләт теле - башҡорт теле лә беҙгә бик ҡәҙерле. Нимә генә тиһәк тә, рус телендәге ниндәй генә йырҙы ишетһәк тә, күңелебеҙҙә улар башҡорт телендә тәржемәләнеп, хәтерҙә ҡала. Быны аңлаһаҡ та, аңламаһаҡ та. Шуға күрә мин ошо күңелдәге йыр һүҙҙәрен шиғри башҡорт теленә әйләндерҙем.**

Әйтергә кәрәк, йыр һүҙҙәрен башҡа телгә тәржемәләү - бик ауыр һәм рәхмәтһеҙ хеҙмәт. Сөнки шиғыр һымаҡ яҙылһа ла, был - йыр һүҙҙәре. Ә йыр һүҙҙәренең ныҡлы ҡануны - ритм һәм һуҙынҡы өндәр үҙ тәртибендә булырға тейеш, йәнә рифманы ла оноторға ярамай. Кем музыкант, белә инде, рус һәм башҡорт көйҙәренең ритматоникаһы башҡа. Башҡорт һүҙҙәрен тап рус ритмына тап килтереүе - үтә лә ҡатмарлы эш. Рус телендә һүҙҙәргә баҫым тәүге ижектәргә төшһә, башҡорт һүҙҙәренең баҫымы аҙаҡҡы ижектә. Тимәк, рус йырына тап килһен, был һүҙҙәрҙе тейешенсә һуҙып йырлап булһын өсөн бер һүҙҙең әллә нисәмә төрлө вариантын табырға, иң ҡыҙығы, баҫым тап килерлек ҡыҫҡа һүҙҙәр эҙләргә кәрәк. Шуға күрә лә бик популяр булһа ла, рус йырҙарын башҡорт теленә тәржемәләүселәр юҡ кимәлендә. Мин дә бының менән махсус рәүештә шөғөлләнергә ваҡытымды йәлләйем. Был ауыр хеҙмәт урынына бар күңелеңде биреп, ләззәт кисереп, бер-нисә яңы шиғыр яҙыуҙы өҫтөн күрәм.

Етмәһә, ошо тәржемә йырҙарын башҡарыусылар күп осраҡта тәржемәсене иғлан итергә "онота". "Рәхмәтһеҙ" хеҙмәт тигәне ошо инде. Хатта аҙаҡтан, әле йырлап та ҡарамайынса, ниңә был һүҙ былай, тегенеһе тегеләй тиеүселәр ҙә табыла (Әлбиттә, минең тәржемә лә, бәлки, идеал түгелдер, йырсылар һүҙҙәрҙе үҙҙәре теләгәнсә алыштыра ла алалыр).

Әле һеҙгә тәкдим иткән йырҙар - Еңеү яулаған батырҙарыбыҙ рухына бер аманат! Башҡортостаныбыҙ батырҙары күңелендә лә улар үҙ ваҡытында ошондай шиғыр юлдары булып яңғырағандыр... Һәр хәлдә, был йырҙың башҡортса яңғырарға хоҡуғы бар!

Әйткәндәй, данлыҡлы "Катюша" көйөнә "Зәйтүнәкәй" тип йырлаусылар бар. Оҡшай икән, рәхим итегеҙ. Минеңсә, ул йырҙы халыҡ сығарған. Алда әйткәнемсә, көй артынан күңелендә яңғыраған һүҙҙәрҙе яҙған. Әммә, ысынын ғына әйткәндә, ул йырҙағы һүҙҙәр рус телендәге һүҙҙәр мәғәнәһенә бик тап килмәй шул. Шулай уҡ ошо көйгә "Сәлимәкәй", "Зөлхизәкәй" һәм башҡа төрлө исем ҡушып, ниндәй һүҙ теләһәгеҙ, шуны әйтеп тә йырлай алаһығыҙ. Хәҙер көйҙәрҙе урлау модала бит. Улар барыһы ла шул көйгә яҙылған халыҡ йыры буласаҡ, данлыҡлы "Катюша" булмаясаҡ. Бөтөн донъяла, инглиз, төрөк, ҡытай, япон телдәрендә лә Катюша исеме Катюша булып ҡала. Бер заман телевизорҙан ҡытайҙарҙың сәхнә тултырып хор менән, үҙенсәлекле акцент менән, Катюша тип йырлап торғандарын күреп һоҡланғайным. Бер ҙә үҙҙәренең ҡатын-ҡыҙ исеменә алыштырмағандар уны. Әйҙә, беҙ ҙә йыр авторҙарын ихтирам итәйек! Уны тап Катюша тип йырлап, Еңеүгә илткән яу ҡырҙарында башын һалған батырҙарыбыҙ рухына тап төшөрмәйек. Беҙҙең хатта акцентыбыҙ ҙа юҡ, ауыҙ тултырып Катюша тип йырлайыҡ!

**Лилиә ҠӘЙЕПОВА.**

### КАТЮША

*Михаил Исаковский шиғыры*
*Матвей Блантер музыкаһы*
*(Башҡортса текст авторы Лилиә Һаҡмар)*

Сәскә ата алмағас һәм груша,
Ә йылға томанға ябына,
Яр буйына сыҡҡайны Катюша,
Ағиҙелдең бейек ярына.

Яңғыратты йыры тирә-яҡты
Алыҫтағы егет хаҡында,
Һөйөү йырын йырланы Катюша,
Һөйөм, тине, һәр бер хатында.

Ишетелһен йырым алыҫтарға,
Осһон йырым ҡояшҡа тиклем,
Илем сиген һаҡлаған һалдатҡа
Катюшаның сәләмен еткер!

Хәтерлә һин, күҙ алдына килтер:
Ябай ҡыҙҙың һағынып йөрөүен,
Һаҡла, һалдат, ғәзиз тыуған илде,
Ә Катюша һаҡлар һөйөүен!

Сәскә ата алмағас һәм груша,
Ә йылға томанға урана,
Яр буйына сыҡҡайны Катюша,
Ағиҙелдең бейек ярына.

### ЗӘҢГӘР ЯУЛЫҠ

*Гарри Петербургский музыкаһы*
*Яков Галицкий шиғыры*
*(Башҡортса текст авторы - Лилиә Һаҡмар)*

1.Зәп-зәңгәр ебәк яулығын
Һинең яурында ине.
Был күрешеүҙе
Серләшеүҙәрҙе
Онота алмам тинең.

Йөрәк тулай,
Төнөн шулай
Яҙмыш беҙҙе айырҙы...
Ҡайҙа ҡалды һуң,
Зәңгәр яулығың,
Ҡәҙерлемде һағындым.

2. Индәрендә Зәңгәр яулыҡ,
Йөрәктең моңға тулғаны,
Хушлашҡан мәлем
Хәтеремдәлер
Зәңгәр яулыҡ болғаның.

Бөгөн бында
Йәнкәйем юҡ шул янда
Һиҙеп торам - ул,
Мине уйлай ҙа
Зәңгәр яулығын ала.

3.Хаттарыңды алһам күрәм
Оҙатып торғаныңды...
Хат юлдарынан
Таң томанынан
Яулығын болғауыңды.

Яуға мине
Оҙата наҙлы бер һүҙең.
Һәр саҡ янымда
Ҡурсып йәнемде
Йөрәйһөң кеүек үҙең.

4.Шинелдәрҙә күпме яугир
Яулыҡтарҙы һаҡлайҙар,
Наҙлы һүҙҙәрҙе,
Йән һөйгәндәрҙе
Исләп, туптар атҡанда.

Һөйгән йәрҙәр
Иҫтән сыҡмай аҙ ғына.
Йөрәк, ярһыма,
Туптар атыла,
Зәңгәр яулыҡ хаҡына.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠЫЛҺЫҘ ЕГЕТ...

## ауыҙлыҡһыҙ ат

Ҡойоға таш ташлау еңел, алыуы ауыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Күп уйлау мөһим түгел, ә яратыуҙың күп булыуы мөһим, шуның өсөн һөйөү тыуҙыра торған нәмәләрҙе эҙләгеҙ.

**(Тереза Авильская).**

Тормош - ул сценарий тексына яҙылған оло бер мәрәкә.

**(Чарли Чаплин).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ғаилә йәшәгән: ире, ҡатыны, мәктәп йәшендәге ҡыҙҙары. Татыу йәшәгәндәр, һәр хәлдә, күршеләре шулай тип иҫәпләгән, сөнки был ғаиләлә талашҡан, бәхәсләшкән тауыш ишетелмәгән, атай менән әсәй балалары өсөн өҙөлөп торған. Әммә ҡыҙ бала уларҙың ғаиләһе бәхетле тип иҫәпләмәгән. Сөнки...**

**Бер саҡ ул мәктәптән ҡайтып, шым ғына өй ишеген асып инә һәм ата-әсәһенең бер-береһенә нәфрәтләнеп талашҡанын ишетеп ҡала. Баланың ҡайтып ингәнен һиҙенеү менән ата-әсә талашыуҙан туҡтай, ә йөҙҙәрендә - йылмайыу. Был хәл ҡыҙыҡайҙы шул тиклем аптырата. Ҡыҙыҡай үҫеп, үҫмер ҡорона ингәнсе дауам итә бындай хәл: ата-әсә бер-береһен күрә алмаһа, үҙ-ара талашһа ла, бала алдында үҙ-ара мөнәсәбәтен һиҙҙермәйҙәр. Бер саҡ ҡыҙы әсәһе менән әйтешеп китә. Шул саҡта әсә: "Һин ҡалай игелекһеҙ! Беҙ атайың менән һинең өсөн үҙ бәхетебеҙҙән баш тарттыҡ. Һин тулы ғаиләлә үҫһен тип, айырылышманыҡ..." - тип ысҡындыра. Ҡыҙыҡай әсәһенең бер саҡ теленән ысҡынасаҡ был һүҙҙәргә әҙер була, сөнки ул атаһы менән әсәһе араһындағы мөнәсәбәт тураһында гел уйланып йөрөй, үҙенсә һығымталар яһай. Һәм шул һығымтаһын әсәһенең йөҙөнә бәреп әйтә лә инде: "Мин һеҙҙең бер-берегеҙҙе яратмауығыҙҙы белә инем. Үҙегеҙҙе бәхетһеҙлеккә дусар иттегеҙ ҙә, хәҙер шуның өсөн мине ғәйепләйһегеҙ. Мин бит һеҙҙең икегеҙҙе лә яратам, шуға ла мин һеҙҙең икегеҙҙең дә бәхетле булыуығыҙҙы теләйем. Бергә бәхетле була алмағас, айырым бәхетле булырға тырышырға ине. Мин һеҙгә сиратлап йөрөр инем, һеҙҙең шатлыҡҡа, бәхеткә ҡыуанып инем. Минең эргәмдә ике кеше булыуы мөһим, тип уйланығыҙмы? Юҡ, минең эргәмдә ике бәхетле кеше булыуы мөһим ине. Мине һеҙҙе бәхетле итеп күреү бәхетенән мәхрүм иттегеҙ. Һеҙ миңә, бәхетле ғаилә нисек булырға тейеш, тигән өлгөнө күрһәтмәнегеҙ. Хәҙер уны, бәхетле ғаилә өлгөһөн, минең үҙемә уйлап сығарырға тура киләсәк. Әммә мин һеҙҙең кеүек мөхәббәтте үлтереп быға өлгәшмәйәсәкмен..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 25016

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33.
(453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
24 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы –
**ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 788